✓ *Нимә ул йәшәү мәғәнәһе, нимә ул бәхет, тигән мәңгелек кеше аңын албырғатҡан һорауҙарға яуап бик ябайҙыр ул. Йәшәү мәғәнәһе - үҙ хикмәтеңде эҙләүҙә, ә бәхет - шул хикмәтеңде табып, үҙләштереп, кешелеккә мәнфәғәтең тейеүҙә.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

24-30 МАРТ (БУРАНАЙ) 2007 ЙЫЛ

№12 (222)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күмәстә...**

Алла һүҙе



3

**Уҡытыусы үҙе уҡымаһа,**

уҡытыусы булыуҙан туҡтай



8-9

**Сәнсәрҙәр...**

сәнстерә



13

**Халыҡтан сыҡҡанбыҙ,**

халыҡтыҡы булырға тейешбеҙ



16

**ТВ ПРОГРАММАҺЫ**

14-15

*"Тәбиғәте шифалы был бай илдең бөтөн милкенә ирекле башҡорттар хужа. Улар бөтөн ер аҫты хазиналарын, тауҙарҙа һәм йылға үҙәндәрендә бик күп алтын, көмөш һәм аҫыл таштар ятыуын яҡшы белә. Ләкин халыҡтың байлығы ер аҫты хазиналарында түгел, ә иркен көтөүлектәрҙә, иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡы өйөрҙәрендә, балығы мыжғып торған йылғаларында, башҡорттоң ҡалъянындағы һуңғы уғы атылһа ла, кейек-януарҙары һәм ҡоштары һис кәмемәҫ урмандарында. Ә умарталары иһә мөлдөрәп торған хуш еҫле йүкә балы менән һәр саҡ туп-тулы буласаҡ. Шулай булғас, ниңә башҡорт тимер, кәйлә, йә болан мөгөҙө менән уның күкрәген йыртҡылап, тауҙарын аҡтарһын, ти?.. "*

**Ф.Д.Нефедов. "Өскүл" хикәйәһе.**



Был фотоһүрәттә һеҙ Учалы районы Зәйнәкәй почта бүлексәһе начальнигы Нәжибә Ибраһимованы күрәһегеҙ. Әлбиттә, ул "Киске Өфө"нөң тоғро дуҫы һәм аҡыллы һүҙҙе, күңелгә ғәм, сәм булып уйылыр фекерҙе һанлай, баһалай торған кеше. Гәзитебеҙҙе тәүге һанынан уҡ үҙе һәм почта бүлексәһенә ҡараған 6 ауылды хеҙмәтләндереүсе почтальондар Флүр Ниғмәтуллин, Лидия Килмөхәмәтова һәм Сәхийәр Йосоповтар алдырып уҡый башлайҙар. Шунан инде яңы баҫма менән халыҡты таныштыралар. Бөгөн был бүлексәгә ҡараған ауылдарҙа ғына 200-ләп кеше "Киске Өфө"нө уҡый.

***Әйткәндәй, икенсе ярты йыллыҡҡа "Киске Өфө"гә ташламалы хаҡ менән яҙылыу бара: 237 һум 54 тин. Квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрергә онотмағыҙ. Индексыбыҙ – 50665.***

ИШАРА

# ТӘРӘН УЙЛАНҒАН МӘЛ,

## йәки Учалы һәм Бөрйән райондарына сәйәхәт тәьҫораттары

**Үткән аҙнала Учалы районының Зәйнәкәй, Амангилде, Илсе, Сәфәр, Учалы, Бөрйән районының Әтек, Байғаҙы, Янһары, Иҫке Собханғол, Байназар, Яуымбай ауылдарында булып, унда йәшәүсе уҡыусыларыбыҙ менән осраштыҡ. "Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә", тигәндәй, халыҡ менән йәнле аралашыуҙа күңелебеҙҙә төрлө уй-фекерҙәр яралды. Үҙебеҙ өсөн яңылыҡ тип тапҡан хәл-күренештәр шаһиты ла булдыҡ. Халыҡ менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәрҙә, асылда, "Киске Өфө" гәзитен таратыу, артабан камиллаштырыу хаҡында һүҙ алып барырға тырышһаҡ та, әңгәмәләр күберәк халыҡтың йәшәйеше, рухи тормошо, йәш быуынды тәрбиәләү кеүек заман мәсьәләләренә ҡоролдо. Быға ҡыуандыҡ ҡына. Фекерҙәрҙең бер нисәһенә туҡталып үтәйек.**

### АЙЫРАТА ДИҠҠӘТ

Һәр ауыл клубында һәм мәктәптә үткән кисәләрҙә осрашыуға килеүселәрҙең үҙ-үҙен тотошонда, һын-һыпатында айырата диҡҡәтте күрмәү һәм тоймау мөмкин булмағандыр. Һәр хәлдә, беҙ бындай кәйефте тойҙоҡ һәм уны "Халыҡтың тәрән уйланған мәле" тип баһаланыҡ. Үкенескә ҡаршымы, бәхеткә күрәме, беҙ илебеҙҙең бөйөк һынылыштар алған дәүерендә йәшәйбеҙ. Бәхәс юҡ, бар нәмә, һәр кешенең киләсәге уның үҙенән тора, йәғни бөйөк үҙгәрештәрҙе "бәхеткә күрә" тип баһалаған кеше һәр яңылыҡтың прогрессив яҡтарын күреп, үҙенең файҙаһына эшләтә лә белә. Осрашыуҙарҙа ололар ыңғайына мәктәп уҡыусыларының да, кескәйҙәрҙең дә беҙҙең һөйләгәндәрҙе аңларға тырышып, ике-өс сәғәт һуҙымында оло сабырлыҡ күрһәтеп тыңлай белеүҙәре һоҡландырҙы.

Учалының Зәйнәкәй, Амангилде (Сәнсәр) ауылындағы осрашыуҙар бик күңелле, бер һүҙ менән әйткәндә, мәрәкәһе менән республикала дан ҡаҙанған Сәнсәр ауылы рухында үтте (Әйткәндәй, Сәнсәрҙәрҙең мәрәкәһен ошо һандың 13-сө битендә уҡығыҙ.)

**(Аҙағы 2-се биттә).**

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ

# Һәр кемдең үҙ холҡо

**"Кеше өлгөһөнә үлсәп, кейем киҫмә".**

Ысынлап та, һәр кемдең үҙ үлсәме. Кеше өлгөһөнә ҡарап, үҙ өлгөңдө булдырыу яҡшы, әммә кеше өлгөһө буйынса үҙеңә кейем киҫеү һис тә дөрөҫ түгел.

"Кеше булыр кешенең кешелә булыр эше" тигән мәҡәлдә әйтелгәнсә, кешенән өйрәнергә, ыңғай яҡтарын алырға һәм үҙ ҡалыбыңда үҙгәрештәр индерергә кәрәк. Фәҡәт үҙ ҡалыбыңда ғына. Һәр нәмәнең үҙ ҡалыбы була. Бөтөн үҙгәрештәр ҙә ошо ҡалып эсендә барһа, һәр саҡ отошло була.

Айырым кешегә ҡарата ла, бала тәрбиәләүгә ҡарата ла был мәҡәл дөрөҫ. Һәр кемдең үҙ фиғеле, үҙ холҡо. Бала тыуған саҡта уҡ ҡанына һалынған заң менән тыуа. Шуның өсөн "ана, уның балаһы шулай эшләгән, беҙ ҙә шулай итәйек", тигән фекер менән генә бала үҫтереп тә, тәрбиәләп тә булмай.

Балаға һөнәр һайлаған саҡта ла ҡанына һалынған фиғелдән сығып эш иткәндә, яңылыш булмаҫ. Ҡайһы берәүҙәр балаға һөнәрҙе ҡанына һалынған һәләтен иҫәпкә алмайынса, ниндәйҙер икенсе (таныштыҡ, еңеллек һәм башҡа) маҡсаттарҙы ҡуҙҙатотоп һайлай. Һөҙөмтәлә, бала барыбер үҙ ҡалыбына ҡайта. Ҡайтмаһа, ғүмере буйы күңеләндә бушлыҡ тояи.

Ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙә лә был мәҡәлде иҫтә тоторға кәрәк. "Тегенең ире (йәки ҡатыны) шулай эшләгән, ә һин улай түгел", тигән дәғүәләр булғылай ҡайһы бер ғаиләлә. Был осраҡта ла һәр кешенең, ғаиләләге мөнәсәбәттең үҙенсәлеген иҫәпкә алырға кәрәк.

Миңә бер ғаиләләге бәхәстең шаһиты булырға тура килгәйне. Ҡатын иренә былай тип дәғүә белдерә:

- Күршеләге бабай иртә менән тороп, тотош ихатаһын таҙарта, малын баға, ыңғайына һыу көйәнтәләп ҡайта...

- Ярай, әбейе үлгәс, шул ҡартҡа барырһың. Мин хаҡлы ялға сыҡмайынса, уның һымаҡ була алмаясаҡмын, - тине ул саҡта колхозда зоотехник булып эшләгән ире.

Халыҡта "Һөт менән кергән һөйәк менән китер" тигән мәҡәл бар. Тимәк, тәрбиәлә лә, ниндәйҙер дәғүә белдергән саҡта ла уға "һөт менән ни бирелгәнлегә" иғтибар итергә кәрәк.

**Беҙҙең илебеҙҙәге һәр төрлө өлкәләге үҙгәрештәргә, мәғариф системаһында индерелгән "яңы алымдарға", ауыл хужалығындағы һәм башҡа шундай яңылыҡтарға ла ҡағыла мәҡәлдең әрәсәһе. "Теге илдә шулай эшләгәндәр, был илдә былай эшләгәндәр" тип һуҡыр рәүештә эйәреү, үҙ илеңдең, үҙ халҡыңдың үҙенсәлеген иҫәпкә алмау арҡаһында ниндәй генә тайпылыштарға дусар булмайбыҙ.**

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

ИШАРА

# ТӘРӘН УЙЛАНҒАН МӘЛ,

## йәки Учалы һәм Бөрйән райондарына сәйәхәт тәьҫораттары

Сәфәрҙә "Шәжәрә байрамы"на тура килдек. Тыуған еренә, халҡының рухына тоғролоғо менән билдәле сәфәрҙәр оло байрамға етди әҙерләнгән. Мәғариф донъяһында "Сәфәр урта мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Рәмзилә Ҡәлимова дәресе феномены" тигән рәсми булмаған төшөнсә бар. Был юлы беҙ ул феноменның "Шәжәрә байрамы"нда нисек балҡыуын күрҙек. Яҙыусы Мәрйәм Бураҡаеваның "Тормош һабаҡтары" дәреслеге тәүгеләрҙән булып Сәфәр мәктәбендә һынау үткән. Байрамда Мәрйәм Бураҡаеваның ҡатнашыуы сараға оло мәртәбә өҫтәне. Ошо ауылда тыуып үҫкән шағирә Рәмзилә Хисаметдинова:

Ирәмәлдәй алтын һоһналар ҙа,

Семтем тупрағын да мин бирмәм,-

тип үҙенең тыуған тупрағына, атайсалына ҡайнар һөйөүен һәм мөнәсәбәтен белдергән. Сәфәрҙәрҙең ошо саралағы тын алышын тойғанда нәҡ шул рухты тояһың. Эйе, тап ошондай мөнәсәбәткә талап итә бөгөн тыуған еребеҙ. Һәр ауылда ла, һәр кемебеҙҙә лә ошо рух йәшәһен ине. Үкенескә ҡаршы, улай түгел шул. Ошо уҡ районның Учалы ауылындағы осрашыуҙа бер пенсионер ҡарт:

### "ЕР МИҢӘ НИҢӘ КӘРӘК УЛ?"-

тип әйтеп һалмаһынмы. "Ашарын-ашағанмын, йәшәрен-йәшәгәнмен..." тип тә аптыратты ул. Беҙ уға "Һеҙгә кәрәкмәһә, балаларығыҙға, ейәндәрегеҙгә кәрәк буласаҡ ул ер. Уларҙы тыуған еребеҙҙә ҡаҡҡа таяндырып китәһегеҙме ни?" тип әйткәс кенә, ул бер аҙ уйға ҡалды. Мәғлүмәт дәүере һаналған XXI быуат башында, үкенескә ҡаршы, ошондай ҡараштың йәшәүе беҙҙе тәрән уйға һала. Был "ҡартлыҡ эгоизмы" күренешеме, әллә "ижтимағи максимализм"ғәләмәтеме, аңлай алманыҡ. Тағы ла шуныһы аптырата: ер алырға теләмәүселәр ҡырылмаһа-ҡырҡ сәбәп эҙләй башлай. Имеш, ул ерҙе улар ни эшләтә, ҡайҙан яғыулыҡ, ҡайҙан техника, ҡайҙан орлоҡ таба? Ындай һүҙҙәрҙе әйтеүселәрҙең сәбәп түгел, үҙ ялҡаулыҡтарын ошондай һүҙҙәр аҫтына йәшереп, һылтау эҙләп маташыуҙары көн кеүек асыҡ бит. Был хәлдәр ошо райондарҙа йәшәүселәргә генә ҡағылмай, башҡа райондар ауылдарында ла ишетәбеҙ һындай һылтанмаларҙы.

Ғөмүмән алғанда, Учалы районында ауыл хужалығы ерҙәрен халыҡҡа беркетеү мәсьәләһе урындағы һәм район властары тарафынан уҙәкләштереп хәл ителә. Был ысулды ауылда йәшәүселәр бик ҡулай күрә. Нимә генә тимә, һәр кем үҙенә тейеш пай ерен үҙе рәсмиләштереп йөрөй башлаһа, ҡырылмаһа ҡырҡ ишек төбөндә бик оҙон сираттар барлыҡҡа килер ине лә, күптәре ҡағыҙ эшенән ҡурҡып, ерҙәрен юллауҙан баш тартыр, йә ҡул һелтәр ине.



Учалы районы Зәйнәкәй мәктәбе музейын ойоштороуға уҡытыусы Гөлсирә Исламова күп көс һалған



Учалы сәсәниәһе Гәрифә Кудрявая

Был йәһәттән учалылар, беҙҙенсә, бик ҡулайлы ысул тапҡан.

Бөрйәндә хәлдәр башҡасараҡ тора. Сөнки районды ҙур өлөшөн урман билəй һәм бар ауылдарҙың да халыҡҡа бүлеп бирер һөрөнтө ерҙәре юҡ. Урман ерҙәре федераль биләмәгә инеүен иҫәпкә алғанда, уйланырлыҡ мәсьәләләр бик күп. Бөрйән районының Янһары ауылындағы осрашыуҙа сығыш яһаусы аҡһаҡал Ибраһим Мәжитов ер алырға ниәтләнеүен һәм үҙ ерен вариҫтарына мираҫ итеп яҙып ҡалдырырға теләүен белдерҙе. Ул күптән ғариза яҙып биреүенә ҡарамаҫтан, был эштең һаман да һүҙылыуына, ваҡыттың аҙ ҡала барыуына борсолоуын белдерҙе.

Иҫке Собханғол ауылындағы осрашыуҙа сығыш яһаусы пенсионер Сәләх Әхмәтов: "Киске Өфө" гәзитен

### "ҠӨРЬӘН"ДӘЙ КҮРЕП УҠЫЙЫМ",-

тип һөйөндөрҙө. Шулай уҡ Байғаҙы ауылында йәшәүсе Хәмзә Баязитов беҙҙең гәзиткә осраҡлы рәүештә юлығып, аҙаҡ иң яҡын дуҫына әүерелеүен бәйән итте. Янһарыла йәшәүсе Фәйшә Йомағолованың гәзитебеҙгә бирелгән баһаһы, кәңәш-тәҡдимдәре күңелебеҙгә май булып яғылды. "Элек гәзиттәрҙе күп алдыра инем, хәҙер районыбыҙҙың "Таң" гәзите менән "Киске Өфө"нө генә уҡыйым. Берүк алған юлығыҙҙан тайпыла күрмәгеҙ. Халҡыбыҙ матбуғат һүҙенә ышана, шул ышанысҡа тап төшөрмәгеҙ. Беҙҙең рухҡа тура килгән берҙән-бер гәзит ул", тине танылған уҡытыусы.

Гәзитебеҙҙе иң күп алдырып уҡыған Иҫке Собханғол, Байназар, Яуымбай ауылдарындағы осрашыуҙарҙа әйтелгән уй-фекерҙәр, теләк-тәҡдимдәр ҙә Фәйшә апайҙыҡына ауаздаш булды. Ихластан әйтелгән ул һүҙҙәрҙе беҙ йөрәк менән ҡабул иттек. Йөрәктән сыҡҡан йөрәккә етә шул. Ни тиһәң дә, улар беҙҙең иң яҡын дуҫтарыбыҙҙың, беҙҙе яҡын күргән ысын уҡыусыларыбыҙҙың һүҙҙәре бит.

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Баш мөхәрриребеҙ Гөлфиә Янбаева, яҡын дуҫыбыҙ, республикабыҙҙың Шәйехзада Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, виртуоз ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов менән йөрөп ҡайттыҡ был сәфәрҙән. Донъя халыҡтарының утыҙға яҡын төрлө ҡумыҙы, башҡа музыка ҡоралдары менән Миңлеғәфүр дуҫыбыҙ ҙа иғтибар үҙәгендә булды. Уға һәм беҙҙе оҙатып йөрөүсе, оло ҡунаҡ күреп, ҡаршы алыусы Учалы, Бөрйән райондарында йәшәүсе дуҫтарыбыҙға оло рәхмәтлебеҙ.**

# Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡорт дәүләт университеты тағы ла бер уҡыу корпусына артты. Элекке "БЭТО" концерны бинаһы БДУ-ның гуманитар факультеты өсөн үҙгәртеп ҡоролдо. Уны рәсми асыу тантанаһында БР Президенты Мортаза Рәхимов, БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев ҡатнашты.

✓"Рәсәй юристары ассоциацияһы" Бөтә Рәсәй йәмәғәт ойошмаһының Башҡортостан бүлексәһен ойоштороу йыйылышы булып үтте. Унда Рәсәй Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһының комитет рәйесе Павел Крашенинников ҡатнашты. Йыйылыш бер тауыштан БР Президенты Хакимиәте етәксеһе Радий Хәбировты яңы ойошманың рәйесе итеп һайланы.

✓Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты сираттағы төбәк-ара семинар-кәңәшмә үткәрҙе. Унда республика ҡалалары һәм райондары башҡорттары ҡоролтайҙары рәйестәре, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларынан, Һарытау, Һамар, Ҡурған, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән, Пермь крайынан, Татарстандан, Ханты-Манси, Ямал-Ненец автономиялы округтарынан, Балтиҡ буйы илдәренән башҡорт йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашты. Семинарҙа Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына әҙерлек сиктәрендә үткәреләсәк саралар, бурыстар тураһында һөйләнелде.

✓29 мартта Өфөлә "Изгелекле йөрәк" ҡала мәрхәмәтлек марафоны үтәсәк. Өфө ҡала округы хакимиәте, "Башҡортостан" телерадиокомпанияһы, "Вся Уфа" продюсерлыҡ үҙәге үткәргән был сараның маҡсаты - "БР патронат тәрбиә тураһында"ғы БР Законын тормошҡа ашырып, етем балаларҙы урынлаштырыуҙы, шулай уҡ уларға финанс, социаль-психологик ярҙам күрһәтеүҙе пропагандалау.

✓Башҡортостан менән Рәсәйҙең 81 төбәге араһында сауҙа-иҡтисади бәйләнеш булдырылған. Былтыр республиканан Рәсәй төбәктәренә бөтәһе 132,2 млрд һумдан ашыу суммаға тауар сығарылған, ә уларҙың үҙҙәренән һатып алынған тауар 37,1 млрд һум тәшкил иткән.

✓Былтыр Башҡортостан иҡтисадына 61,3 миллион долларлыҡ инвестициялар йәлеп ителгән. Иң әүҙем инвесторҙарҙан Төркиәне, Бөйөк Британияны, Австрияны атарға була. Республикабыҙ сауҙа буйынса донъяның 89 иле менән хеҙмәттәшлек итә. Былтыр тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 8110,9 млн доллар тәшкил иткән. Экспорт күләме 7642,9 млн доллар, импорт 468 млн доллар булған.

***Дмитрий Медведев милли проекттар менән шөғөлләнә, Сергей Иванов - инновациялар менән. Шул уҡ ваҡытта икеһе лә президент посын биләргә әҙерләнә. Әммә урын бирәү генә.***



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ҺӘР ҒАИЛӘГӘ - ФАТИР, ҺӘР АУЫЛҒА - ТЕЛЕФОН

## Президент посына дәғүә итеүселәр һайлау алды кампанияһын башланы

**Йәш быҙауҙарҙың һөҙөшкәнен күргәнегеҙ бармы, йәмәғәт? Тар һарайҙарҙан иркен яланға килеп сыҡҡас, улар бер килке тегеләй-былай сабышып, уйнап, хәрәкәткә талсыҡҡан тәндәрен яҙып ала ла, ҡапыл ғына туҡтап, бер-береһен тәүгә күргән кеүек ентекләп ҡарашып алалар. Шунан инде китә һөҙөш! Ҡаҡ маңлайҙарында буласаҡ мөгөҙҙәренең урындары ғына тупайып тороуға ҡарамаҫтан, улар ихласлап, аяҡ терәп һөҙөшә, артҡараҡ сигенәләр ҙә тағы ла алға ташланалар. Улар үҙҙәрен оло үгеҙ кеүек хис итә, көтөүҙең буласаҡ башлығы ролен уйнай, көс һынаша. Тәбиғәт шулай ҡушҡас, нишләһендәр инде. Ә ҡарт үгеҙ иһә уларҙың был уйынын ситтән генә күҙәтеп тора, быҙауҙарҙың көсөн, тәүәккәллеген, оҫталығын һынай, буласаҡ нәҫел үгеҙенең кандидатураһын самалай.**

Был нишләп йәш быҙауҙар, үгеҙҙәр хаҡында яҙа башланы, әллә ауыл хужалығы тематикаһын яҡтыртыуға күсергә самалай микән, тип уйлайһығыҙмы? Рәсәй президенты посына дәғүәләшергә маташҡан ике кешенең ҡылығын күҙәткәндән һуң тыуған уйҙарым ғына. Улар, ысынлап та, ике йәш быҙауҙы хәтерләтә, хатта аҡыллы һүҙҙәр һөйләһә лә, төплө фекерҙәр әйтһә лә.

Һүҙем, Дмитрий Медведев менән Сергей Иванов хаҡында барғанын аңлағанһығыҙҙыр. Дөрөҫөн генә әйткәндә, улар әле дәғүәсе түгел. Президент һайлауҙарына бер йыл ваҡыт бар. Президентыбыҙ Владимир Владимирович Путин иҫән-һау, эшләп йөрөй. Әммә кемдеңдер еңел ҡулы менән ваҡытлы матбуғат саралары уларҙы бер тауыштан Путиндың вариҫы тип иғлан итте лә ҡуйҙы. Халыҡҡа, һайлаусыларға ишара булды был. Хәҙер улар икеһе лә Рәсәй Хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫарҙары. Дмитрий Медведев милли проекттар менән шөғөлләнә, Сергей Иванов - инновациялар менән. Шул уҡ ваҡытта икеһе лә президент посын биләргә әҙерләнә. Әммә урын бирәү генә.

Беҙҙә бит һайлауҙарҙа иң күп тауыштарҙы кем күберәк вәғәҙә итә, шул йыя. Башҡортостанда был йәһәттән 90-сы йылдар башында барлыҡҡа килгән "Депутат түгел, ә торба һайланыҡ", тигән әйтем дә йөрөй. Ошо фекерҙе күҙҙә тотһаҡ, Дмитрий Медведевтың хәле күпкә яйлыраҡ. Милли проекттарҙы Президент Владимир Путин иғлан итте. Уларҙы тормошҡа ашырыуға ҡаҙнанан йыл һайын мул ғына аҡса бирелә һәм артабан да биреләсәк, тигән өмөт бар. Һаулыҡ һаҡлау учреждениелары һәм мәктәптәр компьютерҙар, яңы ҡоролмалар менән йыһазландырыла, уҡытыусыларҙың, медицина хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы бермә-бер арта. Тимәк, был эште ойоштороусылар уларҙың Дмитрий Медведев өсөн тауыш биреүен фаразлай. Беренсе вице-премьер тик ултырмай, ил буйлап саба, халыҡ менән осраша, милли проекттар тураһында һөйләй, кәңәшмәләр үткәрә, йәғни, һайлаусыларҙы үҙе менән таныштыра. Беҙ ҙә уның менән яҡындыраҡ танышайыҡ. Дмитрий Медведевҡа быйыл 14 сентябрҙә 42 йәш тула. Ул Ленинградта тыуып үҫкән. Шунда уҡ Жданов исемендәге дәүләт университетын һәм аспирантураны тамамлаған. Юридик фәндәре кандидаты. Атаһы ла, әсәһе лә профессорҙар. Ғаиләлә берҙән-бер бала. Өйләнгән, Илья исемле улы бар. Ҡатыны Светлана финанс-иҡтисади юғары уҡыу йортон тамамлаған.

1995 йылға тиклем Медведев Санкт-Петербургта эшләй, университетта уҡыта, ҡала Советы рәйесенең кәңәшсеһе вазифаһын биләй. Уның власҡа үрләүе 1999 йылда Аҡ йортҡа Путин килеүенән башлана. Тәүҙә ул Рәсәй хөкүмәте аппараты етәксеһе урынбаҫары була, шунан президент хакимиәте етәксеһе урынбаҫары булып эшләй. 2003 йылдан президент хакимиәте башлығы булып китә. Былтыр ул Рәсәй хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Дмитрий Медведев Владимир Путин менән студент осоронан уҡ таныш. Путин ул саҡта Дәүләт именлеге комитетында эшләй һәм буласаҡ юристар араһынан ошо ойошма өсөн кадрҙар һайлау менән мәшғүл була.

Сергей Иванов та Ленинградта тыуып үҫкән. Уға быйыл 54 йәш тулды. Ленинград дәүләт университетын тамамлағас, Минск ҡалаһында СССР Дәүләт именлеге комитетының юғары курстарында һәм КГБ Беренсе Баш идаралығының 101-се мәктәбендә белем ала. 1981 йылдан 1998 йылға тиклем именлек хеҙмәте органдарында төрлө вазифалар биләй. 1999 йылдан Рәсәй Именлек советы сәркәтибе була, ә 2001 йылда оборона министры итеп тәғәйенләнә. 2007 йылдың 15 февралендә Сергей Иванов Рәсәй хөкүмәте рәйесенең беренсе урынбаҫары вазифаһын биләй. Өйләнгән, ике балаһы бар.

Шулай итеп, Путин кеүек үк, дәғүәселәрҙең икеһе лә Санкт-Петербургтан. Владимир Владимирович һымаҡ, уларҙың икеһе лә Именлек хеҙмәте менән тығыҙ бәйле. Икеһенең дә һуңғы йылдарҙағы карьералары Путиндан айырылғыһыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, улар икеһе лә беҙҙең әлеге Президентыбыҙҙың кешеләре. Медведев менән Иванов дуҫтар, тиҙәр. Әммә яҡын арала уларҙың араһынан ҡара бесәй йүгереп үтеүе мөмкин. Ишеткәнегеҙ барҙыр шундай әйтемде - ир-аттарҙың дуҫлығын өс нәмә генә боҙа ала: ҡатын-ҡыҙ, аҡса һәм власть. Иванов менән Медведевтың бүлешерлек ҡыҙ-ҡырҡыны юҡ, аҡсаны ла улар бер үк урындан - дәүләт ҡаҙнаһынан ала. Тимәк, власть ҡына ҡала.

Кемеһе башлар икән был алышты, тип көтөп кенә йөрөлгәйне, үткән аҙнала беренсе аҙымды Сергей Иванов яһаны. Уны аңларға була, беренсенән, ул оборона министры булған кеше. Тимәк, аңлай - ҡаршы тороуҙың иң яҡшы ысулы ул атакаға күтәрелеү. Икенсенән, уға Медведевтан айырмалы рәүештә ваҡыт әҙ бирелгән. Дмитрий Медведев инде бер йылдан ашыу милли проекттар менән шөғөлләнә. Ярайһы уҡ эш эшләнде лә инде. Ә Ивановҡа Рәсәй армияһындағы фажиғәләрҙән "таҙарынып" өлгөрөргә, һайлаусыларға үҙен яңы сифатта, ил башлығы буларак танытырға кәрәк. Әйткәндәй, Сергей Ивановҡа маневрҙар яһарға мөмкинлек юҡ. Халыҡ өсөн яҡын булған өлкәләр Медведев ҡулында. Шуға ла ул элемтә йүнәлешендә эш итергә булды.

Мәғлүмәт технологиялары һәм элемтә министрлығы коллегияһының ултырышында сығыш яһағанда Сергей Иванов Рәсәйҙе "заман мәғлүмәт революцияһының лидеры"на әүерелдерергә тәҡдим итте. Был нимәне аңлата инде? Ивановтың һүҙҙәренә ҡарағанда, беҙ үҙ илебеҙҙә кәрәҙ телефондары, компьютер ҡоролмалары һәм программалар етештерергә һәләтлебеҙ. Тик бының өсөн дәүләт менән эшҡыуарҙар берләшеп, яңы технологиялар етештереүсе инфраструктураны үҫтерергә бурыслы. Сергей Иванов фекеренсә, 2010 йылға Рәсәй халҡының яртыһы персональ компьютерҙарға һәм Интернетҡа сығыу мөмкинлегенә эйә булырға тейеш. 2015 йылға иһә һәр бер ауылда телефон аша бәйләнешкә инеү һәм Интернетта эшләү мөмкин буласаҡ. Бөгөн иһә 142 миллион рәсәйлегә 23 миллион компьютер тура килә. Йәғни, ике-өс йылдан йә компьютерҙар һаны кәмендә икегә артырға, йә илдә йәшәгән халыҡтың һаны ике тапҡырға кәмергә тейеш. Юғиһә, Иванов ҡуйған маҡсатты үтәп булмаясаҡ. Телефондарға килгәндә иһә, буласаҡ президентыбыҙ (әгәр беҙ уны һайлаһаҡ, әлбиттә) Рәсәйҙә кәрәҙ телефондарын етештереүҙе яйға һалыуҙы төп маҡсаттарҙың береһе итеп ҡуйҙы. Хатта, ошо залда ултырыусыларҙың берәүһендә булһа ла Ватаныбыҙҙа етештерелгән телефон бармы икән, тигән һорау бирҙе Сергей Иванов.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, кәрәҙ телефон селтәре барып етмәгән төпкөл мөйөштәр илебеҙҙә юҡ түгел, бар. Әммә эшҡыуарҙарға саҡ ҡына юл асылһа, улар был эште бер нисә йыл эсендә тормошҡа ашырыуына шик юҡ. Тик... Халыҡ мәнфәғәттәрен кем ҡайғыртыр икән? Кәрәҙ телефондары операторҙары селтәрҙе үстереүен үҫтерә, Япония, Корея, Ҡытай телефон аппараттары менән тәьмин итеүҙе үҙ өҫтөнә алғандар. Ә бына һайлаусылар һөйләшеү өсөн түләүҙәр бер ҡасан арзанайырмы, тип күпме көтһә лә, әлегә уларҙың туҡтауһыҙ артыуын ғына күрә. Халыҡҡа барыбер - беҙҙә етештерелгәнме ул телефон, әллә ситтәме. Сифатлы, уңайлы һәм арзан булһа, шул етә. Шуға ла Сергей Ивановтың һайлау алды кампанияһындағы тәүге аҙымы уңышһыҙыраҡ килеп сыҡты, тип фаразларға мөмкин. Хәҙер Дмитрий Медведевтың контратакаһын көтөп ҡалайыҡ. Бәлки, ул беҙгә күңелгә ятып торған берәй "торба" вәғәҙә итер, ә, йәмәғәт!

**Таһир ИШКИНИН.**

*ХОҘАЙ МӨҒЖИЗӘҺЕ*

## Күмәстә...

### Алла һүҙе

Сибай ҡалаһының Тәҡүә мәсетендә була был хәл. Яңыраҡ унда мәсеттең муллаһы Ғәбитов Лоҡман хажиҙың үтенесе буйынса бер нисә ҡатын-ҡыҙ ҡорбан ашына һалма йәйергә килә. Егәрле, етеҙ ҡуллы апайҙар донъя хәлдәре тураһында һөйләшә-һөйләшә, ашыҡмай ғына эшләй. Алдан әҙерләнгән ҡамыр йомғаҡтары бер-бер артлы ҙур йәймәләргә әүерелә бара...

- Һуңғы ҡамыр йомғағын алырға үрелгәндә ҡулдарым ҡапыл зымбырҙап китте,- тип һөйләй Дилара Мөхитдин ҡыҙы Рафиҡова. - Ҡарашымды ҡамыр өҫтөндәге ғәрәп хәрефенән торған яҙыу йәлеп итте һәм ниндәйҙер илаһи көс ярҙамында хасил булған "Аллаһ" тигән һүҙҙе уҡып, шаҡ ҡаттым,- ти ул.



Ҡамыр өҫтөндә яҙылған был изге һүҙҙәр ҡорбан ашын әҙерләшергә килгән башҡа ҡатын-дарҙы ла хайран итә.

**Г. ҒӘЛИАСЛАНОВА,**
Сибай ҡалаһы.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Республикаға ҡош киҙеүе сирен индереүҙе иҫкәртеү өсөн "Өфө" Халыҡ-ара аэропортында санитар-карантин контроле лә көсәйтелгән. Башҡортостан Республикаһы буйынса баш дәүләт санитар врачы Роберт Такаев әйтеүенсә, ҡош киҙеүе тарала ҡалһа, республиканың медицина учреждениелары ауырыуҙарҙы ҡабул итергә әҙер.

✔ БР Мәғариф министрлығының киңәйтелгән ултырышы был юлы Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Республика башҡорт гимназия-интернатында үтте. Унда "Мағариф" өҫтөнлөклө милли проектты тормошҡа ашырыу, милли мәғариф, йәш быуынға профессиональ белем биреү, балаларҙың сәләмәтлеге, социаль етемлек кеүек мәсьәләләр ҡаралды.

✔ Башҡортостан халҡы быйыл ғинуарҙа ғына банкыларҙан 1,8 млрд һум кредит алған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 97 процентҡа күберәк. Ошо сумманан 321,2 млн һум торлаҡ, 345,8 млн һум автомобиль һатып алыуға тәғәйенләнгән.

✔ Кисә Бөрйән районының Әбделмәмбәт ауылында ҡарағай-ҡыпсаҡ ырыуының шәжәрә байрамы үтте.

✔ Иртәгә, 25 мартта, "йәйге" сәғәткә күсәбеҙ, йәғни төнгө сәғәт 2-лә сәғәт уҡтары бер сәғәткә алға күсерелә.

✔ Метеохеҙмәткәрҙәр фаразлауынса, Ағиҙел йылғаһы башында, йәғни Белорет районында быйыл яҙғы ташҡындың бик ҡеүәтле булыуы ихтимал.

✔ Максим Чудов Биатлон буйынса донъя кубогында алтын миҙал яуланы. Ә Николай Красников Боҙҙа мотоуҙыш буйынса донъя чемпионатының еңеүсеһе тип табылды.

✔ БР Композиторҙар берлеге рәйесе, күренекле композитор Салауат Низаметдинов Рәсәй Композиторҙар берлегенең Д. Шостакович исемендәге премияһына лайыҡ булды.

✔ 3 апрелдә М. А. Шолохов исемендәге Мәскәү дәүләт гуманитар университетының Өфө филиалы үҙ базаһында урта мәктәп уҡыусылары араһында башҡорт теле, тарих һәм Башҡортостан мәҙәниәте буйынса республика олимпиадаһы үткәрә. Унда Өфө һәм республика мәктәптәренең 9-11 синыф уҡыусылары ҡатнаша ала. Олимпиада Сельская Богородица урамы, 37-се йорт адресы буйынса иртәнге сәғәт 10-да башлана. 74, 290,12, 226, 26 автобустары менән "Шолохов университеты" туҡталышына тиклем барырға. Телефондар: 274-32-75, 242-13-77.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БЕҘ БИТ ЗАКОНДЫ ҮТӘЙБЕҘ

**Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығын тарихи Башҡортостан ерендә йәшәүсе Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Ырымбур, Һамар һәм Һарытау өлкәләре, Татарстан Республикаһы һәм Пермь крайы башҡорттары ла билдәләйәсәк. Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Илдус Илешев Башҡортостан менән Рәсәйҙең 450 йыллыҡ берҙәмлеге йылына бағышланған Халыҡ-ара семинарға килеүселәр алдында юбилейға әҙерлек хаҡында сығыш яһаны.** Семинарға Рәсәй региондары, яҡындағы сит илдәр башҡорттары ҡоролтайҙары етәкселәре килгәйне. Илдус Илешев был юбилейға Рәсәй Президенты Указы менән федераль статус бирелеүен һәм сараларҙың РФ субъекттарында, шулай уҡ сит илдәрҙә үтәсәген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Билдәләнеүенсә, беҙҙә үткән барлыҡ саралар менән бер рәттән, ситтә лә фәнни-ғәмәли конференциялар, һабантуйҙар, башҡорт ҡоролтайҙары, "Шәжәрә байрамдары" үтәсәк. Тарихи юбилейға ЮНЕСКО-ның штаб-квартираһында (Париж) "Башҡортостан Рәсәй менән 450 йыл" халыҡ-ара презентацияһы, Австрия Республикаһындағы (Вена) Рәсәй Федерацияһы илселегендә Башҡортостан Республикаһы презентацияһы һәм Истанбулда (Төркиә) һабантуй уҙасаҡ.

-Күп милләтле һәм күп конфессиялы Башҡортостан өсөн башҡорттар - дәүләт ойоштороусы милләт, - тип билдәләне Илдус Илешев. - Шуға күрә Башҡортостан Республикаһы башҡорт милләтенең тарихи тыуған ере һәм Ер шарындағы берҙән-бер тупланған урыны булараҡ, башҡорт милләтенең, шулай уҡ диаспорала йәшәүсе башҡорттарҙың телен һәм мәҙәниәтен һаҡлау һәм артабан үҫтереү өсөн төрлө яҡтан булышлыҡ итергә бурыслы. 2002 йылда Бөтә Рәсәй буйынса халыҡ иҫәбен алыу күрһәткестәре буйынса республиканан ситтә 450 мең башҡорт кешеһе (30 процент тирәһе) йәшәй. Был, үкенескә ҡаршы, РФ регионларында йәшәүсе башҡорт балаларының, ерле халыҡ булыуға ҡарамаҫтан, үҙ телендә белем ала алмауын да күрһәтә. Ә туған телдә белем алыу - федераль законда нығытылыуынса, һәр баланың һәм ата-әсәнең законлы хоҡуғы. Беҙ Башҡортостанда был талаптарҙы үтәйбеҙ. Беҙҙең мәктәптәрҙә 14 туған тел уҡытыла, 6 телдә уҡытыу алып барыла. Мәҫәлән, 26 меңлек мордва халыҡ вәкилдәре өсөн Башҡортостандың ике колледжында кадрҙар әҙерләнә. Рәсәйҙәге 11 украин телен өйрәнеүсе мәктәптәрҙең 9-ы Башҡортостанда. Архангель районында йәшәүсе латыштар өсөн дә латыш телендәге мәктәп эшләй. Был - беҙҙең ҡаҙаныштар, улар илебеҙ етәкселеге тарафынан юғары баһаланырға тейеш һәм беҙ башҡа региондар етәкселәренән уларҙағы башҡорттарға ҡарата ла шундай уҡ мөнәсәбәтте талап итергә хаҡлыбыҙ.

*ШУЛАЙ КӘРӘК!*

**Башҡортостан парламентарийҙары республиканан ситтә - Рәсәй Федерацияһы төбәктәрендә компактлы йәшәгән башҡорттарҙың һәм башҡа халыҡтарҙың туған телен өйрәнеүгә, туған телендә дөйөм белем алыуға һәм ниндәй телдә белем алыуҙы һайлауға конституцион хоҡуғын яҡлап, бер юлы ике мөрәжәғәт ҡабул итте.**

# СИТТӘГЕЛӘР ХӘЛЕ...

## сит түгел

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай Мөрәжәғәтенең береһе Рәсәй Федерацияһы дәүләт власы субъекттарының закондар сығарыу органдарына, икенсеһе РФ-ның мәғариф һәм фән министры А. Фурсенкоға адресланған.

Был проблеманың етдилеге һәм төп асылы ниҙән ғибәрәт һуң? Силәбе өлкәһендә 166 371 башҡорт йәшәй. Силәбе, Златоуст, Снежинск, Үрге Уфалей ҡалалары һәм өлкәнең Арғаяш, Красноармейск, Ҡонашаҡ, Сосновка райондарындағы 73 мәктәптә 5186 уҡыусы туған телен өйрәнә. Биш йыл элек 8120 башҡорт уҡыусыһы өлкәнең 87 мәктәбендә туған телен предмет булараҡ өйрәнгән. Магнитогорск, Златоуст, Ҡыштым ҡалаларында, өлкәнең Уй, Куса райондарында башҡорт телен уҡытыу туҡтатылған. Магнитогорскийҙа балаһын беренсе синыфтан башҡорт теле уҡытылған класҡа килтерергә теләгән ғаиләләр булыуға ҡарамаҫтан, уларҙың теләге йыл һайын кире ҡағыла килә. Был мәсьәлә буйынса БР Мәғариф министрлығы ла урындағы властка мөрәжәғәт итеп ҡараған һәм аңлау тапмаған.

Бөгөн унда бер нисә мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүгә аҙнаһына 4 сәғәт бүленә, ә башҡа мәктәптәрҙә 2-3 сәғәт кенә ваҡыт бирелә. Финанс средстволары етешмәү арҡаһында, мәктәптәр башҡорт теле уҡытыусыларының дәрес биреү ваҡытын мөмкин тиклем ҡыҫҡартырға мәжбүр.

Ырымбур өлкәһендә 53 меңгә яҡын башҡорт йәшәй. 2000 йылда өлкәләге 44 мәктәптә (бөгөн 33 кенә) башҡорт телен предмет булараҡ 1683 бала, факультатив дәрестәрҙә - 87, түңәрәктәргә йөрөп 385 бала өйрәнгән, хәҙер улар 999, 45 һәм 145 һандарына ярашлы ҡалған. Рафаил Мирсаев Ырымбур өлкәһендә башҡорт телендә сыҡҡан гәзит тә аҙғына тираж менән (2 мең тирәһе) нәшер ителә, тине.

Был күренеш 15 мең башҡорт йәшәгән Ҡурған өлкәһендә, шулай уҡ Свердловск һәм Һамар (37 меңгә яҡын башҡорт) өлкәләрендә лә күҙәтелә. 40 мең башҡорт йәшәгән Пермь крайында башҡорт теле уҡытылған мәктәптәрҙә, башҡорт телендә ваҡытлы матбуғат баҫмалары ла, телетапшырыуҙар ҙа юҡ. Ә 15 мең башҡорт йәшәгән Татарстанда берҙән-бер башҡорт мәктәбе бар һәм унда 62 бала туған телен өйрәнә.

БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары туған телде өйрәнеүҙән мәхрүм булыу башҡорт халҡын милләт булараҡ юғалта, тип иҫәпләй. Ләкин уҡытыу өсөн шарттар булдырыуға финанс сығымдары үҙен тулыһынса аҡлай, сөнки ул күп милләтле дәүләттең берҙәмлеген, йәмғиәттең әхләҡи сәләмәтлеген һәм Рәсәй халҡының киләсәген һаҡларға булышлыҡ итәсәк.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһы субъекттарында йәшәүсе башҡорт балаларын Башҡортостан инновацион белем биреү учреждениеларына маҡсатлы ҡабул итеү мәсьәләләре Башҡортостан Хөкүмәте ултырышында ла ҡаралды.

Ултырышты БР Премьер-министры Рафаэль Байдәүләтов алып барҙы. Ул Башҡортостандың РФ регионлары менән гуманитар мәсьәләләр буйынса килешеүҙәр төҙөлөүе хаҡында хәбәр итте. "Беҙ башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙе дәреслектәр, әҙәби китаптар, музыка ҡоралдары менән тәьмин итергә йөкләмә алдыҡ. Шул уҡ ваҡытта республиканың үҙендә РФ субъекттарынан килгән йәштәргә сифатлы профессиональ белем бирергә тейешбеҙ", - тине хөкүмәт башлығы.

Премьер-министр БР Мәғариф министры Зиннәт Аллаяровтың уҡыусы балаларҙың тейешле кимәлдә туҡланмауы хаҡындағы сығышына айырым иғтибар бирҙе. "Балаларҙың етерлек кимәлдә туҡланмауына юл ҡуйырға ярамай, бигерәк тә ошо заманда", - тине Рафаэль Байдәүләтов. Хөкүмәт башлығы кисекмәҫтән был эште яйға һалырға ҡушты.

2007-2008 уҡыу йылдарына республиканың инновацион мәғариф учреждениелары Ырымбур, Силәбе, Ҡурған, Свердловск, Төмән, Һамар, Һарытау өлкәләренән, Пермь крайынан, Ханты-Мансы, Ямал-Ненец автономиялы округтарынан һәм Татарстан Республикаһынан 272 баланы ҡабул итәсәк.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# Уҡытыу - үҙе һынау,

## ә бәйге тотоу...

**Баш ҡалала "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2007" төбәк-ара бәйгеһе уҙғарылды.**

Туған телде уҡытыуға яңы технологиялар индереү, һәләтле уҡытыусыларҙы табып, хеҙмәтен юғары баһалау, башҡорт телен уҡытыуға иғтибарҙы көсәйтеүҙе маҡсат итеп ҡуйған был конкурс быйыл ун икенсе йыл рәттән ойошторолдо.

Ошо ваҡыт эсендә бәйгелә 600-ҙән ашыу уҡытыусы ҡатнашҡан. Быйыл иһә республика ҡала-районларынан, шулай уҡ Силәбе, Ырымбур, Свердловск өлкәләренән йәмғеһе 68 уҡытыусы килгәйне. Улар араһында Нуриман районының Яңы Субай урта мәктәбе уҡытыусыһы Рәмилә Харрасова, Сибай ҡалаһының "Ирәндек" лицейы уҡытыусыһы Хәйҙәр Тапаҡов, Илеш районының Ҡәҙер мәктәбенән Гөлнара Дәүләтова, Күгәрсен районы Воскресенка урта мәктәбенән Эльвира Аллабирҙина кеүек балаларҙа башҡорт теленә һөйөү, ихтирам тәрбиәләгән олпат уҡытыусылар менән бер рәттән, Мәләүез районының Ҡотош урта мәктәбенән Рәүеф Ғабдрахманов, Федоровка районы Бала Сытырман мәктәбенән Гөлнур Уразбаева һәм тел һаҡсылары тигән яуаплы һөнәрҙе үҙ иңенә алған башҡа йәш уҡытыусылар ҙа байтаҡ ине. Шуны ла әйтергә кәрәк: алдағы йылдарға ҡарағанда, сираттағы бәйгелә ир-егет конкурсанттарҙың күберәк булыуы ла һөйөндөрә.

Быйылғы бәйгенең ойоштороу яғы, шарттары тағы ла камиллаша төшкәндәй. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының милли мәғариф, төбәктәр менән хеҙмәттәшлек итеү һәм уҡыу әсбаптары әҙерләү бүлеге начальнигы Рәйсә Күзбәкова әйтеүенсә, импровизациялы дәрестәр биреү урынына уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу һынауы үҙен аҡлаған.

- Элекке йылдарҙа импровизациялы дәрес үткәреү бурысы ҡуйылғанда, уҡытыусыларҙың барыһы ла, һис һүҙһеҙ, төплө әҙерлек менән, һәр яҡлап камил дәрес күрһәтә ине. Әммә был улар ҡәҙимге тәжрибәләрендә лә ошондай уҡ дәрестәр бирә тигәнде аңлатмай бит. Шуға беҙ был һынауҙы кисектерҙек, - ти Рәйсә Абдрахман ҡыҙы.

Бәйгенең еңеүселәре менән гәзитебеҙҙең киләһе һанында танышырға мөмкин буласаҡ.

**Рәлиә БИКТИМЕРОВА.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

☑ Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге кәңәшмәлә ҡала пассажирҙар транспорты эше буйынса мәғлүмәт тыңланды.

Бөгөн Өфөлә 290 меңдән ашыу автотранспорт берәмеге теркәлгән. Уларҙың 242,7-һе - еңел автомобилдәр, 8637-һе автобустар, шуларҙың 5500-ө шәхси секторҙа. Баш ҡала пассажирҙарын 92 маршрут буйынса 1820 автобус хеҙмәтләндерә.

☑ Баш ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге кәңәшмәлә мәғариф идаралығы начальнигы Азамат Сәйфуллин мәғариф учреждениеларының Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылыуының 450 йыллығына арналған байрам сараларына әҙерлеге тураһында мәғлүмәт бирҙе. Билдәләнелеүенсә, мәктәптәрҙә хәҙер ошо байрамға арнап, кабинеттар, мәктәп урынлашҡан биләмәләр биҙәлә, төрлө конкурстар үткәрелә, мәғариф проекттары тормошҡа ашырыла.

☑ "Башҡортостан" күргәҙмәләр комплексында "Барыһы ла төҙөлөш һәм ремонт өсөн" тигән махсуслаштырылған күргәҙмә эшләй.

☑ Өфө йәштәре граффити буйынса конкурста ҡатнаша ала. Эскиздар 4 майға тиклем Шәфиев урамы, 12/2 йортонда "Индиго" үҙәгендә ҡабул ителә.

☑ Леонид Якубович сираттағы "Мөғжизәләр яланы"н Өфөлә үткәрергә булды. Телевизион уйында ҡатнашыу мәсьәләләре буйынса һорауҙар һәм тәҡдимдәр менән 272-69-58 һәм 272-38-12 телефондары буйынса шылтыратырға мөмкин.

☑ 26 мартта "Һылыуҡай - 2007" башҡорт һылыуҡайҙары конкурсына һайлап алыу туры үтәсәк. Конкурс Өфө ҡалаһы, Кустарная урамы, 17-се йорт адресы буйынса 11 сәғәттә башлана. Талаптар: башҡорт телен, мәҙәниәтен, фольклорын белеү, 167 см-ҙан кәм булмаған буй оҙонлоғо, "Минең хыялым" тип исемләнгән таныштырыу визиты, ижади сығыш, кәүҙә һомғоллоғо.

☑ Кисә Октябрь районы үҙенең 30 йәшен билдәләне. Ошо тантанаға арнап, бөгөн 14.00 сәғәттән "Ҡашҡаҙан" паркында байрам саралары үтә.

☑ Нефтселәр мәҙәниәт һарайында "Хәүефһеҙлек - 2007" күргәҙмә-форумы дауам итә.

АЛДАЙҘАР БИТ ӘЙ!

# Итле аш - итһеҙ,
## ҡамыр ашы - ҡамырһыҙ

**Ауыл хужалығы хеҙмәткәрҙәре үҫемлекселек һәм малсылыҡ тармаҡтарында файҙалы һәм юғары сифатлы аҙыҡ-түлек етештерә. Улар етештергәнде сауҙа һәм дөйөм туҡландырыу тармаҡтары ҡулланыусыға һата. Уларҙың да эше бик тынғыһыҙ һәм мөһим. Ләкин ошо өлкәлә ҡабатланған төрлө етешһеҙлектәр, мутлыҡтар, урлашыуҙар, сифатһыҙ хеҙмәтләндереү бик нык күңелде ҡыра. Уларҙы тикшереүсе ойошмалар ҙа бар, әммә эштәренең һөҙөмтәһе генә юҡ.**

Бер ваҡыт Көньяҡ автовокзалдың буфетына инергә тура килде. Витринаға һалынған өсбосмаҡ тос ҡына күренгәс, һатып алырға булдым. Аҡса түләгәс, һатыусы миңә витринала күрһәтелгәндән ҙурлығы күпкә ҡайтыш өсбосмаҡ тотторҙо.

- Ә ниңә витринала ҙурыраҡ өсбосмаҡ күрһәтеп һалып ҡуйҙығыҙ?- тим.

- Нимә бар, шуны һатып тик торабыҙ инде,- тип, яуаптан ҡасты һатыусы...

Төрлө ашханаларҙың эшмәкәрлеге һатып алыусыны нисек тә алдауға ҡоролған - аштары шыйыҡ, итен сәйнәп йоторлоҡ түгел ҡаты була. Етештереүселәр хәҙер итле аҙыҡтарҙы - итһеҙ, ҡамыр аштарын ҡамырһыҙ эшләргә өйрәнеп алдылар.

Йәнә бер миҫал килтерәм. 26 февраль көндө Өфөнөң Затон биҫтәһендә урынлашҡан "Полушка" магазининан Пенза өлкәһендә етештерелгән ҡаймаҡ һатып алдым. Магазиндан сығып, ҡаймаҡтың ҡабына иғтибар менән ҡараһам, уның етештереү көнө 1 март тип яҙылған. Шулай итеп, һауылмаған һыйырҙың һөтөнән дә ҡаймаҡ эшләп сығарырға өйрәнеп алғандар икән бәғзе бер етештереүселәр.

Ни өсөн Өфө магазиндарында сифатһыҙ һөт аҙыҡтары һатылыуына юл ҡуйыла һуң? Башҡортостан һөт етештереү күләме буйынса Рәсәйҙә беренсе урында тормаһа, бер хәл ине.

Сауҙа өлкәһендәге алдашыуҙар ҡаты күҙәтеү аҫтына алынырға тейеш, тип иҫәпләйем. Шулай уҡ дәүләт органдарына ғына һылтанып ятыу ҙа килешмәй. Был мәсьәләлә һәр бер айырым кеше әүҙемлек, уяулыҡ күрһәтергә бурыслы. Беҙгә ғәмһеҙлектән һәм битарафлыҡтан күптән арынырға ваҡыт. Алданабыҙ икән, тимәк, быға беҙ үҙебеҙ ҙә ғәйепле. "Был минең эшем түгел", тигән принциптан ҡотолһаҡ ҡына, һәр төрлө етешһеҙлектәрҙән ҡотолорға мөмкин булыр.

**Әнүәр ТУҠТАМЫШЕВ.**

***Эй, Әҙәм балаһы, үҙеңә етерлек бирелгән булһа ла, артығын эҙләйһең. Эй, Әҙәм балаһы, һиндә аҙына ҡәнәғәтләнеү, күбенән туйыу тигән нәмә юҡ. Эй, Әҙәм балаһы, тәнеңдә сәләмәтлек, күңелеңдә тыныслыҡ, көндәреңде уҙҙырырлыҡ ризыҡ бар саҡта, ҡәнәғәтләнә бел. Хәрәмдәрҙән һаҡланһаң, иң ғибәҙәтсел кеше булырһың. Аллаһы Тәғәлә һиңә ни бирһә, шуға ҡәнәғәтлән - иң бай кеше булырһың.***

**ХӘҘИСТӘРҘӘН.**

ҠУЛЛАНЫУСЫ ӘЛИФБАҺЫ

# Аһ, был кредиттар!

**Хәҙер банктар өсөн кешеләрҙе оятһыҙ рәүештә алдау бер ни тормай. Клиентҡа тәүҙә бер процент күләме менән кредит бирәләр, ә инде аҡса ҡайтарырға килгәнендә был күләм бөтөнләй икенсе суммаға әйләнә. Хөкүмәттә ошондай алдауҙарға ҡаршы закон проекты һаман ҡаралмай ята. Был закон банкирҙарға клиенттарына бөтә төр өҫтәмә түләүҙәрҙе лә үҙ эсенә алған һөҙөмтәле ставка урынлаштырырға мәжбүр итер ине.**

Банк килешеүҙә түбән процент нормаһын ҡуя, ә аҙаҡтан бер-нисә комиссия өҫтәгән булып, уны кредит хаҡына индереп ебәрә. Бөтә ерҙә лә ноль процент менән бирелгән кредиттарҙы рекламалаған плакаттар эленеп тора. Процент күләменә алданған кеше һуңынан кредит өсөн, банкыға икеләтә түләргә мәжбүр.

Үҙәк банк мәғлүмәттәренән күренеүенсә, кредит карталары буйынса банк 29 процент норма вәғәҙә итә. Ысынында иһә, клиентҡа 60 процент түләргә тура килә. Иң ғәҙел кредит биреүселәр - автокредиттар. Улар килешеүҙә 13 процент нормаһы иғлан итеп, кешенән 25 процент ала.

Кешеләр артыҡ уйлап тормай, кредиттар ала һәм һуңынан түләп бөтә алмай аҙаплана. Был хәл банк өсөн дә яҡшы түгел, сөнки бурыс ҡапланмай. Беҙҙең ил граждандары банкыларға 37 миллиард һум аҡса ҡайтармаған.

Иң хәүефлеһе - магазиндың үҙендә үк килешеү мөмкинлеге булған кредит. Ғәҙәттә, бындай килешеүҙәргә артыҡ аҡсаһы булмаған кешеләр бара. Магазиндағы тауарға ҡыҙыҡҡан һатып алыусы яҡшылап уйлап өлгөрә лә алмай. Шуға күрә ҡапыл ғына ниндәйҙер ҡарарға килергә ашыҡмағыҙ. Бер-нисә кредит алыу ҙа ахмаҡлыҡ - бәлки ваҡытында түләргә мөмкинселек булмаҫ та ҡуйыр?

Әгәр ҙә кредитты алдан түләп бөтөү мөмкинлеге бар икән, банк менән килешеү төҙөр алдынан барыһын да һорашыу мөһим. Ҡайһы бер банкылар өсөн бурысын иртә түләп бөтөргән кредит алыусының кәрәге юҡ. Шулай уҡ кредит түләү менән бәйле ҡайһы бер көтөлмәгән хәл килеп тыуа икән, банк хеҙмәткәрҙәренә был хаҡта кисекмәҫтән хәбәр итергә кәрәк. Әлбиттә, хәбәр итеү бер кемде лә бурыстан ҡотҡармай.

Белгестәр кәңәше:

1. Кредитты айлыҡ түләүҙәр килемдең ҡырҡ процентын алып торһа ғына хәүефләнмәй рәсмиләштерергә мөмкин.
2. Килешеүҙә бурыс ҡайтарыуҙың аныҡ тәртибе ҡаралырға тейеш.
3. Бурысты алдан ҡайтарыу тәртибенә иғтибар итегеҙ.
4. Ваҡытында түләнмәгән бурыс өсөн ниндәй яуаплылыҡ ҡаралғанлығын белешеү мөһим.

**Шулай итеп, процент күләмен арттырыусы әллә күпме "аҡыллы" алымдар уйлап табылған. "Һатып алыусы һәр саҡ уяу булһын" - был кредит донъяһының иң ҡулай девизы.**

**Илдар ҒӘБИТОВ,**
**иҡтисад фәндәре кандидаты.**
**(Дауамы бар).**

# Ашнаҡсылар...
## урлаша

**Уҡыу йылы башланғас та Башҡортостан Республикаһы буйынса Дәүләт аҙыҡ-түлек инспекцияһы 10 мәктәпкә, 3 балалар баҡсаһына һәм йәйге лагерға тикшереү үткәреп, бөтә ерҙә лә балаларҙың тейешенсә ашатып еткерелмәүен асыҡланы.**

Мәҫәлән, Өфөнөң 40-сы мәктәбендә балаларҙың иртәнге ашының һәр тәрилкәһенә 5 һумлыҡ аҙыҡты һалып еткермәгәндәр. Балаларға тәғәйен ризыҡтың ауырлығын үлсәгәс, ул тейешле кимәлдән ике тапҡырға еңел килеп сыға. Кухняла эшләүселәр бер ай эсендә генә уҡыусыларҙың 17 килограмм быҡтырылған ит, 8 килограмм ҡуйыртылған һөт һәм 9 килограмм колбаса өлөшөнә ингән.

Был тикшереү һөҙөмтәһе буйынса енәйәт эше ҡуҙғатыла һәм намыҫһыҙ ашнаҡсыны эштән сығаралар.

**Шулай уҡ Өфөнөң 31-се, 27-се , Нефтекама ҡалаһының 7-се мәктәптәрендә лә уҡыусылар туҡланыуы буйынса бик күп етешһеҙлектәр асыҡлана. Нефтекаманың бер балалар баҡсаһында ғына көн һайын 12 һумлыҡ ризыҡты экономиялайҙар, ә ул йылына 200 мең һумлыҡ ризыҡ сабыйҙарға биреп еткерелмәй, тигәнде аңлата.**

# Өйҙән ризыҡ ташыйбыҙ...
## ауырыуҙарға

**Дауаханала дауаланып ятыусының хәлен белергә барғанда, әлбиттә уға ниндәй ҙә булһа тәмле ризыҡ алып барыу йолаһы бар. Ул ғәҙәт нисек башланғандыр, әммә Рәсәйҙә ауырыуҙар, туған-тыумасаһы өйҙән аҙыҡ килтермәһә, дауаханалағы аҙыҡ менән генә тамаҡ туйҙырып булмауын яҡшы белә.**

Шуныһы ғәжәп, медиктар, тәжрибәле диетологтар һәм башҡа белгестәр ҡатнашлығында дауаханаларҙағы ауырыуҙар өсөн аҙыҡтың бөтөн нормативы эшләнә. Шуға күрә бәлә нормативтарҙа түгел, ә ашхана хеҙмәткәрҙәренең күрәләтә ауырыуҙарҙы алдауына бәйле...

БР-ның Аҙыҡ-түлек тауарҙарының сифатын һәм һатылыуын контролдә тотоуҙы тәьмин итеү һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт инспекцияһы, ауырыуҙар аш-һыу үтә наҡыҫ, тип зарланғас, Өфөнөң 6-сы дауаханаһының аҙыҡ блогына инеп сығырға булды һәм ялыуҙың нигеҙле булыуын асыҡланы. Тикшереүселәр ауырыуҙарға төшкө аштың ике төрлө блюдоһын үлсәгәндә бефстрогановҡа иттең 20 проценты һалып еткерелмәүе һәм тәрилкәләге картуф ашының тейешле кимәлдән 28 процентҡа аҙ булыуы, 505 ауырыу өсөн тәғәйенләнгән 101 кг әфлисундың 77,8 килограмы ғына тотонолоуы билдәле була. Инспекторҙар шулай уҡ аҙыҡ блогы эшселәренең эш урынында йәшерелгән бөтәһе 660 һумлыҡ туғыҙ төрлө, йәғни ит, йомортҡа, ярма, макарон изделиелары, һөт аҙыҡтары, йәшел борсаҡ һәм башҡа аҙыкты таба. Складта ла ауырыуҙар өҫтәленә килеп етмәгән аҙыҡ ятыуы асыҡлана. Тикшереү һөҙөмтәләре тейешле саралар күреү өсөн Өфөнөң Октябрь районы прокуратураһына ебәрелә.

**Людмила КАШАПОВА.**
**"Башинформ".**

Б Ә Л Ә К Ә Й Ҡ А М У С

# Белмәһәң-бел

## Таж Махал

Һиндостандың символына әүерелгән Таж Махал һарайын ҡайһы бер тарихсылар X1Y быуатта уҡ булған һәм бөйөк һинд моголы Шах-Джахан уны тағы ла камиллаштырған ғына, тип фаразлай.

Донъяның архитектур шедевры булған был легендар мәсет һинд-ислам сәнғәтенең бер сағыу өлгөһө булараҡ билдәлелек ала. Уның 22 көмбәҙе Таж Махалды төҙөү йылдарын символаштыра. Мәсеттән бер ваҡытта ла диндарҙар өсөн аҙан яңғырамаған. Шуға күрә уны Шах-Джахан ятраҡан ҡатыны Мумтазға арнап һалдырған һәм уның проектын да үҙе төҙөшкән, тип тә әйтәләр. Мумтаз сибәрлегенән тыш, бик аҡыллы ла була. Сәйәси аңлашылмаусылыҡтар килеп сыҡҡанда Шах һәр саҡ Мумтаздың төплө, фәһемле кәңәштәренә таяна. Ҡатыны 1629 йылда 14-се балаһын тапҡандан һуң үлгәс, ҙур ҡайғыға батҡан Шах, ҡатынына арнап, "донъяла тиңе булмаған гүзәл һарай" төҙөргә ҡарар итә. Уны Төркиәнән, Ирандан саҡырылған инженерҙар, каллиграфтар һәм Кашмирҙан килгән архитекторҙар етәкселегендә 20 мең эшсе төҙөй. Иң ҙур көмбәҙенең бейеклеге 60 метрға етә, ә 40-ар метр бейеклегендәге манараларын аҡһыл күгелйем мәрмәрҙән эшләйҙәр. Эстән мәрмәр стеналарҙы һүрәтләп биҙәү өсөн алмаз, гранат, фирүзә, зәңгәр яҡут, аҡыҡ кеүек 60 төрҙәге ҡиммәтле таштарҙы файҙаланалар. Тулған ай яҡтыһында тағы ла серлерәк булып балҡыған Таж Махал мавзолейын төҙөткән Шах-Джахан һәм ҡатыны Мумтаз был әкиәти һарайҙың төп бинаһында мәңгелек йоҡоға талған. Уларҙың мәрмәр табутын күрер өсөн Һиндостанға туристар ағылыуын туҡтатмай.



✓ XIX быуатта башҡорт үҙ ерен күпләп һата башлай һәм әллә күпме еренән ҡолаҡ ҡаға. Ер һатыуға ҡаршы булған күпме ир-егеттең башы властар тарафынан төрмәләрҙә, һөргөндәрҙә серетелә.



ИМ-ТОМ

# БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАЛАРЫ

**Тамаҡ ауырыуы име**

Тамаҡ ауыртҡанда ошо әпсенде әйтәләр:

"Тамағым ауырта, тау йотам,
Тамағым ауырта, таш йотам!
Тфү, тфү, тфү!"

**Тамаҡ рәнйеүе (зыяндаш) име**

Зыяндаш бик алама ауырыу. Ул икмәкте, башҡа аш-һыуҙы бисмиллаһыҙ ашауҙан килә. "Бисмилла" тимәгәс, тамаҡҡа ауырыу йәбешә, ҡағыла. Шунан кешенең тамағынан аш үтмәй. Тамаҡ бик нык тарая икән. Хатта һыу ҙа үтмәй. Зыяндаш бисмилланан ҡурҡа, тиҙәр. Шуға күрә ауырыуға ошо доғаны уҡырға ҡушалар:

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим,
Шифаһын бир
Сәбәп ҡыл минең ауырыуыма (өс тапҡыр ҡабатлана).

**Ҡатма име**

Ҡатма ҡурҡыуҙан була, тиҙәр. Шуға ҡатма булһа, ауырыуҙан ҡурҡыуҙы алырға, йә сығарырға кәрәк. Быының өсөн күкрәкте сүрәләр уҡып, ҡаҡҡыларға кәрәк.

**Кесе телдең төшөүе**

Ҡатманан, нык ҡурҡыуҙан кесе тел төшә икән. Кеше был осраҡта һөйләшә алмай, уның хатта тыны ҡыҫыла. Ауырыуҙы йүнәлтеү өсөн кесе телде ҡалаҡ менән күтәреү кәрәк. Күтәргәндә "Әлхәм" сүрәһен уҡыйҙар.

**Тын алмауҙан (ел ауырыуынан)**

Ел ауырыуы, тип һыуыҡ үтеүҙе әйтәләр. Ел тейһә, кеше тын ала алмай интегә. Был ауырыуға ҡаршы бисмилла уҡып, төтәнәк эшләйҙәр, аҙаҡ бөтә ергә һыу һибәләр, ҡалған-боҫҡан аштарҙы, ауырыуҙың берәй нәмәһен ергә күмәләр.

**Ҡолаҡбауға им-том**

Ҡолаҡбау - ҡолаҡ артына сыҡҡан шеш. Ул ел ауырыуы. Унан ҡотолоу өсөн ағасҡа ҡара таҫма бәйләгәндәр. Ел эйәһе таҫманы үҙенең ҡойроғо тип уйлап, ағас ботаҡтарына уралып тороп ҡалһа, ауырыу һауыға.

**Ҡолаҡ боҙолһа**

Ҡолаҡты ҡоштар килгәндә, ҡошҡорт салғанда тишмәйҙәр. Ҡоштар киткәндә лә тишергә ярамай. Ҡолаҡ боҙолһа, көмөш тағып, май һөртөп, доға уҡып имләгәндәр.

**Йөрәк һылау**

Ҡапыл ҡурҡһаң, йөрәк урынынан ҡуба, тая тиҙәр. "Ҡупһа" йөрәк тапҡырын ипләп кенә һыйпайҙар һәм "тартып" бер ергә килтергәс, тапҡырына бәләкәй һауыт ҡуялар. Шул йөрәк ултыртыу була.

**Тәгәрмәс туғыны име**

Кешенең бик нык ҡото осһа, арба тәгәрмәсенең туғынын, эске яғынан һыҙырып алып, уны утка тотоп, тәүҙә йөрәк яғындағы яурынбашка, унан уңына, шунан башы осонда һыулы һауытка һалғандар.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**"Башҡорттарҙың им-том китабы".**

ТАРИХ ҺАБАҠТАРЫ

# Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,

## Бүтәнсә юҡ сарабыҙ...

**Башҡорттоң тарихи үткәне менән күптән ҡыҙыҡһынған һәм был тарихтың ергә ҡағылышлы фажиғәле мәлдәре менән хәбәрҙар кеше булараҡ, мине ҡайһы бер милләттәштәребеҙҙең ергә битараф мөнәсәбәте күптән борсой. Ә бындай битарафлыҡтың эҙемтәләре ҡот осҡос булырға мөмкин. Шәйехзада Бабич әйткәнсә:**

**Тупраҡ алһаҡ, ҡалабыҙ,**
**Бүтәнсә юҡ сарабыҙ.**
**Тупраҡ китһә, һау бул, донъя,**
**Өҙөлмәктер самабыҙ.**

**Ер менән бәйле һабаҡтар, фекерҙәрем менән уртаҡлашырға тип, ҡулға ҡәләм алдым.**

### ӘЗЕРИҘӘРҘЕҢ ҺАБАҠ АЛҒАНЫ

Һүҙемде әзербайжан милләтенең фажиғәһенә әйләнгән Таулы Карабахтан башлағым килә. Билдәле булыуынса, хәҙер бөтә халҡын тип әйтерлек әрмәндәр тәшкил иткән Таулы Карабах автономиялы өлкәһе совет власы йылдарында Әзербайжан республикаһы составында ине. Был ерҙәр Рәсәй империяһына ҡушылғанға тиклем Иран дәүләтенә буйһонған әзербайжан хандарының ере була. Рәсәй империяһы 1826-1828 йылдарҙа Иранға ҡарата алып барған һуғышта еңгәндән һуң был ике дәүләт 1828 йылда Туркманчай килешеүе төҙөй һәм Төньяҡ Әзербайжан, шул иҫәптән уның составындағы Таулы Карабах ерҙәре лә Рәсәй дәүләтенә ҡушыла. Был мәлдә ул ерҙәрҙә тулыһынса әзериҙәр йәшәгән була. Рәсәйгә ҡушҡандан һуң бай әрмән сауҙагәрҙәре үтенесе буйынса батшаның рөхсәте менән ул ерҙәргә ике йөҙгә яҡын әрмән ғаиләһе күсерелә. Бына ошонан башлана ла инде ул ерҙәрҙә әрмәндәр тарихы. Был турала мин хәҙерге заман тарихсылары яҙғандарҙан түгел, ә XX быуаттың 80-се йылдарында хәҙер мәрхүм шағирыбыҙ Вил Ғүмәровтың шәхси китапханаһында һаҡланған XIX быуат энциклопедияһынан уҡығайным.

XIX быуат тарихсылары әле генә булып үткән ваҡиғалар менән беҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ таныш булғандарҙыр, тип уйлайым. "Кем ере булған?" тигәндә, мин совет тарихсыларына түгел, ә элекке XIX быуат тарихсыларына ышанырға мәжбүрмен. Уларҙы әзериҙәр яғын ҡайғыртҡан, тип ғәйепләп булмай, сөнки әзериҙәр - мосолман, ә христиан урыҫтарҙың симпатияһы үҙҙәренә диндәш, тимәк, рухташ та булған әрмәндәр яғында булғаны бөтәбеҙгә лә мәғлүм. Был әле лә шулай. Һәм әрмәндәр үҙҙәренең сәйәси уйындарында быны менән әле булһа оҫта файҙалана. Шуға күрә, әгәр ҙә урыҫ тарихсылары баяғы Таулы Карабах ерҙәрен "әзериҙәр ере", тип яҙған икән, был мәғлүмәтте ысынға тап килә тип ҡабул итергә кәрәк. Әлбиттә, әрмән тарихсылары: "Ул ерҙәр борон-борондан әрмән ере булған. Төркиҙәр, тимәк әзериҙәр ҙә, был ерҙәргә бик һуң, әрмәндәрҙе ҡыҫырыҡлап килеп ултырған",- тип яҙа. Быныһы инде совет власы йылдарында барлыҡҡа килгән "тарих".

Батша властары Иран менән Төркиә кеүек мосолман дәүләттәренә ҡарата алып барған колониаль сәйәсәтендә христиан әрмәндәрҙе тәбиғи союздашы һанай. Шуға күрә лә, әрмәндәрҙе үҙ мәнфәғәттәрендә файҙаланыу өсөн ерҙәр биреү кеүек ымһындырыу сараларын ҡуллана. Һөҙөмтәлә, XIX быуат башында тулыһынса әзериҙәр йәшәгән Карабах йөҙ йыл эсендә әзери ерҙәренән әрмән ерҙәренә әйләнә. "СССР" тигән дәүләт юҡҡа сығыу менән Әзербайжан республикаһы уртаһындағы Карабах менән Әрмәнстанды айырып торған аралағы бер нисә районды баҫып алып, әрмәндәр Таулы Карабахты үҙ ерҙәренә ҡушалар. Хәҙер тиҫтә йылдан ашыу Таулы Карабах Әзербайжан халҡының һәм дәүләтенең иң оло фажиғәһенә әйләнде. Әзербайжан нисек итеп ерҙәрен кире ҡайтарып алыу тураһында уйлай. Ярар, был турала етеп торор.

### ҒӘРӘПТЕҢ ҺАБАҠ АЛҒАНЫ

Беҙҙең өсөн фәһем алырлыҡ һәм беҙҙе уйланырға мәжбүр итерлек тағын бер тарих: йәһүдтәрҙең ғәрәптәрҙән ер һатып алып, улар араһына үтеп инеүе, нығыныуы һәм хәҙерге Израиль дәүләтен төҙөүе тарихы. Билдәле булыуынса, беҙҙең эраға ҡәҙәр 54 йылда Рим прокураторы Понтий Пилат бөтә йәһүдтәрҙе, Рим империяһына ҡаршы баш күтәргән өсөн, үҙ ерҙәренән ҡыуып ебәрә. Бына ошо ваҡыттан алып 1947 йылға тиклем йәһүдтәр ер йөҙөнөң бөтә тарафтарына ла таралып, бөтәһе тарафынан да ҡыйырһытылып, тибелеп, туҙырап йөрөй һәм бына шул ике мең йыл буйы үҙ дәүләттәрен тергеҙеү тураһында хыяллана. Ошо хыял һәм донъяның төрлө ерҙәрендә ваҡыт-ваҡыт ойошторолған туҡмауҙар, йәшәгән ерҙәренән ҡыуалап ебәреү кеүек төрлө йәберһетеүҙәрҙән туйған йәһүдтәр XIX быуаттың икенсе яртыһында, йыйылышып, үҙ дәүләтен төҙөү мәсьәләһен ҡырҡыу мәсьәләгә әйләндереп, төрлө һүҙ йөрөтөүҙәрҙән ғәмәли сараларға күсеү юлына баҫырға мәжбүр була. Улар төрлө илдәрҙән яйлап-яйлап ғәрәптәр йәшәгән урындарға күсенеп ултырып, урындағы халыҡтан ер һатып ала башлай. Бер нисә йәһүд ғаиләһе күсеп килеп, ер ала ла, эргәһенә туғандарын, улары булмаһа, таныш-белештәрен, милләттәштәрен саҡырып алып, уларға ла ер алырға ярҙам итеп, әкренләп кенә ғәрәптәр араһында йәһүд ауылдарын, ҡасабаларын барлыҡҡа килтерә. Шулай итеп, XIX быуат һәм XX быуаттың башы ер алыу, унда нығыныу кеүек мәсьәләләрҙе хәл итеү менән үтеп китә. Был ваҡыт эсендә яңы ерҙәрҙә йәһүдтәрҙең бер нисә быуыны үҫеп етеп, ергә берегә, нығына, улар унда күпселекте тәшкил итә башлай. Хәҙер иһә ролдәр алмашына - йәһүдтәр үҙҙәре ғәрәптәрҙе ҡыҫырыҡлай башлай, элекке ер хужаларына түҙеп тормаҫ тормош тыуҙыра. "Өлкән ағай" әйтмешләй, "Кузяның әсәһен күрһәтәләр". Ғәрәптәр килеп тыуған хәлгә сыҙамай, үҙҙәре үк йәшәгән ерҙәрҙән ҡасып, милләттәштәре күберәк ҡалған ерҙәргә күсеп китә башлай. Германияла Гитлер власҡа килеп, йәһүдтәрҙе күпләп ҡыра башлағас, бөтә донъя йәмәғәтселегә йәһүдтәрҙе яҡлап сыға. Йәһүдтәр ошонан файҙаланып, үҙ дәүләтен төҙөү тураһындағы мәсьәләне ҡырҡыу сәйәси мәсьәләгә әйләндерә һәм 1947 йылда Израиль дәүләте төҙөлә. Дәүләт төҙөлөү менән йәһүдтәр ғәрәптәрҙең ҡалған ерҙәрен дә баҫып алып, Израиль дәүләтенең ерҙәрен киңәйтеүгә өлгәшә. Өлгәшеүен өлгәшәләр ҙә, тик бына дәүләттә тынғылыҡ урынлаштыра алмайҙар. Ғәрәптәр менән Израиль араһында ирешеш-тартыш, ҡан-ҡойош һаман туҡтамай дауам итә. Быныһын инде бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ.



### БАШҠОРТТОҢ ҺАБАҠ АЛҒАНЫ

Күреүебеҙсә, ергә үтеп инеү, уны үҙләштереүҙең, уға хужа булып китеүҙең ысулдары әрмәндәрҙә лә, йәһүдтәрҙә лә - бер үк. Хәҙер үҙебеҙгә әйләнеп ҡайтайыҡ. Әле үрҙә миҫалға килтерелгән әзери-әрмән, ғәрәп-йәһүд араһындағы фажиғәле талаш-тартыштарҙың сәбәбе ер менән бәйле булған кеүек, Башҡорт тарихының да иң ҡанлы биттәре ергә талаш менән бәйле. Беҙҙең ерҙәрҙә лә килмешәктәр тәүҙә әҙ була. Уларҙы киң күңелле башҡорттар ҡолас йәйеп тигәндәй ҡаршы ала, урынлашырға, нығынырға ярҙам итә. Сөнки ере күп башҡорт үҙенә ниндәй ҡурҡыныс янағанын әле аңламай ҙа. Ситтән килгәндәр беҙҙә нығынып көсәйеп алғас, үҙҙәрен хужа итеп тоя башлай. Бында уларға батша властары ла ярҙам итә. Башҡорттар Рәсәйгә үҙ ирке менән теләп ҡушылһа ла, батша властары уларға бер ҡасан да ышанмай, гел шикләнеп ҡарай, башҡорт ерҙәрен нисек тә булһа Рәсәй дәүләтенә нығыраҡ бәйләү тураһында уйлай. Шуға күрә лә башҡорт ерҙәренә күпләп икенсе халыҡтарҙы күсереү яғын ғына ҡайғырта. Сөнки әтәмбайҙар ерҙе урыҫ батшаһынан алғас, уға йәне-тәне менән хеҙмәт итәсәк бит. Властар һәр саҡта ла килмешәктәр яҡлы булып ҡала, сөнки улар властарҙың таянысына әйләнә.

XIX быуатта башҡорт үҙ ерен күпләп һата башлай һәм әллә күпме еренән ҡолаҡ ҡаға. Ер һатыуға ҡаршы булған күпме ир-егеттең башы властар тарафынан төрмәләрҙә, һөргөндәрҙә серетелә. Уларҙың аяныслы яҙмышы тураһында халҡыбыҙ күпме йырҙар сығарған. Беҙ үҙебеҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ерҙәрен арзанға ғына (бушлай, хатта бер нисә әсмуха сәйгә, тип әйтерлек) һатып бөткәндәренә аптырай инек. Бына шул көндәр яңынан алдыбыҙға килеп баҫты түгелме? Элек сәйгә алданһалар, хәҙер араҡыға алданыу ҡурҡынысы бар. Араҡы менән күҙе-башы томаланған кешегә бер нәмә лә кәрәкмәй. Ул әллә нәмәһен дә һатып ебәрер. Уға милләт яҙмышы ла, балаларының киләсәге лә кәрәкмәй. Ул тик бөгөнгөһө менән генә йәшәй

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**юрист.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Онотмайыҡ, 1919 йылда башҡорттар Рәсәйҙең "Башҡортостан" тигән автономиялы республикаһын һәм хөкүмәтен әллә күпме аҫыл ир-егеттәрен юғалтып, ҡандарын дарьялай ҡойоп, ана шул киҫкен ер мәсьәләһен хәл итеү, был донъяла халыҡ булараҡ һаҡланып ҡалыу кеүек ҡырҡыу, аяуһыҙ һорау алдыбыҙға килеп баҫҡанға, үҙ мәнфәғәттәрен яҡлауҙың иң һуңғы сараһы булараҡ төҙөй. Ленин һәм уның эйәрсендәре башҡорттар менән 1919 йылғы Килешеүҙе беҙҙең халыҡтың милли хоҡуҡтарын танығандан түгел, килеп тыуған сәйәси хәлде нисек тә булһа йомшартыу өсөн төҙөй, нығынып алғансы теләһә ниндәй ташламалар яһарға, башҡорттар ҡуйған шарттарға ризалашырға мәжбүр була. Үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булған башҡорттар Ленин большевиктары яһаған революциянан һуң ерһеҙ-ниһеҙ тороп ҡала. Быны беҙ яҡшы беләбеҙ. Ерһеҙ ҡалған халыҡ икенсе халыҡтар араһында ирееп юғалыуға дусар ителә. Тарихтан быға бихисап миҫалдар килтерергә мөмкин. Йәһүдтәр - ситкә ҡыуып таратылғандан һуң әллә нисәмә быуат үткәс, юғалтҡан ерҙәрен кире ҡайтарып алып, унда үҙ дәүләтен тергеҙеүгә ирешкән берҙән-бер халыҡ. Был - кешелек тарихында берҙән-бер феномен.**

**Беҙгә бүтән халыҡтарҙың тарихында булып үткән ваҡиғаларҙан фәһем алып, уларҙан өйрәнергә кәрәк. Аҡыллы кеше сит кеше хатаһында өйрәнә, тиҙәр бит. Тарих тырмаһына ҡабат-ҡабат баҫмайыҡ, халыҡтар тарихы биреп торған һабаҡтар беҙгә лә фәһем булһын. Ер мәсьәләһендә бигерәк тә.**

***✓ "Өйө ҡаршыһында аҡҡан шишмәлә көн дә биш тапҡыр йыуынған инсанды шул шишмә һыуы нисек таҙалаһа, бер көндә биш тапҡыр ҡылынған намаҙ ҙа гонаһтарынан шулай таҙалар", - тигән.***

*ӘҮЛИӘ-ӘҮЛИӘЛЕК*

# Шәмиғол хәлфә

## Мөхәмәт ағай һөйләгәндәр

Мөхәммәт ағай тирә-йүнгә танылған балта оҫтаһы ине. Шәмиғол хәлфә 1956 йылда улы Дамирға өй һалдырҙы. Мөхәммәт ағайҙы тәҙрә, ишек яңаҡтары һуҡтырырға саҡыра хәлфә. Бер көндө Мөхәммәт ағай хәлфәгә әйтмәй генә ғаиләһе янына ҡайтып килергә була. Велосипедына ултыра ла оло юлдан елдерә был. Көн кискә ауышып, тирә-яҡты ҡараңғы төн солғап ала. Таң атыуға бер ауылға барып инһә, үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмай тора: ул хәлфә йортонда баҫып тора. Мөхәммәтте хәлфә үҙе ҡаршы ала ла: "Йә, улым, килен янына нисек ҡайтып килдең? Килен ни хәлдә?" - тип кеткелдәп көлә. Шунан:"Улым, бер ҡасан да рөхсәтһеҙ эш башҡарма. Рөхсәт һораһаң, телең өҙөлөп ҡалмаҫ ине бит", - ти. Шунан Мөхәммәт ағай был хәлдең Шәмиғол хәлфә тылсымы менән атҡарылыуын аңлай.

## КГБ-ның эҙәрлекләгәне

1936-1937 йылдарҙа хәлфәне КГБ эҙәрлекләй башлай. Бер ваҡыт КГБ хеҙмәткәре хәлфәнең өйөнә килеп инә. "Ул өйҙә юҡ, ҡайҙа киткәнен әйтмәне", тиҙәр өйҙәгеләр. Был ваҡытта хәлфә Юлдыбай ауылында Яныбай исемле танышында ултырған була. Сәй эсергә әҙерләнгән саҡта ғына хәлфә ҡапыл йыйына башлай: "Яныбай, мин һеҙҙә булманым, минең арттан киләләр", - ти ҙә сығып та китә. Шул арала КГБ хеҙмәткәрҙәре килеп инә. Яныбай, ҡурҡыпмы, аңғармаҫтанмы, "Ул сығып китте", тип әйтеп ысҡындыра. КГБ хеҙмәткәрҙәре ҡапҡа төбөнә килеп туҡтағанда тыныс ҡына эргәләренән уҙып киткән ҡатын-ҡыҙ күлдәгендәге кешене күреүҙәрен иҫкә төшөрә. Тимәк, шул Шәмиғол хәлфә булған, тиешә улар.

Хәлфәне эҙәрлекләй торғас, бер көндө өйөндә тура килтереп, Мораҡҡа илтеп ябып ҡуялар. Икенсе көндө хәлфәнән һорау алырға тип, бикле йоҙаҡты асып, камераға инһәләр, хәлфә унда булмай сыға. "Һин асып сығарып ебәргәнһең", тип, һаҡсыны камераға ябып ҡуялар. КГБ хеҙмәткәрҙәре тағы Ишбирҙегә юл тота. Барһалар, хәлфә кинәнеп сәй эсеп ултыра. Уның ҡулдарын бәйләп, кире Мораҡҡа алып китәләр. Юлда КГБ хеҙмәткәрҙәре туҡтап, урман араһына "йомош йомошларға" инеп сыҡҡансы, хәлфә урынында булмай сыға. Ҡоттары осоп, ары йүгереп, бире йүгереп йөрөгән мәлдә "Мин бында" тигән тауышҡа әйләнеп ҡараһалар, ағас араһынан ҡулдары бәйләнмәгән хәлфә сығып килә икән. Ҡулдарын бәйҙән нисек ысҡындырыуы КГБ хеҙмәткәрҙәре өсөн сер булып ҡала. Хәлфәне Мораҡҡа килтергәс тә начальникҡа алып инәләр. Һорау алып, протокол төҙөлә. Хәлфә: "Мин бер кемгә лә зыян килтермәйем. Фәҡәт ауырыу кешеләрҙе өшкөрөп дауалайым ғына", - тип, протоколға ҡул ҡуйыуҙан баш тарта. Хәлфәне бер нисек тә протоколға ҡул ҡуйырға күндерә алмағас, начальник: "Ярай, улайһа, үҙеңә үпкәлә. Ҡул ҡуйыуҙан баш тарта, тип яҙып ҡуям", - тип, ҡәләмен ҡағыҙға терәүе була, шул ерҙә ике ҡулы ла хәрәкәтһеҙ ҡатып ҡала. Начальник ҡулын күтәрә лә, хәрәкәт итә лә алмай. Шунан ул барыһын да аңлай һәм:"Хәлфә, зинһар, шаярыуыңды ташла, мине зәғиф яһама, протоколды яңынан яҙырбыҙ", - тип инәлә башлай.

Хеҙмәткәрҙәргә:"Хәлфәне нисек алып килдегеҙ, шулай алып барып ҡуйығыҙ ауылына" , - тип бойора. Хәлфә начальниктың ҡулдарын "йомшарта". Шунан тәүбәһенә килгән начальник барыһына ла ишетелерлек итеп: "Егеттәр, хәлфәне эҙәрлекләп йөрөмәгеҙ. Ул - әүлиә. Уға беҙҙең көс етмәй", - ти.

## Леонидты дауалағаны

Бикес ауылынан Урал Ишемғолов Леонид Панков менән булған бер ваҡиғаны һөйләне. Леонид Панков эштә сағында аяҡ быуынын сығара. Дауаханаға барып, табиптарға мөрәжәғәт итә. Табиптар, беҙ быуынды ултырта алмайбыҙ, тип, уны ҡайтарып ебәрә. Леонид аяғы һыҙлауына түҙә алмай яфаланғас, яҡын дуҫы Хөснулла Рысаев Шәмиғол хәлфәгә барырға кәңәш итә. Леонид иртәгәһенә үк Ишбирҙегә юлға сыға. Бәхеткә күрә, хәлфә өйҙә була. Тик ул ауырыуҙы өйгә индермәй, ә Леонидтың үҙенә лапаҫ башына менергә ҡуша. Леонид башҡорттар араһында йәшәгәнлектән, башҡорт телен яҡшы белгән була. "Олатай, мин бит лапаҫ башына менеү түгел, урындан ҡуҙғала ла алмайым", ти ул. "Ташла ҡултыҡ таяғыңды. Ҡайҙа, сис әле аяғыңа ураған сепрәгеңде", - ти хәлфә. Ул ауырыуҙың аяғын ҡулы менән һыпыра ла, "Бар, ана баҫҡыс, мен лапаҫ башына", ти. Леонид баҫҡыстан менеп кенә еткәс, хәлфә:"Хәҙер инде ергә һикер, ҡурҡма", тип бойора. Леонид күҙҙәрен йома ла, ергә һикерә. Бер ни булмағандай, урынынан тороп, атлап та китә. Бер ни аңламай, аптырап ҡалған Леонидҡа хәлфә өшкөрөлгән тоҙ бирә, бетеү яҙып тоттора. "Тоҙло һыу менән аяғыңды йыу. Бетеүҙе түшеңә таҡ, юғалтма. Юғалтһаң, аяғың тағы ауыртыр", ти. Леонид рәхмәт әйтеп, хәйерен биреп, ҡыуанып ҡайтып китә.

## Ен ташы

Мин Өфөгә барырға тип, Мәләүез автовокзалында билет алырға торам: "Ағай, һеҙ кисә генә Шәмиғол хәлфә тураһында телевизорҙан сығыш яһанығыҙ, бигерәк оҡшаны. Күңелем тулып китте", - тип өндәште бер ҡатын. Мәләүез районына ҡараған Бельская ауылынан Ғәбиҙә Лотфуллина атлы икән. Шунан һөйләп китте: "Әсәйем Рәхимә Аллаяр ҡыҙы менән атайым Миңлеәхмәт Сәхиулла улы көтмәгәндә ауырып киттеләр. Икеһен дә Йомағужа дауаханаһына алып барып һалдылар. Бер ай дауалап, сирҙәрен асыҡлай алмағас, өйҙәренә ҡайтып үлһендәр инде, тип, ҡайтарып ебәрә уларҙы табиптар. Бер көндө Аптраҡ ауылынан инәйебеҙ килде лә, ауырыуҙарҙы Шәмиғол хәлфәгә алып барайыҡ, тип тәҡдим итте. Атайым менән әсәйемде арбаға һуҙып һалып, Ишбирҙегә көскә алып барып еткерҙек. Хәлфә: "Бик оҙаҡ килдегеҙ, етмәһә, икеләнеүегеҙ ҙә көслө. Ихлас күңел менән сирҙән арыныуға өмөтләнергә кәрәк", - тине. Арбала ятҡан ауырыуҙарға күҙ һалып алды ла, һыйыр аҙбарына инеп китте. Унан сыҡҡас, ниҙер һөйләнә-һөйләнә әсәйемде өшкөрҙө һәм: "Һылыу, һарайҙа һыйыр һауғанда билеңә кем һуҡты?" - тип һораны.

- Әлләсе, себен ҡыуалағанда һыйыр ҡойроғо менән һуҡҡылай инде ул...

- Юҡ шул, һыйырыңды бисмилләһыҙ һауғанһың. Һыйыр һауғанда күнәгеңә нимә төштө, иҫләйһеңме?

- Һөттө бушатҡанда бер түңәрәк таш килеп сыҡты.

- Ә һин ул ташты һарайға ташлағанһың. Ярай әле ҡыҙың өйҙә булмаған, ул да шул һөттө эсеп ауырыр ине...

Шунан хәлфә атайымды ла, әсәйемде лә һарай эсенә саҡыра. Атайыма өйөлөп ятҡан тиреҫкә ҡулын тығып, ниҙер эҙләргә бойорғас, ул ыуалып торған тиреҫте услап ала ла, унан бер таш килтереп сығара.

- Рәхимә һылыу, күнәгеңә төшкән теге таш ошомо, ҡара әле, - тип өндәшә әсәйемә хәлфә.

- Эйе, шул таш, ул нисек килеп сыҡҡан бында?- тип аптырана әсәйем.

- Бына был ен ташы. Ен уны бисмиллаһыҙ эш башлаған кешегә бүләк итә. Бынан ары бер генә эште лә бисмиллаһыҙ башламағыҙ. Был ташты, ана, Энәк йылғаһы буйында һыуҙан ситтәрәк ташҡа бәр, осҡондары сәсрәп китһен. Ен уны һеҙҙең йортта ғына түгел, башҡа бер урында ла файҙалана алмаһын. Юлда гел шатланып ҡайтығыҙ. Башҡаса килеп йөрөмәгеҙ...

"Әсәйем менән атайымды дауалағас, Шәмиғол хәлфә минең дә башымдан һыйпаны. Шунан өшкөрөлгән тоҙ, бетеү яҙып бирҙе. Бетеүҙе ендән урлатма, тине". Шулай тип һүҙҙәрен тамамланы яңы танышым.

**Миңнулла ӘЛИМҒОЛОВ.**
Күгәрсен районы.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ӘБЕЙҘӘРҘЕҢ СЕРЕ БАР

**Бер мәҙәк һөйләнеләр. Мәҙәк тип, мәҙәк тә түгел - ысынбарлыҡта булған һәм мәҙәк тойолған хәл. Уның мәҙәгенә ҡарағанда, уйландыра торған тәьҫире көслөрәк, буғай.**

Хәйер тараткан ваҡытта бер әбей икенсе әбейгә әйләнештән сыҡҡан аҡса биргән. Хәйер алыусы быны һиҙеп ҡалған да: "Атаҡ-атаҡ, күрше, һин миңә әйләнештән сыҡҡан аҡса биргәнһең бит", - ти икән. "Ярай, шым да ҡуй, икенсе юлы хәйер таратҡанда уны миңә кире бирерһең, шулай икебеҙҙең арала ғына йөрөһөн", - тип шыбырлай икән хәйер биреүсе. Мәҙәкме? Эйе, мәҙәк тойола. Әммә ике әбейҙең үҙ-ара шым ғына серләшеүендә ниндәйҙер хикмәт, сер бар. Әйләнештән сыҡҡан баҡыр аҡса ике әбейҙең серен һәм бер-береһенә ҡарата булған йылы мөнәсәбәтен бәйләүсе булып һаҡланасаҡ бит, сөнки уртаҡ сер булғанда уртаҡ мөнәсәбәт тә була. Сер шундуҡ асылһа, ул сер булыуҙан ғына туҡтамай, мөнәсәбәттәрҙе лә өҙә. Өҙмәгән хәлдә лә, икенсе кимәлгә күсерә. Ике ғашиҡтың мөхәббәтен нимә һаҡлай? Әлбиттә, икәү генә белгән уртаҡ сер.

Әйләнештән сыҡҡан аҡсағыҙ булһа, бер-берегеҙгә тартынмайынса бирегеҙ. Бөгөн әйләнештә яңы аҡсалар йөрөгән ваҡытта беҙҙе, йәғни үткән быуатты күргәндәрҙе, тап ана шул әйләнештән сыҡҡан аҡса хәтирәләр ебе менән бәйләй бит.

**Кинйә ШӘМСИНУРОВ.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Ҡолағы төбөндә өләсәһенең һүҙҙәре яңғырап киткәндәй булды: "Улым, намаҙҙы һуңлатырға яраймы һуң инде?". Өләсәһе үҙе, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, аҙан тауышын ишеткәс тә, йәштәргә хас хәрәкәт менән урынынан тора һалып, намаҙына йүгерер ине. Ә бына ул һис тә генә лә өлгөрә алмай, гел генә намаҙын һуңлатып уҡый.**

# Намаҙ уҡыһаң...
## ожмахҡа юлығырһың

Ошо хаҡта уйлап ултырғанда, ул ҡапыл сәғәтенә күҙ һалды: бәй, аҡшам намаҙы сығырға ун биш минут ваҡыт ҡалған. Урынынан ырғып тора һалып, тиҙ генә тәһәрәтләнде, бит-ҡулын тейешенсә ҡоротоп та тормай, бүлмәһенә ашыҡты. Ваҡыты үтеп барыу сәбәпле, намаҙ фарызын тиҙ-тиҙ генә үтәргә мәжбүр булды. Тәсбих тартҡанда йәнә өләсәһе иҫенә төштө: "Ошо хәлемде күрһә, асыуланмай ғына көйгән булыр ине",- тип хәтирәләргә бирелде.

Бик ярата ине ул өләсәһен. Гел генә уның намаҙ уҡыуын күҙәтә һәм уның ихлас хәрәкәттәренә ҡарап, хайран ҡала торғайны. Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә: "Өйө ҡаршыһында аҡҡан шишмәлә көн дә биш тапҡыр йыуынған инсанды шул шишмә һыуы нисек таҙалаһа, бер көндә биш тапҡыр ҡылынған намаҙ ҙа гонаһтарынан шулай таҙалар", - тигән. Ошо һүҙҙәрҙең хаҡлығына ул өләсәһе өлгөһөндә ышана, уның көслө иманына, саф күңеллегенә, ихласлығына һоҡлана ине.

Бер көндө ул арып-талып, мәктәптән һуңға ғына ҡалып ҡайтып инде. Намаҙҙан һуң, ғәҙәттәгесә, башын ике ҡулы араһына ҡуйып, сәждәгә ултырҙы. Йыш ҡына шул хәлдә ял итеп, уйланып ултырырға ярата. Ә был көндө ул ултырған урында йоҡомһорап китте... Ахырызаман ҡупҡан. Ҡоттары осоп, ни эшләргә белмәгән кешеләр унда-бында саба. Был ығы-зығыла кемдең ни ҡылғанын да белеп булмай. Илауһыҡтау тауыштары ҡолаҡты ярып бара.

Ул да был мәхшәрҙән нисек тә ҡотолорға теләп, йүгергеләй. Фани донъяла йәшәгән саҡта ҡиәмәт, әхирәт барлығы, донъялыҡта ҡылғандарың өсөн яуап бирер көн килере хаҡында хәбәрҙар булһа ла, ундай хәбәрҙәргә ҡул һелтәп, вайымһыҙ ҡарағайны. Ҡиәмәт был тиклем дә ҡурҡыныс, йән өшөткөс булыр тип кем уйлаған? Һорау алыуҙар, хөкөм ҡылыуҙар башланды. Бер ваҡыт уның исемен дә әйттеләр. Ни эшләргә белмәй, аптырап торғанында ике фәрештә пәйҙә булды ла, уның ҡулдарынан тотоп, яуап тотоу урынына алып барҙылар. Бөтөн ғүмере күҙ алдына баҫты. "Аллаға шөкөр, - тине ул үҙ алдына, - иманлы әҙәмдәр менән бер юлда булдым. Атайым нәфсе ҡоло булманы, тапҡан малынан йәтимдәргә, фәҡирҙәргә лә өлөш сығарыр ине. Әсәйем дә кешеләргә асыҡ йөҙлө, йомарт күңелле булды. Мин дә уларҙан үрнәк алып йәшәнем, намаҙ уҡыным, ураҙа тоттом. Кешеләргә хәлемдән килгәнсә иман хәҡиҡәттәрен аңлаттым. Һәр хәлдә, фарыҙдарымды еренә еткереп үтәргә, харамдан, гонаһтарҙан ары торорға тырыштым. Раббымды яратам. Нисек кенә булмаһын, арыу мосолманмын. Моғайын, тамуҡҡа эләкмәм. Аллам һаҡлаһын!"

Йәне өсөн шомға төшөп, бар белгән доғаларын уҡый-уҡый, Хоҙайҙың рәхмәтенә һыйынып, үҙ-үҙен тынысландырырға тырышты ул. Алланың шәфҡәтенә өмөт итте. Тик... хөкөм ҡарарын ишеткәс, үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанмай торҙо. Был ни ғәжәп: ул йәһәннәмгә китәсәк әҙәмдәр төркөмөндә ине.

Бына ул ҡайнап-шажлап торған утҡа төшөп бара. "Ураҙаларым, Ҡөрьән уҡыуым, намаҙҙарым... Береһе лә мине ҡотҡармаймы ни?" Уның яр һалып ялбарыуын бер кем дә ишетмәне. Тамуҡ утының ялҡындары уны бына-бына өтөп аласаҡ... Йәһәннәм утына инде төшөп еттем тигәндә, кемдер уның ҡулынан тотоп, ут ғазабынан һөйрәп алды. Әйләнеп ҡараһа, оҙон аҡ һаҡаллы, мөләйем йөҙлө бер ҡартты күрҙе. "Һеҙ кем булаһығыҙ, минең ҡотҡарыусым?", - тип һорағас, ҡарт: "Мин һинең намаҙҙарың", - тип йылмайҙы. "Ниңә улай һуңланығыҙ?". "Һин дә мине гел һуңға ҡалдыра инең бит. Иҫеңә төштөмө?"

...Сәждәгә киткән еренән, шыбыр тиргә батып, ҡапыл уянып китте ул. Тыштан аҙан тауышы ишетелә ине. Йәстү намаҙы еткән икән. Уҡтай атылып урынынан торҙо ла ул, тәһәрәт алырға йүгерҙе.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА,**
**БДУ студенты.**

**✓ Тәрбиә эше менән, дөйөм алғанда, тик ҡатын-ҡыҙҙар шөғөлләнә. Ғаиләлә лә балаларҙы әсәйҙәр тәрбиәләй. Йомшаҡ, мәүеш, әҙергә-бәҙер булып йәшәгән ир-егеттәр ошондай мөхиттә тәрбиәләнә лә инде.**



**Тикшеренеүҙәр раҫлауынса, юғары уҡыу йортонда алған белем дүрт-биш йыл эсендә юҡҡа сығып бөтә яҙа икән. Тимәк, уны тулыландырып, яңыртып тороу мотлаҡ. Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты тап ошоно - юғары белемле уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу, уҡыу-уҡытыу мәсьәләләренә ҡағылышлы күп мәсьәләләрҙе хәл итеү бурысын тормошҡа ашыра ла инде. Бөгөнгө "Монолог" рубрикаһы ҡунағы - ошо институттың ректоры, тарих фәндәре кандидаты, филология фәндәре докторы, профессор Фәнил Тимерйән улы КҮЗБӘКОВ мәғариф, уҡытыусы һөнәре, тәрбиә тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлаша.**

# УҠЫТЫУСЫ ҮҘЕ уҡытыусы булыуҙан туҡтай

## УҠЫТЫУСЫНЫ УҠЫТЫУСЫ

Беҙҙән алдағы быуындарҙа уҡытыусы һөнәренә ҡарата бик йылы мөнәсәбәт булған. Беҙҙең быуын шул йылы мөнәсәбәтте һаҡлап ҡалған һуңғы быуындыр ҙа, бәлки. Ысынлап та, беҙ уҡытыусыға фәрештәгә ҡараған кеүек ҡарауыбыҙ менән бәхетле булғанбыҙ. Быңдай мөнәсәбәт, миңә ҡалһа, әле беҙҙең институтта ла хөкөм һөрә. Белемен камиллаштырыуға уҡытыусылар уҡыусы рәүешендә килһә лә, беҙ ҙә улырҙан нимәгәлер өйрәнеп ҡалабыҙ, сөнки уларҙың күпселеге профессиональ юғарылыҡтағы тәжрибәгә эйә булған шәхестәр. Мәктәптә 20-30 йыл эшләгән уҡытыусылар ҙа беҙгә белемен камиллаштырырға килә. Бөгөн бөтә яңылыҡтар артынан эйәреүе ҡыйын һәм ҡатмарлы, шуға күрә беҙ был йәһәттән тик ярҙам ғына күрһәтәбеҙ. Уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы тигән статусыбыҙ, әлбиттә, иҫ киткес ҙур яуаплылыҡ өҫтәй. Алдынғы ҡарашлы, башҡаларҙы үҙ артынан эйәртә алған уҡытыусы ҡайҙа ғына булһа ла интеллигентлы, мәҙәниле шәхес булып ҡала. Шуға күрәлер ҙә ауыл уҡытыусыһын, ниндәй заманда йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, төрлө йәмәғәт эштәренә ылыҡтырырға тырышалар. Һөнәре талап иткәс, уҡытыусы бындай эштәрҙән, әлбиттә, ситтә ҡала алмай. Был юғарылыҡ, бәлки, бөтөн уҡытыусыларға ла хас түгелдер, әммә беҙ уға ынтылырға тейеш. "Учительская газета"ның тәүге һаны сыҡҡанда Луначарский былай тигән: "Уҡытыусы үҙе лә уҡымаһа, үҫеүҙән, уҡытыусы булыуҙан туҡтай". Тимәк, уҡытыусы үҙе һәр саҡта ла алдынғы уҡыусы булырға тейеш.

## МӘКТӘПТӘ КЕМДӘР ЭШЛӘЙ?

Бөгөнгө уҡытыусы, элеккеләрҙән айырмалы, үҙе генә мәғлүмәт сығанағы түгел. Уҡыусылар радио-телевидение, гәзит-журналдар, Интернет аша уҡытыусыһыҙ ҙа әллә күпме мәғлүмәт туплай. Мәҫәлән, совет мәктәбе яңы формалаша башлаған осорҙа матбуғат саралары ғына түгел, ғөмүмән, уҡыу әсбаптары ла булмаған, уҡытыусы күп осраҡта белем һәм мәғлүмәт биреүсе берҙән-бер сығанаҡ һаналған. Бөгөнгө уҡытыусы мәғлүмәтле булһын өсөн уға беҙ мөмкинлектәр булдырырға тейешбеҙ. Заман уҡытыусыһы эш хаҡына үҙенең рухи талаптарын ҡәнәғәтләндерә аламы һуң? Интернет системаһы менән ҡуллана беләме, мөмкинлеге, ваҡыты бармы?

Ауыл уҡытыусыһы, мәҫәлән, бер эш хаҡы менән генә йәшәй алмағас, шәхси хужалығы менән шөғөлләнергә мәжбүр. Ул өҙгөләнә, бишкә ярыла. Шәхси хужалығы булмаған ҡала уҡытыусыһы ҡала шарттарында астан үлмәҫ өсөн дәрестәр һанын арттыра. Аҙнаһына 36 сәғәт уҡытҡан уҡытыусы ҡасан үҙ өҫтөндә эшләһен дә, белемен камиллаштырһын? Һан артынан ҡыуып, дәрес биреү сифаты ла юғала, уҡытыусы дәрес биреүсе роботҡа оҡшай башлай. Һәр уҡыусыға шәхсән мөнәсәбәт булдырыу мөмкинлеге юғалыу арҡаһында уҡыусылар ҙа, үҙ нәүбәтендә, дәрес алыусы роботҡа әйләнә. Шуға күрә ихлас күңелдән уҡытылған дәрестәр тураһындағы һүҙ һаман һүҙ генә булып ҡала. Быныӊ сәбәптәрен эҙләй башлаһаҡ, улар бик күп һәм йылдар буйы йыйылып килгән. Бөгөн килеп беҙ шул проблемалар менән күҙмә-күҙ ҡалдыҡ. Әйтәйек, ир уҡытыусылар күберәк эш хаҡы булған урынға китергә мәжбүр, сөнки улар ғаиләһен аҫырарға тейеш. Мәктәптә юғары ҡиммәттәрҙе һанлаған энтузиастар ғына тороп ҡала. Ләкин мәктәптә энтузиастар ғына эшләй, тип тә уйларға ярамай, был күренештең кире яҡтары ла бар. Әйтәйек, эш хаҡы түбән, ә ул мәктәптә эшләргә мәжбүр. Ни өсөн мәжбүр? Тимәк, башҡа эшкә урынлаша алмай. Был күренеш уҡытыусы юғары уҡыу йортон тамамлағансы уҡ башлана. Педагогик уҡыу йорттарына кемдәр килә? Йәшерен-батырыны юҡ: шулай уҡ башҡа урынға уҡырға инә алмаған абитуриенттар килә. Улар араһынан да уҡытыусы һөнәренә эйә булғандарҙың бөтәһе лә мәктәпкә бармай. Тимәк, мәктәптә энтузиастар һәм аптырағандың көнөнән уҡытыусы булырға мәжбүр булғандар эшләй. Мәғариф өлкәһендә күпселек ҡатын-ҡыҙҙар эшләүе лә ошоға бәйле. Ир-ат, ни тиһәң дә, сәмлерәк, ғорурыраҡ, бәләкәй эш хаҡына ризалаша һалып бармай. Уҡытыуҙың социаль проблемалары тәрбиә мәсьәләһен дә урап үтмәй. Балалар баҡсаһынан башлап, юғары уҡыу йорттарына тиклем, уҡытыу-тәрбиә эше менән, дөйөм алғанда, тик ҡатын-ҡыҙҙар шөғөлләнә. Был ғына түгел, ғаиләлә лә балаларҙы күпселектә әсәйҙәр тәрбиәләй. Йомшаҡ, мәүеш, әҙергә-бәҙер булып йәшәгән ир-егеттәр ошондай мөхиттә тәрбиәләнә лә инде. Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың власть органдарында яуаплы вазифалар биләүе насар күренеш түгел, ләкин һәр күренеш үҙенең гармониялы булыуы, камиллығы менән матур. Беҙҙе юғары Илаһи көс шулай яратҡан: бер полюста - ир-ат, икенсеһендә ҡатын-ҡыҙ тигеҙ нисбәттә булһа ғына бер бөтөн барлыҡҡа килә. Ошо осраҡта ғына камиллыҡ тураһында һүҙ йөрөтөп була.



*Уҡытыусы эше - ижади эш. Элек тә шулай булған, хәҙер ҙә шулай. Һәр бер дәресте ижад өлгөһө тип ҡарағанда ғына уҡытыусы ижадсы булараҡ сығыш яһай ала. Ижади эшләгән уҡытыусы уҡыусыларын да ижади процеcҡа йәлеп итә. Улар һәр асышты бергәләп аса, һәр яңылыҡты бергә ҡабул итә. Уҡытыусы әҙер күрһәтмәләр, әҙер инструкциялар буйынса ғына эшләй алмай. Мәҫәлән, бер дәрестәге материалды бөтөн кластарҙа ла бер үк ҡалыпҡа һалып биреп булмай. Әйтәйек, бер уҡыусы дәрес материалынан тыш, өҫтәмә һорау ҙа биреүе мөмкин. Уҡытыусы дәрес темаһын киңәйтеп, уҡыусының һорауына яуап бирергә мәжбүр булаcаҡ. "Дәрес планында был ҡаралмаған", тип ҡотола икән, уҡыусылар алдында абруйын юғалтасаҡ. Ижади эшләгән уҡытыусылар, гәҙәттә, үҙен сикләмәй, уҡыусыларҙың күңелен белеме менән генә түгел, ихласлығы, эскерһеҙлеге менән дә яулай.*

## БАҺАЛАҒАНДЫ БАҺАЛАЙҘАР

Берҙәм тариф селтәре буйынса разряд билдәләү өсөн уҡытыусылар аттестация үтә. Был уларҙы ҡаушатырға тейеш түгел. Теләйбеҙме-юҡмы, уҡытыусының профессиональ оҫталығын баһалау кәрәк. Аттестация шуның өсөн үткәрелә лә инде. Баһалау ниндәй критерийҙарға нигеҙләнә - быныһы икенсе мәсьәлә. Эш хаҡы уҡытыусының эшенә ҡарап билдәләнергә тейеш. Ошоға тиклем ул сәғәттәр һанына, эш стажына ҡарап билдәләнде. Хәҙер эш сифатына иғтибар ителә. Шуға ла уҡытыусының сифатлы уҡытыуын билдәләү критерийҙарын асыҡларға кәрәк. Улар ниндәй булырға тейеш? Әйтәйек, уҡыусыларҙың юғары уҡыу йорттарына күпләп инеүе менән билдәләнһен, ти. Ә бәлки улар ата-әсәләренең мөмкинлегенән файҙаланып тормошҡа ашыраларҙыр был ниәттәрен? Тимәк, был ғына әле төп күрһәткес түгел. Кешене юғары белеменә генә ҡарап та баһалап булмай. Әйтәйек, станок артында торған эшсе юғары квалификациялы оҫта икән, уның эш һөҙөмтәһе, сифаты күҙгә күренә. Табиб дөрөҫ диагноз ҡуя белмәһә, ауырыуҙарҙы дөрөҫ дауаламаһа, уның да һөҙөмтәһеҙ эше күренә. Йәмғиәт өсөн уларҙың файҙа кимәлен еңел билдәләп була. Аттестация уҡытыусыларҙың белем кимәлен генә түгел, уларҙың йәмғиәткә файҙалы булыу кимәлен дә билдәләргә тейеш. "Мәғариф" милли проектының ошо яғы, миңә ҡалһа, өмөт уята. Йәғни уҡытыусының эш сифатына ҡарап, уның эш хаҡын билдәләүгә ынтылыу бар. Мәҫәлән, төрлө тестар ярҙамында уҡытыусының компетентлығын тикшерәбеҙ. Тәбиғи фәндәргә ҡарата тестар ҡулланыу үҙ һөҙөмтәһен бирә, ә бына гуманитар фәндәргә килгәндә, һорауҙар тыуа. Әйтәйек, әҙәбиәт буйынса тестар ярҙамында әҙәбиәт уҡытыусыһының белемен формаль яҡтан ғына билдәләп була, ә уның әҙәбиәткә ҡарата мөнәсәбәтен билдәләүе ҡыйын. Мәҫәлән, Лев Толстойҙың "Һуғыш һәм солох"ын тулыһынса аңлау өсөн кешенең ғүмер буйы туплаған тәжрибәһе, аң даирәһе лә етмәүе мөмкин. Тимәк, уҡытыусыны шәхес булараҡ тест ярҙамында һынау ғына етмәй. Тест - ул ярҙамсы ролен үтәүсе генә. Әлбиттә, уҡытыусылар был яңылыҡты ҡыуанып ҡаршы алманы, бер аҙ ҡаушау тойғоһо кисерҙе. Был тәбиғи күренеш. Телекамера алдында интервью биргән респондент та ҡаушап ҡала, сөнки ул уның өсөн һирәк була торған осраҡ. Интервьюға алдан әҙерләнергә, үҙ-үҙеңде көйләргә кәрәк. Аттестация ла ҡаушата, әлбиттә. Шуға күрә, беҙ һаҡ ҡыланабыҙ, һәр уҡытыусының шәхсән үҙенсәлектәрен иҫәпкә алабыҙ. Уҡытыусы дөрөҫ баһа алмаһа, уға яңынан аттестация үтеү мөмкинлеге бар. Тимәк, имтихан алыусыларға ғына түгел, имтихан биреүселәргә лә бик һығылмалы эш итергә кәрәк, сөнки баһалау еңел түгел, ул һәр саҡта ла ике яҡлы була - имтихан ваҡытында баһалаусының үҙен дә баһалайҙар. Был уҡытыусыларға табиб саҡтан уҡ таныш, тәбиғи күренеш. Әйтәйек, профессор ғына табибтарҙы баһаламай, табибтар ҙа уны баһалай. Имтихан ҡабул итеүселәр быны аңлаһа, миңенсә, хаталар әҙерәк булыр ине.

## БАШЛАНҒЫС БАШТА ҒЫНА МАТУР

Уҡыусылар араһында конкурстар, олимпиадалар үткәрелә. Шул уҡ мәлдә уҡытыусылар араһында ла төрлө конкурстар үткәрелә. Әлбиттә, ярыш дәрте кешелә сәм уята. Бәйге ваҡытында башҡаларҙың тәжрибәһе менән уртаҡлашыу мөмкинлеге тыуа, аралашыу мөхите киңәйә. Был конкурстарҙың һәйбәт яҡтары. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һәр бер һәйбәт башланғысҡа ваҡыт үтеү менән етешһеҙлектәр ҙә йәбешә башлай. Әйтәйек, диңгеҙҙә йөҙгән карапҡа төрлө ҡабырсаҡтар йәбешә һәм күпмелер ваҡыт үткәс, уны аҫҡа һөйрәй башлай, уны яңынан таҙартып алыу зарурлығы килеп тыуа. Шуға күрә һәйбәт башланғыстарҙы ла иғтибар үҙәгендә тотоп, "таҙартып" торорға, ундай сараларҙың ҡалыплашыуына юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Быныӊ өсөн конкурста ҡатнашҡандарҙың йәнле шәхес булыуын, йәнле эш алып барыуын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Мәҫәлән, "Йыл уҡытыусыһы" конкурсын алайыҡ. Был бәйгелә ҡатнашыусыларҙы иң тәүҙә асыҡ дәрескә ҡарап баһалайҙар. Уҡытыусы ул дәрескә ентекле әҙерләнә әҙерләнеүен, ә бит уның башҡа дәрестәре шул кимәлдә

**✓Бәйгелә ҡатнашыусыларҙы иң тәүҙә асыҡ дәрескә ҡарап баһалайҙар. Уҡытыусы ул дәрескә ентекле әҙерләнә әҙерләнеүен, ә бит уның башҡа дәрестәре шул кимәлдә булмауы ла ихтимал.**



булмауы ла ихтимал. Быны һис тә генә лә төп критерий тип әйтеп булмай. Бәлки, уҡыусыларҙың, ата-әсәләрҙең, коллегаларының баһаһын да иҫәпкә алырға кәрәктер? Критерийҙар дөрөҫ билдәләнһә, баһалау ҙа күпкә еңел була.

### ИЖАДИ ИЛҺАМ ЯЛҠАУ ШӨҒӨЛӨ ТҮГЕЛ

Уҡытыусы эше - ижади эш. Элек тә шулай булған, хәҙер ҙә шулай. Һәр бер дәресте ижад өлгөһө тип ҡарағанда ғына уҡытыусы ижадсы булараҡ сығыш яһай ала. Ижади ға тура килә. Әммә әле хушһыныրға иртәрәк. Ҡалалағы башҡорт ғаиләләренең күпселегендә балалар урыҫса-башҡортса ҡатнаш телдә һөйләшә. Был да йәнле һөйләш даирәһен ҡыҫырыҡлай. Бала, бәлки, рус телендә үҙ фекерҙәрен тулыраҡ әйтәләр. Фекерен башҡортса сағылдыра белмәү уның фекерләй белмәүе тураһында һөйләмәй бит, туған телендә һүҙ байлығының етмәүе генә уны ҡаушата. Дөйөм алғанда, бала башҡорт телен дә яҡшы беләләр, диктанттарҙы ла хатаһыҙ яҙалыр, әммә йәнле һөйләш мөхите булмағанлыҡтан, ул ҡатнаш телдә һөйләшергә мәжбүр була. арҡаһында хаталарға, имешмимештәргә юл ҡуйылды, бөтәһе лә гәҙел генә барҙы тип әйтеп булмай. Әммә милли проекттарҙың төп өҫтөнлөгө шунда: уларҙың киләсәге бар - эш әле генә башланып тора. Тырышып эшләгәндәргә мөмкинлектәр тыуҙырыласаҡ, тиген өмөт уята ул.

### ЭШ ҺҮҘ МЕНӘН НЫҒЫТЫЛМАЙ, ҺҮҘ ЭШ МЕНӘН НЫҒЫТЫЛА

Уйланһаң, уйылып китерҙәй нәмәләр күп. Иң әсендергәне шул: йыш ҡына һүҙ менән эш

# УҠЫМАҺА,

эшләгән уҡытыусы уҡыусыларын да ижади процесҡа йәлеп итә. Улар һәр асышты бергәләп аса, һәр яңылыҡты бергә ҡабул итә. Уҡытыусы әҙер күрһәтмәләр, әҙер инструкциялар буйынса ғына эшләй алмай. Мәҫәлән, бер дәрестәге материалды бөтөн кластарҙа ла бер үк ҡалыпҡа һалып биреп булмай. Әйтәйек, бер уҡыусы дәрес материалынан тыш, өҫтәмә һорау ҙа биреүе мөмкин. Уҡытыусы дәрес темаһын киңәйтеп, уҡыусының һорауына яуап бирергә мәжбүр буласаҡ. "Дәрес планында был ҡаралмаған", тип ҡотола икән, уҡыусылар алдында абруйын юғалтасаҡ. Ижади эшләгән уҡытыусылар, ғәҙәттә, үҙен сикләмәй, уҡыусыларҙың күңелен беләме менән генә түгел, ихласлығы, эскерһеҙлеге менән дә яулай. Әлбиттә, мәктәп һәр бер яңылыҡҡа, төрлө эксперименттарға асыҡ булырға, тәжрибә үткәрергә тейеш, әммә быныһ менән артыҡ мауығырға, бер сиктән икенсе сиккә һуғылырға ла ярамай - уҡыусы шәхесе күҙ уңынан ысҡынмаһын. Ҡыҫҡаһы, ҡағыҙ эшенә әүрәп, йәнле эш туҡтамаһын. Мәҫәлән, йөҙ процент эшмәкәрлектең ул егерме процентын биләргә мөмкин, ләкин шунан артығын түгел. Тормош үҙгәрешһеҙ булмай, беҙ шул үҙгәрештәргә яраҡлы булырға һәм яуап бирергә тейеш. Йәмғиәт үҫешкән һайын, мәғариф та үҫешә. Әгәр ҙә уҡытыусы үҙе лә камиллашмаһа, ул уҡыусыһынан артта ҡаласаҡ. Образлы итеп әйткәндә, уҡытыусы үҙе иң беренсе уҡыусы булырға һәм ғүмер буйы белем тупларға, өйрәнергә, камиллашырға тейеш.

### ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ - ТЕРЕ ТЕЛ

Башҡорт телендә йәнле һөйләшеү ҡыҫырыҡланып, айырым өлкәләрҙә генә кала башлағайны. Был башҡортса аралашыу даирәһенең тарайыуына бәйле булды. Башҡорт телен дәүләт теле итеп иғлан иткәндән һуң, ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр бар. Мәҫәлән, баш ҡала бөгөн йыш ҡына башҡорт телендә иркен һөйләшеүҙең шаһиты булыр- Был, иң тәү сиратта, халыҡ ижады әҫәрҙәрен яҡшылап белмәүҙән килә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, ҡатнаш телдә һөйләшеүҙе башҡорт теле уҡытыусылары араһында ла осратырға була. Хатта башҡорт гимназияһы исемен йөрөткән уҡыу йорттарында ла йәнле һөйләште тик дәрестә генә ишетергә була. Беҙ шул тиклем дә башҡорт телен яҡшы белгән етәкселәргә ярлы микән, тиген һорау тыуа. Дәүләт ойошмаларында эшләүселәр дәүләт телен белергә тейеш, тигән закон 20-се йылдарҙа уҡ ҡабул ителгән. Хатта ул осорҙа дәүләт телен белгәндәргә өҫтәмә эш хаҡы түләнгән. Матди яҡтан ҡыҙыҡһындырыу арҡаһында башҡорт телен ҡулланыу даирәһе киңәйә башлаған. Ләкин 30-сы йылдарҙа был башланғыс һүнә башлай һәм 1937 йылдағы Конституциянан һуң ул бөтөнләй бөтөрөлә. Бөгөн ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр бар. Әммә ул бик һүлпән бара. Мәҫәлән, хатта Мәғариф министрлығында дәүләт телен белмәгән белгестәр эшләй. Әгәр ҙә, ысынлап та, телдең ҡулланыу даирәһен киңәйтергә тырышабыҙ икән, планлы, ныҡышмалы эш алып барырға тейешбеҙ. Закон ҡабул ителеү - бер эш, уны тормошҡа ашырыу өсөн яңы ҡарарҙар ҡабул итергә, шарттар булдырырға кәрәк.

### МИЛЛИ ПРОЕКТ

Мәғариф өлкәһендәге милли проект оҙаҡ әҙерләнде. Ләкин уны тормошҡа ашыра башлау ҡапылыраҡ булды һымаҡ. Әҙерлек эштәре алып барылһа ла, күптәр өсөн ул көтөлмәгәнерәк ҡабул ителде. Мәҫәлән, проекты тормошҡа ашыра башлағас ҡына, эш барышында ғына критерийҙарҙы асыҡлай башланылар. Асыҡлыҡ етмәү тап килмәй. Берҙе һөйләп, икенсене эшләп, өсөнсөнө уйлап йөрөгәндәр күбәйҙе. Иң юғары ҡатламдарҙан башлап түбәнгәсә ихласлыҡ юҡ, асыҡлыҡ самалы. Юҡты бар итеп һөйләү, барҙы юҡҡа сығарырға тырышыу, ҡараны - аҡ, аҡты - ҡара итеп күрһәтергә тырышыу ғәҙәти хәлгә әйләнеп бара. Ҡай саҡ һөйләгән кешенең төптө икенсе нәмәне уйлап торғаның, икенсе төрлө эшләп йөрөгәнен бөтәһе лә белә. Ҡыҙғаныска ҡаршы, уны тукҡатып: "Һин ниңә бер төрлө һөйләйһең, икенсе төрлө йәшәү рәүеше алып бараһың", - тип әйтә белмәйбеҙ. Интеллигентлыҡ, мәҙәнилек, кеше күңелен уйлау арҡаһында мәлендә әйтергә теләгәндәр әйтелмәй ҡала. Ошо нигеҙҙә ике йөҙләлөк, ярамһаҡланыу барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, етәксене күп осраҡта уның ҡулы аҫтындағылар тәрбиәләй. Гел генә ялағайланып, урынһыҙ маҡтауҙарға өйрәнгән етәксе үҙен һауалы тота башлай. Был күренеште ғаилә миҫалында ла күҙәтергә була. Ҡайһы бер ғаиләлә балалары ата-әсәһен тәрбиәләй. Мәктәптә лә уҡыусылар уҡытыусыларҙы тәрбиәләүгә тәбиғи күренеш. Граждандлыҡ сифаттары һалынған уҡыусы уҡытыусыһына заман талаптары ҡуя башлауы, әлбиттә, насар түгел. Бөгөнгө студенттар ҙа талапсан. Тәрбиә, уҡыу-уҡытыу, тимәк, бер яҡлы ғына алып барылмай. Тағы шуныһы ҡыуаныслы: телгә хөкүмәт кимәлендә иғтибар артты. Тимәк, башҡорт телендә аралашыуҙың даирәһе киңәйәсәк. Иң мөһиме, ошо йүнәлештә һөйләүҙән эшкә күсеү күҙәтелә.

**Радик ӨМӨТКУЖИН**
**яҙып алды.**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Мәғариф проблемаларын матбуғат саралары артыҡ сағылдыра һалып бармай. Әлбиттә, был өлкәнең үҙенең махсус матбуғаты бар. Ләкин уҡытыу-тәрбиә эше йәмғиәттә ҙур урын биләгәнлектән, йәмғәт фекере лә булырға тейештер. Юҡһа, мәктәптәр үҙ тормошо менән генә йәшәй кеүек. Нисек уйлайһығыҙ? Үҙ фекерҙәрегеҙҙе яҙып ебәрегеҙ беҙгә.**

ӘЙТӘГҮР!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘ...
## өйрәнәм

**Уҡыу йылы башынан алып бөтә мәктәптәрҙә, техникумдарҙа, юғары уҡыу йорттарында башҡорт теле дәүләт теле булараҡ өйрәнелә. Ерле халыҡтың телен өйрәнеү - уның рухын, тарихын, мәҙәниәтен дә һанлау ул. Тел өйрәнеүҙең проблемаларын да, ҡыйынлыҡтарын да бөтә тәрәнлегендә уҡытыусылар менән бергә балалар кисерә. Беҙ йыш ҡына ҙур проблемалар менән булып, балалар хаҡында онотабыҙ. Улар яңы тел өйрәнеүҙе нисек ҡабул итте икән? Ошо һорауға яуап табыр өсөн беҙ Өфө ҡалаһы мәктәптәренең береһенә барып, балалар менән әңгәмә үткәрҙек. Улар һорауҙарға бик ихлас яуап бирҙе. Һорауҙар түбәндәге тәртиптә бирелде:**

**1. Мәктәп программаһына башҡорт теле дәресен индереүгә ҡарашың нисек?**

**2. Ата-әсәйең, туғандарың һинең башҡорт телен өйрәнеүгә ниндәй мөнәсәбәттә?**

**3. Башҡорт телен өйрәнгәндә ниндәй ҡыйынлыҡтарға тап булдың?**

**4. Башҡорт теле дәрестәренә ниндәй үҙгәрештәр индерер инең?**

**Һорауҙарға яуаптар шулайыраҡ булды:**

**● ВИКТОРИЯ:**

- Өфө ҡалаһында башҡортса һөйләшеүселәр күп. Электән үк был телде аңлағым килә торғайны. Унан һуң, Башҡортостанда йәшәйбеҙ икән, башҡорт телен белеү насар түгел дә баһа. Өсөнсөнән, тел өйрәнеү үҙе үк зиһенемде үҫтерә, белемемде күбәйтә, хәтеремде нығыта. Атай-әсәйем тел өйрәнеүемде хупланы ғына. Мәктәп программаһы буйынса ҡаралған икән, тырыш, уҡы, тинеләр. Тәүҙә башҡорт теленең өндәрен әйтә алмай аҙапландым. Таныш булмаған һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыу ауырыраҡ ине. Уҡытыусым хаталарыбыҙға бик түҙем ҡараны, бер ҙә әрләмәне. Бәлки, шуғалыр ҙа, башҡорт телен теләп өйрәнәм.

Башҡорт теле дәрестәре ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс үтә. Шуға күрә был дәрестәрҙең бер нәмәһен дә үҙгәртмәҫ инем. Тик бына китаптар етешмәй, шул ғына...

**● НИКОЛАЙ:**

- Тәүҙә башҡорт телен бөтөнләй өйрәнгем килмәне. Ҡыҙыҡ та түгел ине, шикелле. Ҡайһы бер башҡорт һүҙҙәренән көлкөм килә торғайны. Шунан, нисектер, ҡыҙыҡһынып киттем. Киләсәктә берәй фирма етәксеһе булып, коллективта башҡорттар эшләһә, уларҙың телен белеү насармы ни? Ошо уй миңә телде яҡшыраҡ өйрәнергә теләүемдең сәбәпсеһе булды ла инде. Ғөмүмән, башҡорт дуҫтарым да күп, улар менән башҡорт телендә һөйләшеү мәрәкә һымаҡ.

Атай-әсәйемә башҡорт телен өйрәнеүем бер нисек тә тәьҫир итмәне. Уларға барыбер. Алған билдәләрем менән дә ҡыҙыҡһынып бармайҙар. Ауырлыҡтарға килгәндә, "ҙ" һәм "з" өндәрен бутап ыҙаланам. Шиғыр ятларға теләгем юҡ, өйгә эш бирмәһәләр, ҡайһылай шәп булыр ине!

**● ВАСИЛИЙ:**

- Башҡорт телен өйрәнгем килмәй. Ни өсөнмө? Белмәйемсе. Атайым - урыҫ, әсәйем - урыҫ, мин дә - урыҫ. Ниңә миңә башҡорт телен өйрәнергә? Атай-әсәйем мәктәп программаһына йәнә бер дәрес өҫтәләүенән риза түгел. Ләкин дәүләт теле булғас, башҡорт телен өйрәнергә тура килә инде.

Хәрефтәрҙе ятлап булмай, шунлыҡтан, насар уҡыйым. Башҡорт телен уҡытыуҙы берәй нисек туҡтатып булмаҫмы икән? Исмаһам, унынсы, ун беренсе кластарҙа уҡытылмаһын ине...

**● РЕГИНА:**

- Башҡорт теле - минең туған телем. Атай-әсәйем телде бөтөнләй белмәй. Шуға күрә башҡорт телен өйрәнеүгә куш ҡуллап ризалар. Ул миңә үҙемә лә бик нык оҡшай. Хәҙер мин ауылда йәшәүсе туғандарым менән аралаша аласаҡмын.

Башҡорт теле буйынса шундай матур китап сығарғандар! Уның һүрәттәре төрлө-төрлө, сағыу, башҡорт теле менән әллә ни ҡыҙыҡһынмағандар ҙа дәрес буйына китап аҡтарып, тәржемә итергә тырышып ултыра. Тик ул китаптар етешмәй, дәрес ваҡытында ғына таратып сығалар ҙа, өйгә биреп ҡайтармайҙар. Дәрес барышында уйындар ҙа үткәрелһә, шәп булыр ине. Телде яңы өйрәнгәс, ҡайсаҡ нык ҡына арыта.

**● АЙРАТ:**

- Милләтем буйынса мин татар. Үҙ телемде яҡшы белгәнлектән, башҡорт телен өйрәнеү ауыр түгел. Ата-әсәйҙәр башҡорт телен өйрәнеүемә риза. Ниңә ҡаршы булһындар, ти? Башҡорт теле татар теленә оҡшаш, мин бер ыңғайы үҙ телемде лә нығытам бит. Икенсе яҡтан, башҡорттар менән бер республикала йәшәп, уларҙың телен өйрәнмәһәң, дөрөҫ түгел һымаҡ.

Аҙнаһына биш сәғәт башҡорт теле дәресе инһә лә ҡаршы булмаҫ инем. Тик башҡорт теле уҡытыусылары йыш алмашынмаһын ине. Яңы уҡытыусыларға өйрәнеүе ҡыйын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Балалар үҙ фекерҙәрендә бик ихлас булды. Иң мөһиме, шул аңлашыла: балаларҙың күбеһе бөгөн башҡорт телен өйрәнеүгә ҡаршы түгел. Был хәлдә уларҙың яуаптары ла күрһәтеп тора. Барыһы ла шундай фекерҙә, тип әйтеп булмай, әлбиттә. Ләкин телде өйрәнергә теләмәүселәр һаны аҙсылыҡты тәшкил итә. Тимәк, башҡорт теле уҡытыусылары көсөргәнешле хәлдә һындыра алған. Сөнки былтыр күҙ был мәсьәлә буйынса хәл ҡырҡыуыраҡ тора ине. Нисек кенә булмаһын, Башҡортостанда башҡорт телен өйрәнеү мотлаҡ, тиген фекер балалар ғына түгел, дөйөм йәмғәтселек зиһенендә лә уйылып ҡалһын ине. Бигерәк тә ата-әсәләрҙә. Сөнки "башҡорт телен өйрәнергә теләмәйем" тигән балалар "атай-әсәйем дә теләмәй", тип һылтана. Ә бит бындай ата-әсәнең башҡорт телен уҡытыуға ҡарата ғына түгел, һәр нәмәгә - мәктәп, уҡытыусылар, күрше-күлән, хеҙмәттәштәренә ҡарата ла кире мөнәсәбәттә тороуы ихтимал. Ул мөнәсәбәт, һис шикһеҙ, балаһына ла күсә. Бындай тәрбиәнең емеше татлы булмай, әлбиттә.**

**Ләйсән МАРАҠАНОВА.**

✓ ***Халҡыбыҙ ғүмер итмешенең бөгөнгөһө, киләсәгенә вайымһыҙ ҡарай алмайым. Башҡортостанда күп милләтлелектең һыйышып йәшәүенә нык иғтибар ителһә лә, башҡорт милләтенең сифатлы үҙгәрешенә өлгәшеү программаһы юҡ.***



# Уйланыуҙарым



**Тамара ҒӘНИЕВА**

**26 ноябрь**

Торалар ҙа миңә "һин ҡыйыу инде ул" тиҙәр ҙә ҡалалар... Ә мине ҡурҡытҡан нәмәләр ҙә бихисап:

- кешеләрҙең асылымды аңламауынан ҡурҡам;
- юғарылағыларҙың ишеген ҡаҡмаҫҡа тырышам. Текә ҡыланырҙар, тип ҡурҡам;
- ял йорто, ҡунаҡханаларҙа бүлмәне үҙем йыйыштырам. Әрпеш тип уйларҙар тип ҡурҡам;
- бына 17 йыл хеҙмәт урыным булған "Ағиҙел" журналының һәр номеры материалдарын алдан тапшырам. Секретариат эшенә ҡыйынлыҡ килтереп ҡуймағайым, тип ҡурҡам;
- ир-атҡа ҡыйшаңламайым. Холҡо еңел тип уйлауҙарынан ҡурҡам;
- иң яҡын кешеләремә, дуҫтарыма тик-томалдан барып инмәйем. Мәшәҡәт тыуҙырырмын, тип ҡурҡам;
- ғүмеремдә лә бурысҡа аҡса алғаным юҡ. Бахыр тип уйлауҙарынан ҡурҡам;
- ҡаҡ таҡтаға ултырыуҙан ҡурҡам;
- хәләл булмаған килемдән ҡурҡам;
- һәр ваҡыт балаларымдың, туғандарымдың именлеге өсөн ҡурҡам һ.б.

Бер нәмәнән генә ҡурҡмайым: үлһәм-үләм, әммә бер ҡасан да, бер кем алдында ла теҙләнмәйәсәкмен.

**30 ноябрь**

Мин Мәскәүҙең ҡайһы бер бәндәләре кеүек, Ватаныбыҙға "был ил" тип юғарынан ҡарай алмайым. Рәсәй - беҙҙең Ватаныбыҙ ул. Уның һәр ҡарыш ере өсөн атай-олатайҙар ҡаны түгелгән, уға күңелебеҙ һалынған, ул беҙҙең илһам һәм рухи ҡиммәттәребеҙҙең ерлеге.

Илебеҙҙең ҡеүәтле, бай булыуын, кешеләренең тыныслыҡта, етеш йәшәүен теләйем. Ә беҙҙең күп кенә чиновниктар халыҡ зарына ҡарата вайымһыҙ барыбер. Затлы кейенәләр, текә һөйләшәләр. Ғүмерҙәрен ел тирмәндәрен әйләндереүгә бағышлаған кеүек күрәм ундай һауалы әҙәмдәрҙе.

**10 декабрь**

Сезон башынан Башҡорт академия драма театрында бер нисә премьера ҡараным. Береһе лә оҡшаманы. Зауыҡһыҙ, һай әйберҙәр. Ә театрҙы, артистарҙы яратам. Был үҙенсәлекле донъяла саҡ ҡына бер ҡатлылыҡ, хистойғолар, ысынбарлыҡтан бер ни тиклем арыраҡ тороу бар. Дуҫтарса мөнәсәбәт шарттарында улар һүҙ оҫтаһы. Эске һиҙемләү менән сит кеше ҡылыҡтары логикаһын яҡшы аңлайҙар, әммә шуныһы ла хаҡ, ваҡиғалар айышын йыш ҡына Шекспир, Мольер, Чехов, Мостай Кәрим, Флорид Бүләков, Наил Ғәйетбаев геройҙарының күҙлеге аша баһалайҙар.

Ә мин уларҙы яратам. Әммә мин ғүмер кисергән замананың театры мине яратмай. Минең зауҡым, мин күрергә теләгән сәнғәттең үҙенсәлеге менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай. Миңә, театр сәнғәтенең бөгөнгө замандашына ҡыҙыҡ булмаған ҡаҙанда ҡайнай ҙа ҡайнай.

Былтыр уҡ (2003 йылда), күренекле педагог һәм актриса Суфия Ҡорбанғәлиева үтенесе менән, уң ҡулым гипста булған шарттарҙа, Шиллерҙың "Мария Стюарт" трагедияһын (шиғыр менән) башҡортсаға тәржемә иткәйнем. Суфия ханым театр етәкселегенең әҫәрҙе сәхнәләштерергә ниәт итеүен белдергәйне. Мин уға ышандым, Суфия Шәрәфулла ҡыҙы хөрмәт ҡаҙанған театр эшмәкәре лә баһа! Мин дә бик үк бәләкәй шәхес түгел. Әммә ауыр хеҙмәтем, ике билдәле кешенең ижади хыялы аяҡ аҫтында тапалды. Башҡорт яҙыусыһы менән киң билдәле актрисаһын яратмаған театр кемде ярата һуң?

**24 декабрь**

Милли мәсьәлә минең өсөн һыҙландырғыс өлкә ул. Халҡыбыҙ ғүмер итмешенең бөгөнгөһө, киләсәгенә вайымһыҙ ҡарай алмайым. Башҡортостанда күп милләтлелектең һыйышып йәшәүенә нык иғтибар ителһә лә (ә мин уға һис ҡаршы түгел), башҡорт милләтенең сифатлы үҙгәрешенә өлгәшеү программаһы юҡ барыбер. Ә Башҡортостан башҡорттоң берҙән-бер һыйыныр төйәге, рухи талаптарын ҡәнәғәтләндерер Ватаны һәм һөйәктәре ятыр ер.

**28 декабрь**

Ғүмеремдең төп инанысы - ғаилә именлеге. Аллаға шөкөр, ейәнем Искәндәр ҙә, ҡыҙым Неля менән кейәүем дә арыу ғына йәшәп яталар. Үҙем иһә йәшәү принциптарымды аңларлыҡ кешене осрата алманым. Дөрөҫ, башҡортта ҡатынды ирҙәр баһалай. Әммә мин үҙемә тиң булырҙай кешегә дәғүәләремде аңғартырға йөрьәт иттем. Мәнһеҙлекте, ялҡаулыҡты, бахырлыҡты яратмайым, тинем. Үҙем шул принциптарыма тоғро йәшәнем.

Балаларымдың идеалдарына ҡыҫылмайым. Искәндәр ейәнем ана, донъяны малайҙарса үҙләштерә, үҙенә урын даулай һәм яулап та алғылай. Ҡыҙымдың гәзиттә баҫтырған күп һандағы (күбеһе нишләптер уның фамилияһы менән түгел) мәҡәләләренән ризамын. Профессионал. Уның йәнә лә етдиерәк эштәр башҡарыуға һәләтле булыуына иманым камил. Дөрөҫөн әйткәндә, эшкә уны үҙем өйрәттем. Дөрөҫөрәге, мине күреп үҫте. Кейәүемә лә әллә ни дәғүәм юҡ. Тәртипле.

Үҙемдең эштәрҙән генә ҡәнәғәтләнә алмайым. Байтаҡ китаптар яҙылды. Шуларҙы ни рәүешле халыҡҡа еткерергә һуң? У-ф-ф...

**29 декабрь**

Пенсионерҙарҙың льготаларын аҡсаға әйләндереү - былай ҙа физик мөмкинлектәре ҡаҡшаған категория кешеләрен фәҡирлеккә дусар итеү бит инде ул. Экономист-кибернетик белемле РФ-ның Һаулыҡ һаҡлау һәм социаль сәйәсәт министры Зурабов әфәнде халыҡты ҡаҡшатыусы икенсе Чубайс булып сыға түгелме?

Рәсәй япондарҙың урта быуаттағы йолаларын үҙләштерә, йәғни илебеҙ ҡарттарын илтеп ырғытырлыҡ Нараяма тауын билдәләйһе генә ҡалды. Ҡартлыҡты хөрмәт итмәү - йәмғиәттең сәләмәтһеҙлеге билдәһе ул. Ниндәй сүпрәлә әсетелә икән ана шул Чубайс, Зурабов кеүек мезантроптар?

Рәсәй бөгөн иң ҡурҡыныс упҡын алдында торған төҫлө. Был - ҡартлыҡҡа аяуһыҙ мөнәсәбәт. Ә улар бит илебеҙгә хеҙмәт һәм "яҡты" киләсәк хаҡына хеҙмәт юлында сәләмәтлегенән яҙған кешеләр.

Сәйәсәттә лә хәлдәр тоторо ҡһоҙ. Украина менән Грузия әллә нимәләр ҡылана. Йәнә "һалҡын һуғыш" еҫтәре сығып ҡала. Ираҡтағы һуғыштың да яманатлы демократия хаҡына түгел, нефть өсөн алып барылыуы бәхәсһеҙ. Беҙҙең илебеҙ донъя аренаһында үҙенең мәртәбәһе менән иҫәпләшеүҙәрен талап итә башлауы булды, донъяның "иң төп демократтары" Рәсәй йүнәлешендәге походтың яңы туҡталышын әҙерләргә лә тотондо. Тимәк, беҙҙең "дуҫтарҙың" маҡсаты үҙгәрешһеҙ, саралары ғына икенсе төрлө. Был Гитлерҙың көнсығышты яуларға ыҫҡыныуынан кәм түгел. Үкенеслеһе шунда: күбебеҙ был тиклем тәрән уйҙарға бирелеүҙән азат. Уйынкөлкө, сепрәк-сапраҡ, ҡый-ғыпыр матдилыҡ менән мәшғүлбеҙ.

Ә йыл тамамлана. Көньяҡ-Көнсығыштағы ҡот-оҫҡос цунами фажиғәһе йомғаҡлап ҡуйҙы 2004 йылды.

Планетабыҙҙы тәбиғи ҡыйралыштар ҙа, кешеләрҙең мәғәнәһеҙ ҡыланышы ла һағалап ҡына тора. Ә бит нәфсе, мәкерле аҙғынлыҡ йәмғиәтте, кешелекте ҡырағайлыҡтан аралаусы йоҡа ғына цивилизация ҡурсыуынан мәхрүм итергә әҙер генә тора.

Ә мин өмөтләнәм: гел улай булмаҫ, кешелек аҡылланыр, өмөткә тейенер, үҙенең асылында Яҡшылыҡ Ғали йәнәптәре лә барлығын иҫенә төшөрөр.

Мин инде ундай көндө күрә алмам...

**2006 йыл**
**5 ғинуар**

МВД мәктәбе микрорайонында быйыл беренсегә шыршы ҡуйылды, бала-саға өсөн боҙло тау яһалды. Балалар рәхәтләнеп сыр-сыу килешә. Милиция посы, коньки алып тороу хеҙмәте бар. Бик һәйбәт әле был.

Искәндәрҙе конькиға баҫтырҙым. Тәүҙә ҡурҡыбыраҡ торҙо ла, шыуып китте. Өс көн эсендә һин дә мин өйрәнеп алды. Мин уның аяҡ кейемен ҡарауыллап торам. Бала-сағаның мәж килеүе күңелде күтәрә. Искәндәргә коньки бүләк итергә кәрәк әле. Малай кеше спорт менән дуҫ булырға тейеш.

**8 февраль**

Һуңғы 14 йыл эсендә Рәсәйҙең бер генә президенты ла граждандарға илдәге хәлде аңлатып мөрәжәғәт итмәне. Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәт иҫәпкә инмәй, сөнки ул халыҡҡа түгел, номенклатураға мөрәжәғәт. Власть органдары 1917 йылдың февраленән алып халыҡ мәнфәғәтенән сығып эш иткәне юҡ. 1993 йылды иҫебеҙгә төшөрәйек. РФ Конституцияһы өсөн референдумда халыҡтың яртыһы ғына ҡатнашты. Беҙ 13 йыл буйы ҡулланған Конституцияны Рәсәй граждандарының һәр дүртенсе кешеһе генә хупланы.

Ә приватизация? Уны ла йәмәғәтселек таныманы. Был ғәмәл аҫтында ла халыҡтың ҡултамғаһы юҡ. Үкенескә ҡаршы, беҙҙә бөгөн теге йәки был хөкүмәт ҡарарының халыҡҡа файҙаһы бармы-юҡмы икәнен баһаларлыҡ сәйәси көс тә, дәүләт органы ла юҡ. Президент гарант ролен башҡара, тиерһегеҙ. Дөрөҫ, президентҡа халыҡ һуңғы осор ышана. Ә Парламентҡа? Халыҡты яҡлап бер тапҡыр ҙа күтәрелеп сыҡҡандары юҡ. Үҙ-ара мөнәсәбәт асыҡлау менән мәшғүлдәр. Шул рәүешле, халыҡ үҙенсә, дәүләт органдары үҙенсә йәшәп ята. Ә ил менән халыҡ берҙәм булһын өсөн, берләштереүсе идея булырға тейеш бит. Эстондарҙағы кеүек, мәҫәлән. Улар, исмаһам, ни өсөн ҡытлыҡ кисереп йәшәүен белә: үҙаллылыҡ тип айҡашыуҙары.

Ә илебеҙ берәү генә. Һәммәбеҙгә лә унда йәшәү ҡулай булһын өсөн килешеп йәшәргә өйрәнергә кәрәк. Ана шундай идеяны ташларлыҡ сәйәси көс бармы беҙҙә? Юҡ шул, сөнки битарафбыҙ. Ил булғас бит уның граждандары ла була, тимәк, ул граждандар хөкүмәт тәҡдим иткән ҡарарҙар менән риза булырға тейеш. Һүҙ уның йәшәү формаһы, яҙмышы хаҡында бара бит. Ҡарарҙар граждандар мәнфәғәтен ҡайғыртмағас, илеңде минеке тип таныуы ҡыйыныраҡ.

Аллаға шөкөр, хәҙер беҙҙә ҡулы тик тормаған кеше асыҡмай. Әммә туҡлыҡ ҡына XXI быуаттың юғары күрһәткесе булып һанала аламы?

**12 февраль**

Йәнә бер ҡулъяҙма китабымды "Китап" нәшриәтенә илтеп тапшырҙым. Ул минең донъяға мөнәсәбәтем хаҡында. Ә тормош өҙлөкһөҙ хәрәкәт итә, уның офоҡтары киң. Әммә айырым шәхес өсөн уның фанилығы һәм баҡыйлығы бар... Шуға ла шағирҙың уйланыуҙары нисек кенә тәрән һәм һағышлы булмаһын, улар киләсәк, ынтылыш, хәрәкәт өсөн кәртә түгел. Ғүмерҙең үтмеш-китмеш булыуын аңлау һуңғы йылдарҙа тормоштоң ҡәҙерен белергә саҡыра. Үҙем генә белгән төпкөлдәрҙә үҙ ҡояшым бар, ул мине йылыта, күңелемде үҫтерә. Мин шул тәрән төпкөлөмдә ултырып уй уйлайым, илһамға тейенәм һәм Баҡыйлыҡ канцелярияһына үҙемдең барлығымды аңғартам.

Белмәйем, шағирҙың йән һыҙланыуҙары аша ижад итеүе хаҡында бүтәндәргә һөйләргә хаҡы барҙырмы, юҡмы, әммә мин, шулай ҙа шағир үҙ шәхесе һәм характеры аша халыҡ яҙмышына тоташҡан булырға тейеш, тигән фекерҙәмен. Дөрөҫ, ижадҡа мөрәжәғәт итмәгән кеше булмай, һәр кем дә ниндәйҙер илаһилыҡ менән таныш була, әммә шул илаһиәт асылы һәм хәрәкәтен тик шағирҙар ғына сәнғәт дәрәжәһенә еткереп тасуирлай белә.

Күңел кисерештәрен шиғыр аша тасуирлау өсөн теләк кенә аҙ, образдарҙың тәрәнлеге ижад кешеһенең рухи көсөнә лә бәйле. Үҙеңдең шәхси кисерештәреңде шиғырға һалырға йөрьәт итер өсөн дә зиһенең һәм күңелеңдең ваҡлыҡтарҙан азат булыуы кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, мин тәбиғәттең эске аң кимәленә, ҡөҙрәтенә инанам, Хәҡиҡәт һәм Абсолют Баҡыйлыҡҡа ышанам.

**20 февраль**

Фәнил мырҙамдың вафатына йыл да тулып китте. Балалар менән беҙ был йылды ҡулыбыҙҙан килгән тиклем үҙаллы йәшәү принциптарын үҙләштереү менән мәшғүл булдыҡ. Улар, әсәләре тере була тороп та, дөм йәтим хәҙер. Көнкүреште, тамаҡ яғын йүнәтергә кәрәк ине. Уларға үҙ тәжрибәм туплаған кәңәштәремде биреп торҙом. Ләкин улар, барыбер, икенсе төрлөрәк инде, эсеңде өҙә яҙып һөйләп торғаныңа ла бик илтифат итеп бөтмәгән кеүек. Гендар инженерияһы етди мәсьәлә инде ул...

Ауылда мырҙамдың йылын уҡыттым. Күпме күтәренеп ҡайттым, шулай ҙа оло кешеһеҙ өйҙәни, ни тотайым тиһәң - шул юҡ...

Бигерәк ярты яҡ шул ауылыбыҙ ҙа. Капитализм, демократия, азатлыҡ - Мәскәү сәйәсмәндәренең теленән төшмәгән категориялар беҙҙең ауыл ситендә үк томандай ергә һеңә. Россияның "алдынғы бюрократик капитализмы" үҙенә ҡулай мәсьәләләрҙе хәл итеүгә генә һәләтле. Үҙәк гәзиттәрҙәге мәғлүмәткә ҡарағанда, беҙҙең илдә бөгөн 20 000 мультимиллионер бар икән. Күбеһе Мәскәүҙә тупланған. Уларҙың байтаҡ өлөшөн ришүәт, лобби, мәғлүмәт һатыу юлы менән мал туплаған чиновниктар тәшкил итә. Улар әле капиталды амнистиялау хаҡында һүҙ ҡуйырта. Малдарын асыҡтан-асыҡ күрһәтеп маҡтанғылары киләләр инде. Н. Некрасов шиғырын иҫкә төшөрөрлөк тә шул:

Что тебе эта скорбь вопиющая,
Что тебе этот бедный народ?
Вечным праздником быстро бегущая,
Жизнь тебе очнуться не дает.

Николай Васильевич бөгөнгө хаҡында яҙғанмы ни! Минең ауылдаштар ҙа, ана, торған булалар ҙа хәлдәрен миңә һөйләгән булалар. "Ер менән ни ҡылырға икән, апай?" Үҙем дә аптырайым шул... Алығыҙ ҙа хужа булығыҙ, тиер инең, ни аҡсалары, ни техникалары юҡ. Хужалыҡ һәләттәре лә самалы. Өйрәнгәндәр бит инде колхоздың күҙенә ҡарап. Шулай ҙа сит-ят кешегә һатып ебәрергә юл ҡуймағыҙ, тигән булдым, шул ғына...

**24 март**

Бер аҙыраҡ албырғап йөрөлдө. Бер бәләкәй генә аҡсаны ҡулыма тейҙермәҫ өсөн, әһәмиәтһеҙ тип атанылармы етди генә бер эшемде, әллә кәмһетеүҙәре шул инеме? Аҡсаһына бик иҫем китмәй ҙә ул... Ә шулай ҙа...

Мин бит бизнес менән шөғөлләнә алмайым, һөнәрем башҡа, һәләтем дә бик юҡ. Ҡулымдан килгән эшем өсөн иркен йәшәтһәләр булмайммы икән?

Йәнемде аҡтарып һалып ижад итәм дә баһа. Ижад бүтән юл менән эшләнмәй. Шағирҙың бит эш ҡоралы берәү генә: ул да булһа - күңеле. Кешеләр күңел хеҙмәтенең ҡәҙерен белергә өйрәнһен өсөн шағир үҙ эмоцияларын ҡорбан итеп йәшәй. Ижадсының тауары ҡаҙанға төшөп ятмай, әлбиттә. Ә шулай ҙа художестволы фекер ғали йәнәптәренең баһаһы осһоҙланған заманда ана шул йоҫоҡҡа яҙмышын бағышлаған кешеләрҙең ҡәҙерен ебәрмәҫкә кәрәктер ул.

Былай ҙа бит әхләҡи юғарылыҡ тип баһаланыр, йәиһә мораль юғарылыҡтың ысын асылын билдәләрлек кешеләр ҡалмай

***✓ 1960 йылда 100 туйға 12 айырылышыу тура килһә, 1985 йылда - 41-е тарҡала, ә 2005 йылда уларҙың яртыһынан күбе - 57 ғаилә айырыла.***

бара. Иң шәп тигәненең дә, арҡаһына ҡаҡһаң, кеҫәһенән намыҫын һатыуҙан ҡалынайған кошелегы килә лә төшә. Ә кешелек "Аҡыл, намыҫ, ғәҙеллек" төшөнсәләрен күптән инде маяҡ итеп һайлаған.

**10 март**

Бөтә донъяла чиновник - наемдағы хеҙмәткәр тип һанала. Беҙҙә иһә - Алла ла батша, түрә әфәнде. Юҡ ҡына справка өсөн Хеҙмәт һәм социаль яҡлау министрлығының тупһаһын өс көн тапаным. Ишек төбөнә баррикада ҡуйғандар, үтермен тимә. Пентагонмы ни. Беҙ байлығы күп, ләкин социаль тигеҙһеҙлектән арына алмаған ил булдыҡ инде. Түрәһе лә, байҙары ла була ғына бирһен, үҙҙәренә оҡшағас. Тик тотош ил етеш, ғәҙеллектә йәшәһен ине ул.

Торлаҡ мәсьәләһе лә үҙәккә үтә. Эшләп йөрөгән кешеләрҙең дә торлаҡ һатып алырлыҡ аҡсаһы юҡ. Торлаҡ төҙөү комплексы коммерция хаҡтарын ҡуйыртып ҡына тора. Торлаҡ алам тип аҡса йыйһынмы кеше, балаларын ашатып кейендерһенме? Ә күңел асыу, донъяның матурлығына һоҡланыу кеүек төшөнсәләр бөтөнләй ҡаралмаған булып сыға беҙҙең кеүек кешеләр өсөн.

**5 март**

Йәшәйештең төп ҡиммәте аҡса, тигән идеал менән башын ҡатыралар халҡыбыҙҙың. Тиҫтә йыл самаһы элек, илебеҙ буйлап "капитализм шәүләһе" гиҙеп йөрөй башлағас, йәштәр башкөлләйгә матдилыҡ тоҙағына эләкте. Заманында ата-әсәһе хыялланған джинс, рок, мобильниктарҙы тиҙ арала ҡулдарына төшөргөһө килде йәштәрҙең. Егеттәр Ходорковский, килеп сыҡмаһа, һис юғы браток булырға теләне. Ҡыҙҙар миллионер кәләше булырға ашҡынды. Ҡайһы берҙәре бәхет ҡошон эләктереү маҡсатында яҙыҡ юлға баҫты. Ә капитализм, һөмһөҙләнеп, йортобоҙға килеп ингәс, теләк - бер нәмә, ҡулдан килеү-килмәү икенсе икәнлеге асыҡланды. Үҙ бизнесыңды булдырыу еңел түгеллеге аңлашылды. Бының өсөн бик әрһеҙ, намыҫһыҙ, стрестарға сыҙам булырға кәрәк.

Әммә аҡсалы кешеләр ҡатламы барлыҡҡа килде барыбер. Улары, кеҫәләре ҡалынайғас, алдарында бөгөлөүҙе талап итә башланы, күҙҙәрендә рухиәт яҡтылығы түгел, проценттар, килем һандары ялтыраны. Күп кенә брокерҙар психушкаларға эләкте. Һуңғы тиҫтә йылда депрессия менән сирләүселәр һаны артты. Ә кеҫәһе ҡалын егеттәр 40-45 йәштә үк әхирәттәрен яратыр өсөн виагра ҡулланырға мәжбүр. Бөтә ҡыҙҙарға ла миллионер етмәүе асыҡланды, ә братоктар мәрмәр таштар аҫтында мәңгелек йоҡоға талды.

Әммә йәштәрҙең бер өлөшөнөң "капиталистарҙың мораль принциптарын" ҡабул итмәҫкә башы етте. Байҙар, аҡсалар түгеп, үҙҙәрен маҡтатыуға ҡарамаҫтан, кумир ҙа, рухи етәксе лә булыуға өлгәшә алманы. Йәштәр Березовский, Ходорковский, Бигнов, Сорос һүрәте төшөрөлгән майкаларҙы түгел, ә азатлыҡ һәм ғәҙеллек көрәшсеһе Че Гевара һүрәтле майкаларға өҫтөнлөк бирә. Кешеләр һуңғы осор, әхлаҡлелектең ҡәҙерен белеү, кешеләрҙе мораль сифаттары өсөн баһалау юлына кире ҡайта башланы. Былар киләсәгебеҙ өсөн өмөт уята.

**(Дауамы бар.)**

## ӘСТӘҒӘФИРУЛЛА!

**Һинең менән уртаҡлашыр малым юҡ! Үҙеңдекеләрҙе йый ҙа, һыпырт бынан! Ана бара юлың!**

**- Ҡысҡырма миңә, мин һинең бисәң түгел! Ауыҙ асып һүҙ әйтергә лә хаҡың юҡ!**

**Ишек артында ошо һүҙҙәрҙе ишетеп ҡалғас, ҡыңғырауға үрелгән ҡулымды кире төшөрҙөм дә, ҡайтыу яғына йүнәлдем. Яратышып туймаҫтай тойолған матур парҙың бергә үткән ғүмер йылдарына нөктә ҡуйыуы ине был.**

**...Улар минең күптәнге танышым. Студент саҡтарынан бергә йәшәй башланылар. Башта уҡыуҙы тамамлау яғын, унан һуң ҡусты-һеңлеләргә ярҙам итеү мәсьәләһен, һуңынан иһә торлаҡ проблемаһын хәл итеүҙе уйлап, законлы никахлашыуҙы кисектерә килделәр. Биш йыл ғүмер - күҙ асып йомған ара ғына. Ғаилә проблемаларын өйрәнеүсе психологтар билдәләүенә ҡараһаҡ, Ир менән Ҡатын "статусында" йәшәүсе дуҫтарым ғаилә тормошоноң иң ауыр, һынылышлы осорон үтеп тә киткән һымаҡ. Әммә...**

**Рәсми теркәлмәйенсә йәшәп оттомо улар, әллә отолдомо? Теге һөйләшеүгә шаһит булған көндән һуң ярты йыл уҙғас, һәр икеһе менән айырым ғына шул хаҡта әңгәмәләштем. Законлаштырылмаған никах менән йәшәүҙең башҡа төр ыңғай һәм кире яҡтарын асыҡлау өсөн тағы ла бер нисә кешегә мөрәжәғәт иттем (уларҙың фекере түбәндәрәк).**

# НИКАХҺЫҘ ҒАИЛӘ ҒӘЙЕПМЕ?

## Бөгөн Рәсәйҙә йәш ғаиләләрҙең яртыһы тиерлек гражданлыҡ никахы менән йәшәй



**РӘМИЛ:** Өс йыл бергә йәшәп ҡарағас та ЗАГС-ҡа инергә кәрәк булған. Сөнки биш йылдан һуң бындай йәшәү рәүеше ғәҙәткә әйләнә һәм рәсмиләшеүҙең әһәмиәте юғала башлай. Никахты законлаштырған булһаҡ, бөгөн, бәлки, бергә йәшәр инек. Әммә үкенмәйем - оҙаҡ һынаһаҡ та, бер-беребеҙҙең характерын аңланыҡ. Законһыҙ никах егеттәрҙең яуаплылығын кәметә. Мин уға бер нисек тә бурыслы түгел. Теләйем икән - ҡайтам, теләмәйем икән - юҡ. Әлбиттә, бер-береңә ышаныс, яратыу булғанда айырылышыу хаҡында уй ҙа булыу мөмкин түгел. Әммә мөхәббәт башта ғына ҡайнар, аҙаҡ иһә бер-береңә өйрәнеү генә ҡала. ЗАГС-һыҙ йәшәүҙең матди-юридик яҡтан да бурысы юҡ. Себерҙә эшләгәс, телевизор, һыуытҡыс, компьютер кеүек өй кәрәк-яраҡтарын, автомобилде лә үҙем һатып алдым. Рәсми айырылышҡанда улар уртаҡ бүленер ине.

**ЗЕМФИРА:** ЗАГС-ҡа инмәйенсә, бала тапмаҫҡа килешкәйнек. Әммә тормоштоң проблемалары бөтәме ни? Әле тегеһен, әле быныһын көтә торғас, ваҡыт уҙып бара. Еләкте лә бешкән сағында өҙәләр. Йәш саҡта бәпес табып ҡалғым килә. Шулай уҡ, гел бер төрлө йәшәү ялҡыта. Хистәр тупаҫланып барғанда өйөбөҙгә бала ҡайтһа, уның шатлыҡтары, мәшәҡәттәре менән ҡайнап, тормошобоҙға яңы төҫ инер ине. Бала тыуғас, уны фамилиялы, документлы итергә кәрәк, тимәк, никахты ла рәсмиләштереү мөһим. Мин өгөтләй башлаһам, төрлө сәбәбен табып, ул һаман һүҙа килде. Һуңынан инде әрләшеү-үпкәләшеүҙәр артып, бергә йәшәүҙең йәме юғалды. Инәлеп торманым, сығып киттем. Уның ҡарауы, үҙемде аңларҙай, күңелемә ҡанат ҡуйырҙай башҡа берәүҙе осраттым. Кейәүгә сығырға йыйынам.

Ҡатын-ҡыҙ өсөн гражданлыҡ никахы менән йәшәү файҙаға түгел, тип уйлайым. Ғаиләнең именлеген, тотороҡлолоғон һаҡлауҙа ул көсһөҙ заттың хоҡуҡтарын кәметә. Бер бөтөн дәүләт булып йәшәр өсөн ҡайһылыр ҡылыҡтарыңды үҙгәртергә һәм азатлығыңды ла бер аҙ ҡорбан итергә кәрәк. Ирек яратыусы ирҙәр өсөн бындай йәшәү рәүеше проблеманан ҡасыу ысулы ғыналыр.

**РАУШАНИЯ:** Мосолман ҡыҙы булараҡ, башта бергә йәшәп ҡарауға ҡаршы булдым. Әҙәпһеҙлеккә һананым. Ауылда ни тиерҙәр, туғандар алдында оят, йәнәһе. Әсәйем янына ҡайтып, кәңәшләшкәйнем, ул ризалығын белдерҙе: "Беҙҙең осорҙағы ҡайһы бер хаталарҙы ҡабатламаҫ өсөн хәҙерге йәштәрҙең ошондай мөмкинлеге булыуын ыңғай баһалайым. Йәшлек әхирәтемде ире ғүмере буйы эсеп, туҡмап ыҙалатты. Айырылышырға ғариза яҙғайны, ире риза булмағас, йорт ирҙә ҡаласаҡ, тигәндәр. Өйҙә ҡатындың әсәләре һатып алып биргәйне. Өс балаһын эйәртеп, ҡайҙа барһын? Туҡмала-иҙелә һаман бергә йәшәй". Шулай ҙа әсәйем ЗАГС-ҡа инмәһәк тә, никах уҡытыуыбыҙҙы теләне.

Егетем менән өс йылдан ашыу бергә йәшәйбеҙ. Шул арала үҙем өсөн мөһим тип иҫәпләнгән ҡайһы бер нәмәләрҙе аңланым. Беҙҙең ҡыҙҙар кейәүгә сыҡҡас, иренә бала итеп ҡарай башлай: ашата, йыуа, кейендерә, таба, йүнләй, хәстәрләй. Тегеһе шуға өйрәнеп китә, аҙаҡтан хатта бурыслы һанай башлай. Башҡа ҡыҙҙарыбыҙҙың ошо "хатаһын'' ҡабатламаҫ өсөн "йәшәп ҡараған" ваҡытта уҡ икебеҙ араһындағы алтын урталыҡты һаҡларға тырышам. Иртән иркәләп уятам да (әйткәндәй, быныһын башҡа милләт әхирәттәремдән өйрәнәм, улар беҙҙекеләр ише ҡырыҫ-мырыҫ, тупаҫ уятмай), ҡабат йоҡлап китәм (тороп тәрбиәләп йөрөргә мин уның ҡатыны түгел), үҙе йүнләп ашай ҙа, эшенә китә. Мин эштән алдараҡ ҡайтһам, тәмле итеп бешеренеп, уны көтөп торам. Ул тәүҙәрәк ҡайтыр булһа, шылтыратып: "Бөгөн шуны бешерербеҙ, әҙерләй тор" - тип өйрәтәм. Гражданлыҡ никахында йәшәгәндә бер-беребеҙҙе юғалтыуҙан ҡурҡып (сөнки бер ниндәй ҙә документ тотмай), талаптарыбыҙ йомшара һәм холҡобоҙға һығылмалылыҡ инә. Донъя көткәндә был бик мөһим. Шуға ла законлы өйләнешкәнгә тиклем бергә йәшәп ҡарау кәрәк. Холоҡ-ғәҙәте яғынан ғына түгел, ир менән ҡатын енси бәйләнеш йәһәтенән дә бер-береһенә тап килергә тейеш.

**ЮЛДАШ:** Мосолман халҡында, бигерәк тә беҙҙең милләт кешеләрендә туғанлыҡ хисе ныҡ тәрбиәләнгән. Егет менән ҡыҙ законлаштырылмаған никахта йәшәгәндә бер-береһенең ата-әсәһе, туғандары менән аралашып, ҡунаҡлашып тора икән, ғаилә өсөн яуаплылыҡ тойғоһо тыуа һәм улар еңел генә айырылышып китмәйәсәк. Кем менәндер никахһыҙ йәшәгән, һуңынан ташлашҡан ҡыҙҙарға беҙҙә ҡараш әллә ни һәйбәт түгел, уға айырылышҡан ҡатын кеүек ҡарайҙар. Тәртипте, әҙәплелекте иң тәүҙә үҙебеҙҙең ҡыҙҙарҙа күреү ҡаныбыҙға, рухыбыҙға һеңгәнгә шулайҙыр, ахырыһы. Шуға күрә, һөйгән ҡыҙының милли күркен, намыҫын юғары тоторға теләгән егет иң тәүҙә үҙ яуаплылығын, үҙ бурысын танырға, ЗАГС-һыҙ йәшәтеп, уның дәрәжәһен кәмһетмәҫкә тейеш.

**ЛӘЙСӘН:** Илебеҙҙең демографик хәле, йәмғиәттәге яңғыҙ әсәләр, етем балалар тормошо көнүҙәк проблемаға әйләнеүе, хатта афәт менән янауы хаҡында ишетә-белә тороп, законлаштырылмаған никахта йәшәүгә ҡырҡа ҡаршымын. Йәшлек аҡылы - йәшлек хатаһы тигәндәй, кейәүгә сыҡмайынса бала табырға ашыҡмаусылар, аборт яһатыусылар, сабыйын бала табыу йортонда ҡалдырып китеүселәр аҙмы ни? Бигерәк тә Европа илдәренә эйәреп, хәҙерге йәштәрҙең байтағы йәшәү асылының иң бөйөк ҡиммәттәрен аңлап бөтмәй кеүек. Тормош ауырлығын йәмғиәткә, дәүләткә һылтап, былай ҙа илке-һалҡы йөрөгән, эскелеккә бирелеп кенә барған ирҙәрҙе бөтөнләй бәйҙән ысҡындырабыҙ. Беҙ, ҡатын-ҡыҙ, уларға үҙҙәрен атай, ир тип тойорға мөмкинлек бирергә тейешбеҙ. Быны иһә тейешле кимәлдә ғаилә ҡороп, балалар үҫтергәндә генә эшләп була. Бөгөн бар, иртәгә юҡ тигән гражданлыҡ никахы менән ирҙе ир итеп тотоп булмай ул.

**Светлана НАСЫРОВА**

## ШУЛАЙ ИТЕП...

**Рәсәй күләмендә уҙғарылған тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, 1960 йылда 100 туйға 12 айырылышыу тура килһә, 1985 йылда - 41-е тарҡала, ә 2005 йылда уларҙың яртыһынан күбе - 57 ғаилә айырыла. Ошо йүнәлештә тикшеренеүсе ғалим-демографтар билдәләүенсә, 25 йәшкә тиклем ғаилә ҡороусы йәштәрҙең яртыһы тиерлек гражданлыҡ никахы менән йәшәй. 30-ҙан уҙыусыларҙың һәр бишенсе-алтынсыһы ошо алымды һайлаған. 60 йәшлек өлкәндәр араһында иһә ирҙәрҙең 10 проценты, ҡатын-ҡыҙҙың 7 проценты никахын рәсми теркәмәгән. Бындай ғаиләләрҙең тотороҡлолоғо хаҡында ла ҡыҙыҡһына ғалимдар. Иң мөһиме - тәүге йыл. Уртаҡ тел табыу, бер-береңде һынап ҡарау. Өсөнсө йылда был парҙарҙың яртыһы, ә бишенсе йылда - 60 проценты ЗАГС-та яҙылыша. Бынан һуң иһә мөнәсәбәттәрҙе законлаштырыуҙың мөһимлеге кәмей. Шулай ҙа рәсмиләшмәгән никахтарҙың тиҙерәк тарҡалыуы һәр кемгә мәғлүм. АҠШ һәм Европа илдәре менән сағыштырғанда, Рәсәй халҡы бындай йәшәү рәүешенә еңел-елпе ҡарамай, законлаштырылмаған никахта һыналған ғаиләләр ныҡлығын һорау алыусыларҙың 80 проценты иҫбатлай, тип тикшеренеүселәр нисек кенә хупламаһын, улар башҡа дин, башҡа милләт, башҡа ҡан кешеләре.**

**Ғаилә ҡороу мәсьәләһенә Ислам дине айырыуса етди ҡарай. Уның никахһыҙ йәшәүҙе тыйыуы һәр мосолманға мәғлүм. Йәшәп ҡарау ниәте менән генә ғаилә ҡорорға ярамай, ундай ниәттә уҡылған никах та дөрөҫ түгел. Никах - ғәрәп теленән тәржемә иткәндә, "ике яҡтың да бер-береһе менән риза булыуы". Бер ҡараһаң, ваҡытлыса никахты ла ир менән ҡатын ризалыҡ менән ҡора, әммә хәҙерге заманда мөхәббәтте йәшәп ҡарау менән бутап, уның ҡәҙерен, ҡиммәттәрен бөтөрәбеҙ. Шулай уҡ тыуыр балаларҙың да яҡты донъяға юлын быуыу бит инде ул бындай никахтар. Һәр хәлдә, йәштәребеҙгә уйланырға урын бар.**

*✓ Араҡы арзанайһа, бәйелһеҙерәктәре эсеп үлер, аңы булғаны туҡтар ине, тип уйлап ҡуям ҡайһы саҡ. Ысынында иһә, араҡы ҡыйбатланғандан-ҡыйбатлана ғына. Шул арҡала хәҙер ауылдарҙа өй аша тиерлек көмөшкә ҡайнаталар.*



ЙӘН ӘРНЕҮЕ

**Ҡайһы саҡ тирә-йүнгә күҙ һалам да, ахрызаман килмәнеме икән, тигән уйға ҡалам. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең йәмғиәт менән күптән инде хәмер идара итә кеүек. Ҡайҙа ҡарама, ҡулдарына шешә тотҡан йәштәр, ҡыҙмаса булып алған урта йәштәге ир һәм ҡатындар, араларында өлкәндәр ҙә юҡ түгел... Ни булды беҙгә, ҡайһы упҡынға тәгәрәйбеҙ беҙ? Ошо һорауҙар шаңдау булып кешеләрҙең буш, ҡотһоҙ күңелдәрен байҡай ҙа, урын таба алмай, ҡайҙалыр китеп юғала. Оят-намыҫыбыҙҙы ла, аҡылыбыҙҙы ла сығарып түктек тә...**

# БЕР БАЛЫҠ БАШЫ:

## "Эскелектән ҡотолорға!"

Ни эшләнек һуң, милләттәштәрем? Ошо тәңгәлдә Тамара Ғәниеваның һүҙҙәре иҫкә төшә: "Капитализм соҡорона этеп төшөрөргә булышлыҡ иттек". Йылдар, юҡ, быуаттар дауамында тупланған рухи һәм матди байлығыбыҙҙан ғына яҙып ҡалманыҡ, намыҫыбыҙҙы, көсөбөҙҙө, ахыр сиктә, үҙебеҙҙе лә юғалттыҡ. Заманында бар донъяны дер һелкетеп тотҡан милләттәштәремә нисек оят түгел? Хәйер, эш бер оятта ғына булһа икән.

Эскелек бәләһенә йәнә бер әйләнеп ҡайтайыҡ әле. Был проблема күптән инде күтәрелеп, һөйләнере - һөйләнеп, гәзит биттәрендә яҙылып, уның ҡыҙығы ла, ҡыҙғанысы ла бөтөп, халыҡты тамам ялҡытып бөттө. Шулай ҙа мәҡәләмдә уның хаҡта яҙмай булдыра алмайым. Темаға ҡағылышлы бер көләмәс иҫкә килеп төшә. Бер эскесенән: "Әгәр араҡы йөҙ һум торһа, эсер инеңме?"- тип һорайҙар икән. "Эсәм!"- тип яуап бирә икән уныһы. "Ә йөҙ илле һум торһа?" "Барыбер эсәм!". Һорау алыусының иҫе китә: "Ә араҡы биш йөҙ торһа һуң?" Иҫерек ҡулын ғына һелтәп ебәрә: "Барыбер эсәм!" Аптыраған һорау биреүсе китергә тип уҡтала ла, йәнә артына боролоп, эскесегә өндәшә: "Әгәр араҡы ни бары бер генә һум торһа?" "Юҡ, эсмәйем!"- тип танауын йыйыра иҫерек. "Ниңә?" "Бәй, үлеп ҡуйһам...". Араҡы арзанайһа, бәйелһеҙерәктәре эсеп үлер, аңы булғаны туҡтар ине, тип уйлап ҡуям ҡайһы саҡ. Аптырағандан килә инде ундай уй башыма. Ысынында иһә, араҡы ҡыйбатланғандан-ҡыйбатлана ғына. Шул арҡала хәҙер ауылдарҙа өй аша тиерлек көмөшкә ҡайнаталар. Хәмергә хаҡ артҡан һайын эскеселәр ҙә күбәйә. Был мәсьәлә берәй ҡасан ыңғай хәл ителерме-юҡмы, билдәһеҙ.

Беҙ йәш саҡта ҡарап һоҡланыр, уларға оҡшарға тырышыр шәхестәр була торғайны. Хәҙерге йәштәр кемгә оҡшарға теләр икән? Ғөмүмән, яңы заманға яраҡлаша алмаған оло быуын кешеләре араһында ундайҙар бармы һуң? Кемгә эйәрергә белмәй, ҡиблаһын таба алмаған йәштәр күңелен дә, зиһенен дә нимә менәндер тултырырға тейеш бит...

Бер көн телевизорҙан ҡыҙыҡ ҡына фекер ишетеп ҡалдым. Фәнни күҙәтеүҙәр раҫлауынса, төрлө бәлә-ҡазаларҙан, фажиғәләрҙән күпселектә изге күңелле, ярҙамсыл кешеләр имен-һау ҡотола икән. Сөнки улар ундай ҡурҡыныс осраҡтарҙа тирә-йүндәге кешеләрҙе ҡотҡарыу менән мәшғүл, ә ҡурҡаҡтар иһә ҡасырға, йәшеренергә теләп, һәләк була. Минеңсә, бары тик изгелекле кешеләр генә беҙҙең йәмғиәтте һәләк булыуҙан ҡурсып ҡала ала. Шунан башҡа ҡотолоу юлы юҡ, ахыры. Изгелеклеләрҙе, битараф булмағандарҙы кешеләрҙе эскелек тигән һаҙлыҡтан ҡотҡарырға саҡырғы килә. Тик был эште нисек башларға була, берәйһегеҙ беләме?

**Фәүзиә ЯХИНА.**

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# Яҙғыһын ауырыуҙар аҙа

**Яҙ еттеме, ашҡаҙан һәм бөйәндәге сей яра, гастрит ауырыуҙары көсәйә. Шуның өсөн яҙҙың тәүге көндәренән үк аҙыҡ рационындағы ризыҡтың мөмкин тиклем майһыҙ булыуын хәстәрләү мөһим. Итте майҙа түгел (котлетфәлән, һ.б), һыуҙа бешереп ашау мөһим. Шулай уҡ яҙғыһын төрлө ярманан бешерелгән бутҡа ла ауырыу ашҡаҙан өсөн файҙалы. Гастрит менән яфаланыусыларға иҫерткес эсемлектәр, майлы һимеҙ ит, тоҙланған йәшелсәләр менән мауығыу зыянлы.**

**Ашағандан һуң ашҡаҙанда ауырлыҡ тойһағыҙ, көнсығыш акупунктураһы ысулы буйынса массаж яһағыҙ. Уның өсөн баш бармаҡтарҙы 2 минут буйы ныҡ итеп ҡыҫып тоторға кәрәк.**

**Эс ҡатҡанда эсәктәр эшмәкәрлеген көйләү өсөн салҡан ятып, аяҡтарҙы өҫкә күтәреп, 3 секунд тирәһе тотоғоҙ. Ул эстең мускулдарын нығыта. Был күнекмәне унар тапҡыр эшләргә кәрәк.**

**Шуныһын оноторға ярамай: әгәр эс ауыртһа, үҙәк көйһә һәм ҡатыу йышайһа, кисектермәй гастроэнтерологҡа күренеү мөһим.**

### Йыйырсыҡтан ҡотолорға!

Ҡыш көнө организмда витаминдар аҙайыуы, һалҡын елдән һәм арығансы эшләүҙән йонсоу - тиренең тиҙ һулыуына булышлыҡ итә. Яңы йыйырсыҡтар хасил була, бит тиреһе төҫһеҙләнә. Тән тиреһе матур булһын һәм яҙғы сағыу ҡояшҡа күҙҙе ҡыҫып ҡарауҙан ваҡ йыйырсыҡтар күбәймәһен өсөн ҡояштан һаҡлаусы күҙлек кейергә кәрәк. Бит тиреһен яҙғы ҡояштың ультрафиолет нурҙарынан һаҡлау өсөн урамға сығыр алдынан махсус косметик крем һөртөргә онотмағыҙ.

Иртәнсәк һабынлап йыуғас, битте шалфей, аҡ сәскә, йүкә сәскәһе һәм ҡырҡбыуын төнәтмәһенә мансылған йомшаҡ салфетка менән ҡаплап, 2 минут ултырырға. Сайҡағандан һуң битте тиҙ-тиҙ генә боҙ киҫәге менән ышҡып алһаң, битеңдең сафланып, алһыуланып китеүен күрерһең. Аҙнаһына ике тапҡыр битте һәм муйынды аш йәки диңгеҙ тоҙо ҡатнашмаһы менән йыуып алыу файҙалы. Уның өсөн бер стакан һыуға ярты балғалаҡ тоҙ һалып иретеү ҙә етә. Аллергия булмаһын өсөн диңгеҙ тоҙоноң буялғанын файҙаланмағыҙ.

### Сәстәрең йылтырап торһон

Ҡыш буйы йылы башлыҡ кейгәнлектән, сәстәр тәбиғи йылтырауын юғалта, тиҙ һыныусанға әйләнә, ҡойола. Сәсте "терелтеү" өсөн уға аҙнаһына бер тапҡыр витаминлы, туҡландырғыс маска яһарға кәрәк. Хәҙер магазиндарҙа сәсте тәрбиәләү өсөн йәнең теләгән масканы һатып алырға мөмкин. Сәстең бөтә төрөнә лә яраған бер нисә рецепт тәҡдим итәбеҙ. Ярты литр ҡайнар һыуға киптереп ыуылған берәр аш ҡалағы аҡ сәскә, меңъяпраҡ, сөйәл үләне, шалфей үләне һалып болғатып, 30-40 минут торорға һәм бер аҙ һыуынғас, һөҙөп, шул төнәтмә менән сәсте сайҡатырға йәки сәс төбөн ыуырға мөмкин. Сәсте "яңыртыусы" төнәтмәне 1 литр һыуға бер аш ҡалағы ҡаты сәй һалып бешереп әҙерләргә лә мөмкин. Витаминға бай былдай шифалы төнәтмәләр сәстең ҡойолоуын туҡтата, ялтырата һәм төҫөн аса.



### Көсөргәнеште йомшарт

Миҙгел алышынғанда, ғәҙәттә, дөйөм хәлһеҙлек интектерә. Оҙон ҡыш буйы тупланған физик һәм рухи арығанлыкты бөтөрөү өсөн, мәҫәлән, тын алыу күнекмәһе яһарға кәңәш итәләр. Уның өсөн тәрән итеп тын алып, 2-3 секунд тынды сығармай ултырырға кәрәк. Был гимнастиканы бер нисә тапҡыр яһау кәйефте күтәрә, күҙҙәрҙе "аса" һәм уның тылсымы миҙгел алышынғанда була торған талсығыуҙарҙан арынырға ярҙам итә.

### Ни ашарға?

Оҙаҡ йәшәргә һәм ашҡаҙаныңды һаҡларға теләһәң, аҙыҡ рационынан рафинирланмаған көнбағыш һәм зәйтүн майҙары, балыҡ өҙөлмәһен. Был аҙыҡтар ҡандағы холестеринды кәмәтә торған омегамайҙарға бай. Ә холестериндың күбәйеүе һаулыҡ өсөн ҡурҡыныслы, сөнки ул ҡан тамырҙарында тығылыуҙар барлыҡҡа килтерһә, инфарктның аяҡтан йығыуын көт тә тор. Шуның өсөн һөмбаш, бағры, скумбрия һәм сельд балығы айырыуса файҙалы. Ғөмүмән, яҙғыһын көн һайын 50-100 грамм балыҡ ашау берәүгә лә зыян итмәҫ. Рафинирланмаған көнбағыш һәм зәйтүн майҙарындағы Е витамины организмдың ҡартайыуын тоҡтарлай. Косметологтар ҙа бит тиреһен йәш көйө оҙағыраҡ һаҡлау өсөн Е витаминлы кремдар һөртөргә кәңәш итә.

# Дистония интектерәме?

## Ҡалҡан биҙен тикшерт!

**Ҡатын-ҡыҙҙарҙың - 40, ир-егеттәрҙең 20 проценты ваҡыты-ваҡыты менән дистониянан яфалана, ер йөҙөндәге халыҡтың 15 проценты был сир менән даими рәүештә ауырый.**

Дистония, йәғни мускулдар һәм ҡан тамырҙары тонусының норманан тайпылыуы - нервылар көсөргәнешлеге кисереүҙән, йыш осраҡта төрлө эске ағзаларҙың ауырыуынан башлана. Шулай уҡ тышҡы факторҙар тәьҫиренән дә дистония тыуыуы мөмкин. Мәҫәлән, миҙгел алмашыныуы, тирә-яҡ мөхит торошоноң насарлығы, эш урынында тейешле шарттар булмауы һ.б. Һәр хәлдә, дистония бер сәбәпһеҙгә барлыҡҡа килмәй. Ниҙән башланыуын асыҡлағанда, сирҙе дауаларға мөмкин.

**Нисек башлана?**

Теге йәки был сәбәптәр буйынса эске секреция биҙҙәренең эшмәкәрлеге үҙгәреүенән организмдың гормональ тетрәнеү кисереүе лә дистония сиренә юл аса. Енси гормондар эшкәртеп сығара башлағанда үҫмерҙәрҙең организмы, климакс осоро кисереүе һәм эске ағзаларҙағы башҡа үҙгәрештәр ваҡытында гүзәл заттарҙың дистония симптомдары барлыҡҡа килә. Бигерәк тә ул йөрәк аритмияһы, гипертония, үт ҡыуығы, остеохондроз, бөйөр һәм башҡа эске ағзаларҙағы сирҙәр көсәйгәндә "ярһый".

**Гормондар боҙолоуы**

Вегетодистония бигерәк тә ҡалҡан биҙҙәре, бөйөр һәм күкәйлектәр ауырыуы мәлендә аҙа. Мәҫәлән, 20 осраҡта аналыҡ миомаһы һәм күкәйлектәр шешеүе үҙен дистония өйәнәге аша белгертә.

**Инфекция өҙләктәре**

Бөйөрҙәрҙең хроник Ауырыуының киҫкенләшеүе 30 осраҡта дистония симптомдары менән йәнәш бара.

**Аллергия**

Гипоксияға бәйле тын алыу ауырлаша. Ҡурылдай астмаһы менән сирләүселәрҙең яртыһынан күберәге өйәнәк йышайғанда дистонияға дусар була.

**Баш мейеһенең зарарланыуы**

Баш мейеһе һелкенгән кешеләрҙең - 40, микроинсульт кисергәндәрҙең 80 проценты ваҡыты-ваҡыты менән вегето тамыр дистонияһы сиренән яфалана. Ғөмүмән, беҙҙең вегетатика эске хис-тойғолар көсөргәнешлегенә, хәүеф-хафаланыуҙар кимәленә һәм кәйефтең үҙгәреүсәнлегенә лә бәйле.

**Ни өсөн берсә янабыҙ, берсә туңабыҙ...**

Саманан тыш хәүефләнеү, кәйеф тоторОҡһоҙлоғо, йыш тирләү, ҡулдарҙың ҡалтырауы, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ҡурҡыу, шөбһәләнеүҙәр - дистонияның төп сағылышы.

**Белгестәр вегетатиканың ҡаҡшауын өс төргә бүлә.**

**Кардиналь төр.** Өйәнәк ваҡытында йөрәк дарҫлап тибә башлай. Ауырыуға тын етмәй, йөрәк ритмы йышая.

**Гипотензив төр.** Кеше тиҙ арый. Төҫө ҡаса. Мускулдары хәлһеҙ була. Башы йыш әйләнеүҙән үҙен һәр саҡ бына-бына йығылып китер һымаҡ тоя. Артериаль ҡан баҫымы 100 мм түбәнәйә.

**Гипертензив төр.** Башы ауыртҡанда күберәк елкә өлөшө һулҡылдап һыҙлай. Йөҙө, түштәре ҡыҙара, беленер-беленмәҫ һуҡҡан пульсы, тоноҡ ҡына булып ҡолағында яңғырай.

**Ни өсөн берәүҙәрҙең ҡан баҫымы күтәрелә, бәғзеләренең төшә?**

Дистония ваҡытында һәр кемдең ҡан баҫымы төрлөсә үҙгәрә, сөнки ике төрлө реакция бар.

Адреналин ("ярһыу гормон") тигәне, мәҫәлән, кешене "ҡыҙҙыра", башына ҡан йүгертеп, ҡан баҫымын күтәрә, бөтөн тәнен тирләтә, юҡҡа-барға асыуын килтерә, кәйефен "боҙа". Ацетилхолин ("көсһөҙ гормон") тип аталған икенсе төрө, киреһенсә, кешене өшөтә, тәнен һалҡын тиргә батыра, ҡан баҫымын түбәнәйтә. Кеше бушҡа-юҡҡа ҡайғырып хәсрәтләнеүсән булып китә.

**Сирҙе асыҡлар өсөн ошо табиптарға күренергә:**

1. Эндокринолог. Иң беренсе гормондарға тест үтергә, ҡалҡан биҙен һәм бөйөрҙәр эшмәкәрлеген тикшертергә.
2. Кардиолог (ЭКГ, ЭХО, ауыр күтәреп ҡарауға тикшереү үтеү).
3. Ҡатын-ҡыҙҙарға - гинекологҡа, ир-егеттәргә - андрологҡа йәки урологҡа күренеү.
4. Невролог (ЭЭГ үтергә).

Әгәр бөтөн ошо тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәһе нормала булһа, был һеҙҙә нервылар көсөргәнешлегенән барлыҡҡа килгән дистонияның функциональ характерҙа булыуын иҫбатлай.

## АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО





**Был рубрика Батыр Иҫәнсуриндың Учалы районының Сәнсәр ауылында тыуған көләмәс-лаҡаптарынан башланғайны. Ауылдың рәсми исеме - Амангилде, Сәнсәр кеүек тағы ла бер хикмәтле исеме - Соҡот. Ауыл халҡы был атамаларҙы төрлөсә нарыҡлай. Сәнсәрҙе "сәнсеп" алыуҙан килеп сыҡҡан, тиһәләр, Соҡотто "соҡоу"ҙан алынған тиеүселәр ҙә бар. Әммә шуныһы бәхәсһеҙ - был ауылда тормоштоң һәр даим хәл-ваҡиғаһынан мәрәкә, көлкөлө һүҙ табып йәшәй беләләр.**

**"Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күр", тиҙәр. Учалы районы буйлап йөрөгәндә ҡаршыбыҙҙа осраған был ауылды, әлбиттә, урап үтә алманыҡ. Өләсәйле-ейәнсәрле Әнүзә һәм Ураниә Вахитовалар беҙгә ярыша-ярыша ауыл мәҙәктәрен бәйән итте. 82 йәшен тултырған Әнүзә инәй бик йор һүҙле оптимист, 15 йәшлек ейәнсәре Ураниә һигеҙенсе синыфта уҡый, 2004 йылда үткәрелгән "Мин - шағир" конкурсында еңеүсе, 2005 йылда Учалы ҡалаһында үткән "Йәш сәсәндәр бәйгеһе"ндә лауреат булған. Уның "Миҙгелдәр" (Белорет ҡалаһында баҫылған) исемле шиғырҙар китабы ла донъя күргән.**

# СӘНСӘРҘӘР...

## сәнстерә

**ӘНҮЗӘ ИНӘЙ:** Әүәле кейемгә наҡыҫ ваҡытта бер әбей юрған ябынып, Килмәккә киткән. Таныштарына барып инһә, хужа булған кеше сәй эсеп ултыра икән. Килеп инеүсе "Һаумыһығыҙ!" тип әйтеүе булған, шунда ауыҙы асыҡ торған баҙға төшкән дә киткән. Сәй эсеүсе уның һаулығын алып өлгөрмәгән, уның ҡарауы, баҙҙа картуф сүпләп ултырыусы хужабикә:

-Аһ-аһ, килен, һин бында нишләп ултыраһың ул? - тип һорай ҡуйған.

-Күрмәйһеңме ни, ҡайынбикә, һиңә картуф сүпләшеп ултырам бит, - тигән килен кеше, бер ни булмағандай.

**УРАНИӘ:** Беҙҙең ауылдан бер ағай ауылға яҡын бер урынға барып, ҡайындарҙы йыға башлауға, эргәһенә лесник килеп сыҡҡан.

-Ағай, ниңә ағастарҙы ҡырҡтың? - тигән урман һаҡсыһы.

-Ҡырҡмаһам, уларҙы мин нисек йолҡоп алайым һуң? - тип, ағай уның һорауына һорау менән яуап ҡайтарған.

**ӘНҮЗӘ ИНӘЙ:** Бер йылды кисләтеп кенә ат егеп Зәйнәкәйгә барып килергә булдым. Йомошомдо йомошлай торғас, ҡараңғы төшөп киткән икән. Текмәгә бәйле атымдың теҙгенен ысҡындырып алып, ҡайтып китәйем, тиһәм, инәкәйем, атымдың башы юҡ. Ҡотом алынып, әхирәтемә йүгерҙем. Икәүләшеп ахылдашып йүгереп килдек. Әхирәтемдең күҙе минекенән дә хөртөрәк күргән икән, ул да атымдың башын таба алманы. Йәшерәк ҡатынды саҡырып алып килдек. Ул тәүҙә дуғаны һәрмәп ҡараны ла, ҡулы менән аттың башын эҙләй башланы һәм: "Был нимә ул, ҡойроҡ бит!" - тип әйтеп һалмаһынмы. Бот саптыҡ. Һуңынан шәм килтереп яндырып ҡараһаҡ, кемдер шаяртып атымды арбаға арт яғы менән егеп киткән булып сыҡты. Шул ғына етмәгән, туғарып, әйләндереп егеп, ҡайтырға сыҡһам, тәгәрмәстәре бара бирә лә, тәгәрәп китә, бара бирә лә, тәгәрәп китә. Сәкүшкәләрен дә һурып киткән теге шилма малай.

**УРАНИӘ:** Сәнсәрҙән бер ағай Зәйнәкәй ауылындағы дуҫына ҡунаҡҡа килгән. Декабрь айы. Ҡунаҡ ботинкаһын тышҡы күтәрмәлә сисеп ҡалдырған. Хужа: "Ниңә тышта ҡалдырҙың, унда һыуыҡ бит?"- тиһә, ҡунаҡ: "Бирешмәҫ, зимний бит ул", - тип яуап ҡайтарған.

**ӘНҮЗӘ ИНӘЙ:** Беҙҙә Настя исемле мәрйә йәшәне. Башҡортлашып бөткәйне ул, үҙен Нәстә тип йөрөттөк. Бер мәл уның көтөүҙән ҡайтып килгән һыйырын быҙауы имгән дә ҡуйған.

-Аҡтамырҙы ғына ашатҡайныҡ үҙенә, һөтө әрәм булды инде, - тигән көтөүсе уға.

-Имһен, үҙ инәһе бит, - тип яуап биргән уға Нәстә әбей.

Бер мәл шул Нәстәгә күршеһе:

-Минең Әлимем өс көн ҡайтканы юҡ, һинең Юлигың менән бергә сығып киткәйнеләр, үлеп ятмаһындар, - тип борсолоуын белдергән.

-Һинеке үлһен дә ул, минеке самый лучший малай бит әле, - тигән Нәстә.

**УРАНИӘ:** Беҙҙең ауылда бер бабайҙың атын бүре ашап киткән. Уға был хаҡта әйткән кешеләргә:

-Эй, ашаһын да, бүре ғүмер буйы йәйәү йөрөй, мин уҙа барһа, бер йыл йәйәү йөрөрмөн, ни булыр тиһең? - тип яуап биргән бошонмаҫ бабай.

**ӘНҮЗӘ ИНӘЙ:** Бер мәл ҡырҙа эшләүселәргә аш бешереүсе булып эшләнем. Шунда бер егет:

-Һинең сәйеңде ыҫ һуҡҡан бит, - тип әйтеп һалмаһынмы.

Уның һүҙен башҡалар ҙа күтәреп алды. Киттеләр шунан сәйҙе ыҫ һуғыу ихтималлығын тикшереп. Бер нисек тә иҫбат итә алмағас, теге егет былтыр йылға буйындағы ҡамыштар, таллыҡтар янып китеүен иҫенә төшөрөп:

-Иҫләмәйһегеҙме ни, ике көн буйына һүндереп аҙапландыҡ, - тигән булды.

**УРАНИӘ:** Бер ағай Килмәктә саҡта Сәнсәрҙәге өйө янып китеүен хәбәр иткәндәр. Ул атын менгән дә ауылға елдергән, әммә эйәренән ҡолап ятып ҡалған.

-Һоро бейә, аҡылың булһа, һыуға сап! - тип ҡысҡырған ул сабып барған атының артынан.

Атына нимә әйтергә теләгәндер ағай, унынһын белеүсе юҡ.

**ӘНҮЗӘ ИНӘЙ:** Минең бер күҙем генә күреп, икенсеһе һуҡырайған булған икән. Шуны быйыл ғына белеп ҡалдым. Ҡырҙа йөрөп ятҡанда бер күҙемә сүп төшөп, шуны алам, тигәндә, юлдағы соҡорға төшкән дә киткәнмен. Шунда ғына бер күҙемдең генә күреүен белеп ҡалдым. Бер күҙ етә ул. Бер күҙем һуҡыр булһа ла, ҡыҙыҡ ҡына һуҡыр ул: йә яҡындағыны алыҫайтып, йә алыҫтағыны яҡынайтып күрһәтә.

**УРАНИӘ:** Насретдин тигән ағай: "Мин әрмелә саҡта бар һалдаттар тик миңә генә ҡарап йөрөнө", тип маҡтанып һөйләгән. Командир "Равняйсь, Насретдину!" тип әйтеүе була, барыһы ла миңә ҡарай ине, ике йыл буйы шулай дауам итте",- тигән. Баҡтиһәң, стройҙың ҡап уртаһында йөрөгән ағай "Равняйсь, равнение на середину!" тигән команданы "Равняйсь, Насретдину!" тип аңлаған икән.

**ӘНҮЗӘ ИНӘЙ:** Бер егет менән ҡыҙ өйләнешер алдынан шулай тип һөйләшәләр икән.

-Ҡәҙерлем, беҙҙең нисә балабыҙ буласаҡ? - тип һораған егет кеше.

-Берәү, - тип яуаплаған буласаҡ кәләш.

-Эй, бер бала өсөн генә мин һине алып та тормайым, - тигән егет кеше.

**Әмир ҒҮМӘРОВ**
**яҙып алды.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# АҠЫЛЫМ ҺЕҘҘЕҢ ӨСӨН

**Тормошта һәр кемдең быңдай остазы булмай. Шуға күрә мин һинең өсөн ошо китапты яҙҙым. Ҡасандыр өлгәшкән уңыштарымдың нигеҙен китапҡа теҙҙем. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, унда һүҙ барыһы ла ваҡыт һынауын үтеп, быуындан-быуынға тапшырыла килгән хәҡиҡәт тураһында бара. Ҡайһы берҙәре әле булһа файҙаланылмай. Китаптағы ҡайһы бер фекерҙәрҙе ун йыл элек ишетһәң дә, уларҙың бөгөн дә ни тиклем емешле һәм тәрән мәғәнәгә эйә булыуын аңлап ғәжәпләнерһең. Иң мөһиме, был китапта өс әйбер табасаҡһың.**

Беренсенән, ундағы ҡайһы бер ҡанундар бер-береһенә ҡаршы килгән һымаҡ тойолор. Ләкин беҙҙең тормош менән еңеүселәр закондары идара итә, ә тормош үҙе ҡапма-ҡаршылыҡтар менән тулы серле донъя. Ҡапма-ҡаршылыҡлы һымаҡ тойолғаны, асылда, бер бөтөндө хасил итеүсе төрлө нәмәләр генә.

Икенсенән, һин йыш ҡына бер-береһенә оҡшаш, ҡабатланған нәмәләр менән осрашасаҡһың. Был ҡайһы бер закондарҙың бер-береһенә бәйле булыуынан килә. Уларҙың барыһын да нисек бар - шулай ҡабул итеп, тормошоңдо ысын мәғәнәһендә байытасаҡһың.

Өсөнсөнән, еңеүселәр законына таянып йәшәүе лә еңел булмауын аңларһың. Ләкин һиндә ихтыяр көсө бар һәм теләһә ҡайһы ваҡытта тормошоңдо үҙгәртә аласаҡһың. Уңышҡа өлгәшеү даланлы булыуҙан тормай. Ул тормошоңдо айырым бер принциптарҙа ҡороуың һәм йәшәү рәүешеңдең һөҙөмтәһе. Быңдай алым бөтөн кешегә лә оҡшамай. Күптәр үҙҙәрен хатта ҡорбан итеп күрергә риза булып, аҡланыр урын йәтешләй. Ләкин хәҡиҡәт - юлыңды фәҡәт үҙең һайлауыңдан тора. Бөтә нәмә хәл-ваҡиғалар барышына түгел, ә уларҙы нисек файҙаланыуыңа бәйле. Һин дә, мин дә, еңеүсе булырлыҡ мөмкинлеккә эйәбеҙ. Был китапта хәҙер үк үҙеңдә һынап ҡарарҙай бик күп фәһемле кәңәштәр бар. "Еңеүселәр законы" күңелеңде елкендерер, ҙур ҡаҙаныштар яуларға рухландырыр, тип өмөтләнәм. Һиңә теләктәрем:

"Бөтөн хыялдарыңды ла тормошҡа ашыр. Тормошоңдо көн һайын сағыу ваҡиғалар менән биҙә.

Үҙең теләгән кеше бул".

**Бодо ШЕФЕР.**

## ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

**Аҡ майҙың килеп сығыу тарихы Көнсығыш халыҡтарының күсмә ҡәбиләләре менән тығыҙ бәйле. Һөттө алыҫ араға алып йөрөтөү ҡыйынлыҡ тыуҙырғас, боронғо күсмә ҡәбиләләргә уны уңайлыраҡ аҙыҡ итеп эшкәртергә тура килә. Күсмә халыҡтарҙың славяндар менән күрше йәшәүе шул халыҡтарҙың да аҡ май менән танышыуына килтерә.**

# Рәсәйҙәр майҙы...

## французлардарҙан алда ашай башлаған

Көнсығыш халыҡтары майҙың иң яҡшы сорттарын яңы ҡаймаҡтан йәки һөт өҫтөнән эшләгән булған. Славяндар майҙы ҡаймаҡ туғыу ысулы менән эшкәрткән. Улар айырылып сыҡҡан май массаһын һыуытҡан һәм ҡалаҡ, ҡул ярҙамында туғыған. Әҙер аҡ май һалҡын һыуҙа сайылған. Май бик ҡиммәт торғанлыҡтан, уны көндәлек рационда тик хәлле ҡала кешеләре генә ҡуллана алған.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, халыҡ яңы майҙы оҙаҡ һаҡлау ысулын белмәгән. Шунлыҡтан, уны мейестә иретеп, һалҡын һыуҙа йыуып, ҡайтанан туғырға мәжбүр булғандар. Иретелгән май ике өлөшкә бүленгән: тәүге ҡатламы таҙа майҙан торһа, икенсеһе һыу һәм май ҡалдыҡтарын тәшкил иткән. Ошо ысул менән һары май эшкәрткәндәр.

Ун туғыҙынсы быуатҡа Рәсәй донъя баҙарын һары май менән тәьмин итеүсе иң ҙур етештереүсегә әүерелә. Ә бына Европа кешеләренә иһә май оҙаҡ ваҡыт билдәһеҙ аҙыҡ булған. Ун һигеҙенсе быуатта Рәсәйҙә был аҙыҡты күргән бер француз сәйәхәтсеһе май етештереү сәнәғәтенең бик ҡатмарлы булыуын һәм ҡиммәткә төшөүе, шунлыҡтан Европала йәшәүсе ябай халыҡ аҡ майҙың ни икәнен бер ҡасан да белмәйәсәге тураһында хәтирәләр яҙып ҡалдырған. Әммә оҙаҡламай аҡ май бар донъяны яулап ала.

Бер нисә йыл элек беҙҙең илдә шоколадлы май етештерелә башлай. Әлбиттә, шоколадлы май элек тә өҫтәлдә күренгеләп торған - халыҡ уны аҡ майҙан эшкәртә белгән.

Ысын аҡ майҙың майлылығы һикһән проценттан да түбән булырға тейеш түгел. Был хаҡта май ҡабында күрһәтелергә тейеш.

Ҡапта шулай уҡ етештереүсе заводтың адресы, телефоны яҙылған булһын. Юғиһә, алданыу осрағында һатып алыусы кемгә мөрәжәғәт итергә белмәй аптырап ҡалыуы бар.

Белгестәр урындағы аҡ май етештереүсе завод-фабрика продукцияһын алырға кәңәш итә - уларҙың һыйыр һөтөнән эшләнгән ысын аҡ май етештереүенә ышаныс ҙурыраҡ.

АФАРИН!

# Халыҡтан сыҡҡанбыҙ,

## халыҡтыҡы булырға тейешбеҙ

**Башҡортостан Республикаһының Халыҡ ҡоралдары милли оркестры ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә киң билдәлелек яуланы. Н. Калинин коллективтың уникаллеген билдәләп: "Бындай оркестрҙар бик күп, ләкин улар барыһы ла рус халыҡ музыка ҡоралдарынан төҙөлгән. Ә һеҙҙең оркестр донъяла берәү генә", - тине. Ысынлап та, был милли оркестр нигеҙендә төп музыка ҡоралын ҡурай тәшкил иткән берҙән-бер ижади коллектив.**

Оркестрҙың уңышы, тәү сиратта, уға нигеҙ һалған художество етәксеһе, Башҡортостандың халыҡ артисы Рәмил Мәүлит улы Ғәйзуллиндың иҫеме, тырышлығы менән бәйле. Даими ижади эҙләнеүҙәр юлында булған Рәмил Ғәйзуллин әленән-әле Рәсәй кимәлендә үткән төрлө сараларҙа ҡатнаша, сығыш яһай. Ғинуарҙа ул Мәскәү дәүләт академия филармонияһының П.И. Чайковский исемендәге концерт залында үткән "Ирина Архипова һәм Николай Некрасов тәҡдим итә" тигән программаға саҡырыу ала. Бында Рәсәй һәм БДБ илдәренән төрлө музыканттар һәм йырсылар ҡатнаша. Концертта Рәмил Ғәйзуллин СССР-ҙың халыҡ артисы, СССР Дәүләт премияһы лауреаты, профессор Николай Некрасов етәкселегендәге рус халыҡ музыка ҡоралдары академия оркестрына ҡушылып сығыш яһай. Тәүҙә Некрасов мәскәүҙәрҙе Башҡортостан, башҡорт сәнғәте, милли оркестр хаҡында таныштырып үтә. Унан Рәмил Ғәйзуллин 2000-гә яҡын тамашасы алдында ҡурай әшләп күрһәтә һәм ҡурайҙа башҡорт халыҡ йыры "Урал" ды башҡара. Уның сығышын тын да алмай тыңлаған тамашасылар, көй тамамланғас, ҙур концерт залын емерерҙәй көслө алҡышҡа күмә.

Февралдә Рәмил Мәүлит улы Смоленск ҡалаһында үткән халыҡ



музыка ҡоралдары оркестрҙары етәкселәренең ултырышында ҡатнашты. Был йыйылышта тәү тапҡыр 77 оркестрҙы үҙ эсенә алған "Рәсәй халыҡ ҡоралдары профессиональ оркестрҙарының ассоциацияһы" булдырылды. Ете кешенән торған ассоциация идараһы составына Рәмил Ғәйзуллин да һайлана.

"Музыка сәнғәтендәге оло фажиғә беҙҙе берләшергә мәжбүр итте. Беҙ халыҡтан сыҡҡанбыҙ һәм халыҡтыҡы булырға тейешбеҙ. Ә бөгөн еңел музыка, яһалма көйҙәр өҫтөнлөк итә. Шуға күрә, артабан ысын ижади һәм халыҡсан коллективтарҙы үҫтереү, уларҙың киләсәген булдырыу өсөн бер-беребеҙгә ярҙам итергә тейешбеҙ", - ти идара рәйесе итеп билдәләнгән Н. Осипов исемендәге халыҡ ҡоралдары академия милли оркестрының художество етәксеһе, Рәсәйҙең халыҡ артисы Владимир Александрович Понькин.

Ассоциация Рәсәй Федерацияһының халыҡ музыка ҡоралдары оркестрҙарын ижади һәм социаль-хоҡуҡи яҡтан яҡлау, йәғни музыкаль проекттарҙы һәм программаларҙы тормошҡа ашырыуға ярҙам итеү, халыҡ ҡоралдарында башҡарыу традицияларын һәм музыкаль мираҫыбыҙҙы һаҡлау һәм пропагандалау һ.б. кеүек йүнәлештәрҙе атҡарыуҙы төп маҡсаты итеп ҡуя.

Милли оркестрға килгәндә иһә, коллектив былтыр мартта Ҡазанда уҙғарылған Рәсәй халыҡтарының милли музыка ҡоралдары оркестры һәм ансамблдәренең Беренсе Бөтә Рәсәй конкурс-фестивалендә ҡатнашып, Рәсәйҙең 16 төбәгенән ҡатнашҡан 29 ижад коллективтары араһында беренсе урын яулауға өлгәшкәйне. Октябрь айында үтәсәк Гала-концертта Мәскәү дәүләт филармонияһының Чайковский исемендәге залында улар оркестрҙарҙың иңдәре менән бер рәттән сығыш яһаясаҡ.

**Әле коллектив Магнитогорск ҡалаһында үтәсәк Халыҡ-ара халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестрҙары конкурсында ҡатнашырға әҙерләнә. Бында улар ике номинацияла ла (оркестр һәм ҡурайсылар ансамбле) ҡатнашырға ниәт тота.**

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

КЕМ АЛЫҠ?

# Көлөп күңел асығыҙ,

## билет беҙҙә - отоғоҙ!

**Көлкө ғүмерҙе оҙайта, йәшәүгә көс-дәрт өҫтәй. 1 апрель - Көлкө көнө уңайынан Башҡорт дәүләт филармонияһы Көлкө фестивале уҙғара.**

1 апрелдә буласаҡ "Кәтүк-шоу" тамашаһында Әхәт Ураҙмәтов, Гөлсөм Хәбибуллина, Гөлзәмиә Ситдикова, Лилиә Фәтихова, Юнир Салауатов, Радик Вәлмөхәмәтов, Хәким Мортазин ҡатнаша.

"Ҡыҙыҡ-Мәҙәк" эстрада-көлкө театрының тамашалары 1 апрель - Өфө моторҙар эшләү берекмәһе һарайында, 2 апрель Башҡорт дәүләт филармонияһында үтә. Рәхәтләнеп күңел асып, кәйефтәрегеҙҙе күтәреп, түйғансы көлөп, ял итеп ҡайтҡығыҙ килһә, викторина һорауҙарына яуап етеҙерәк бирегеҙ. Һеҙҙе саҡырыу ҡағыҙҙары көтә.

1. "Кәтүк менән Бағанай" исемле дуэт ҡасан һәм кем тарафынан төҙөлә?

2. Тәүге Бағанай кем була?

3. Ҡыҙыҡ Ҡотлоәхмәтович ролен кем башҡара?

4. Лилиә Фәтихова ниндәй төркөмдә эшләй?

5. Бөтә ижад юлын юморға бағышлаған атаҡлы көлкө оҫтаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы кем ул?

Әйткәндәй, Көлкө фестивале ҡала һәм райондарҙа ла үтә.

"Ҡыҙыҡ-Мәҙәк" эстрада-көлкө театры тамашалары:

29 мартта - Бөрө, 30 мартта - Ҡырмыҫҡалы, 31 мартта Ишембай ҡалаһында буласаҡ.

"Кәтүк-шоу" тамашалары 3 апрелдә Туймазыла, 4 апрель - Октябрьский, 5 апрель - Үргә Йәркәй, 6 апрель - Языково, 7 апрель - Шаран, 8 апрель - Саҡмағош, 9 апрелдә Бүздәктә дауам итә.

АҠЫЛ – ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# Матур һөйләргә һәм...

## өндәшмәй тыңларға өйрән

Бары тик әрләүгә, йә бары маҡтауға ғына лайыҡ кеше бер ваҡытта ла булмаған һәм әле лә юҡ.
**(Будда).**

Тәрән булған урында йылға тыныс аға.
**(Уильям Шекспир).**

Төркөмдән ни тиклем юғарыраҡ күтәрелһәң, шул тиклем нығыраҡ сәпкә әйләнәһең.
**(Жак Барзун).**

Мәсьәлә "Кем хаҡлы?" тигән принциптан түгел, ә "Нәмә дөрөҫ?" тигән принциптан сығып ҡуйылырға тейеш.
**(Уильям Делоне).**

Белемде үҙләштереү өсөн уны аппетит менән "йоторға" кәрәк.
**(Анатоль Франс).**

Дүшәмбенән йомаға тиклем башҡаларҙан артта ҡалмаҫ өсөн, ә шәмбе һәм йәкшәмбелә башҡаларҙы уҙып китер өсөн эшлә.
**(Бер шәхси компанияның президенты).**

Әгәр ҙә кемдер тормош мәғәнәһе һәм ҡиммәттәре тураһында һораша икән - ул ауырыу.
**(Зигмунд Фрейд).**

Тупаҫ кеҫкә ҡарағанда, иркәләүҙәр һәм йылы һүҙ менән күпкә өлгәшеп була.
**(Эзоп).**

Түҙемлеләргә түләүһеҙ ҙә бирелгән нәмәләр түҙемһеҙгә бик ҡиммәткә төшә.
**(Француз мәҡәле).**

Бейеккә күтәрелеп еткәс, барыһынан да бигерәк ни эшләргә килә? Түбәнгә төкөргө килә.
(М. Горький).

Сәнғәттең ике төрлө ҡурҡыныс дошманы бар: таланты булмаған оҫта һәм оҫталығы булмаған талант.
**(Анатоль Франс).**

Намыҫлы кеше башҡаларҙың намыҫлылығына шик белдермәй.
**(Цицерон).**

Кемдеңдер күҙенә бәреп, әсе хәҡиҡәтте әйтергә йыйынаһың икән, тәүҙә тел осонд балға мансып ал.
**(Ғәрәп мәҡәле).**

Үҙеңдең ҡанаттарың булмаһа, сит ҡанаттар һине күккә күтәрә алмаҫ.
**(Эстон мәҡәле).**

Эш менән буламмы мин, әллә юҡ-бар менәнме, тип үҙ-үҙеңдән һорау бер ваҡытта ла һуң түгел.
**(А. Чехов).**

Болғансыҡ һыуҙы тыныслыҡта ҡалдыр - ул таҙа һәм үтә күренмәлегә әйләнер.
**(Ж. Сартр, француз фәлсәфәсеһе).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Афинаға Сократты эҙләп, алыҫ төбәктән бер йәш кеше килгән һәм унан матур һөйләргә өйрәнергә теләүен белдергән. Бер нисә минут әңгәмәләшкәндән һуң, Сократ һабаҡ биргән өсөн йәш кешенән икеләтә түләү алаҫағы хаҡында әйткән. "Ни өсөн?" тип һораған йәш кеше. "Сөнки миңә һине матур һөйләргә генә түгел, ә өндәшмәйенсә тыңларға ла өйрәтергә тура киләсәк", тип яуап биргән Сократ".**

«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡала округы Советы һәм хакимиәте
«Вечерняя Уфа» гәзите редакцияһы
**Баш мөхәррире:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.
**Мөхәррират:** Вячеслав ГОЛОВ, Әхмәр ҮТӘБАЙ, Радик ӨМӨТКУЖИН, Рәлиә БИКТИМЕРОВА

**Телефондар: 253-25-44; 252-39-99.**
E-mail: kiskeufa@ufacom.ru
«Киске Өфө»нөң индексы – 50665.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте, **253-25-44, 272-89-09, 273-35-92** телефондары буйынса, «Вечерняя Уфа», «Уфимская неделя» һәм «Киске Өфө» гәзиттәренә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә **253-25-44** телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

Гәзит РФ Матбуғат эштәре, телерадиотапшырыуҙар һәм киң информация саралары министрлығының Волга буйы төбәк-ара территориаль идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №7 –1675.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1.**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды,
(450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

Тиражы - 6212
Заказ 1330